ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

28-4 сентябрь - октябрь (нарыҫай - ҡарасай)

2019

№39 (873)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • Һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Батшаларға баш эймәгән әйләләрбеҙ!**



7

**Дауылда юлға сыҡҡанһың икән...**



елкәндәренде күтәреп ебәр 8-9

**Сибай ерлегендә...**

ғаилә ҡорҙом, хеҙмәт юлын башланым



11

**Көмөш күлдәр илендә,**

 асыл башҡорт ерендә



12-13,15

**ТВ-программа** 14

***Иғтибар! Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ әлеге ваҡытта 2020 йылдың беренсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 676 һум 02 тингә яҙыла ала. Гәзиткә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙән кемдәрҙеңдер матур китаптар менән бүләкләнеү ихтималлығы тураһында ла иҫкәртеп ҡуябыҙ. Гәзиткә яҙылыу тураһындағы мәғлүмәтте таныштарығыҙға, әйләнә-тирәләгеләрегеҙгә лә еткерһәгеҙ ине.***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

*ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!*

# ХАТАЛАРҘАН...

## арынайыҡ

**Һуңғы ваҡытта башҡорт телен интернет селтәренә күсереү буйынса ҙур эштәр башҡарыла, бында төрлө социаль селтәрҙәрҙең интерфейсын башҡортсаға тәржемә итеүҙән алып, төрлө гаджеттар өсөн башҡортса шрифтар эшләүҙе лә, башҡорттарҙың башҡортса яҙышырға тырышыуын да, баҫма матбуғаттың сайттарын булдырыу һәм уларҙа мәғлүмәттең даими яңырып тороуын да индерергә мөмкин. Был, бер яҡтан, бик яҡшы күренеш булһа ла, икенсе яҡтан, ниндәйҙер кимәлдә, киреһенсә, телебеҙгә ҡарата зыян да эшләй, тип әйтер инем.**

Ярай, үҙ-ара аралашыусылар хаталы ла яҙышты икән ти, әммә матбуғат сараларының сайттарында, башҡорт теле уҡытыусыларының, башҡорт телен үҫтереү йүнәлешендә эшләгән ойошмаларҙың сайттарында һәм социаль селтәрҙәрҙәге хәбәрҙәрендә даими ҡабатланған хаталарҙы бер нисек тә аңлатып та, аҡлап та булмай. Бында бары тик уларҙың башҡорт телен белмәүе генә күренә. Мәҫәлән, республикабыҙҙа абруйлы һаналған бер матбуғат баҫмаһын алып ҡарайыҡ. Һуңғы йылдарҙа әллә дөйөм кимәлебеҙ төштө, әллә материал әҙ, аптырап, ни бар, шуны бирә башланылар. Район гәзите кимәлендәге материалдар баҫыла, теле лә күҙгә күренеп насарайҙы. Күп рус һүҙҙәре (блюдо, предприятие) шул килеш алына. Тавтология тураһында әйтеп тә тораһы түгел! Бер ваҡыт, йыбанмайынса, иҫәпләп тә ултырғайным әле: Яңауыл тураһындағы мәҡәләлә бер абзацта биш тапҡыр предприятие ҡабатланды! Әстерхан сәтләүегe күптән инде грек сәтләүегенә әйләнеп китте.

Башҡа хаталар ҙа күҙгә төртөлөп тора: мәҫәлән, "атайыма яҙҙым" урынына - "атайға яҙҙым" тиҙәр. Кәрәкме, юҡмы, күплек ялғауы ҡуйыла: балалар мәктәпкә китеп баралар (балалар мәктәпкә китеп бара); улар күп итеп һүрәттәр төшөрәләр (улар күп итеп һүрәт төшөрә). Һөйләмдәр башҡортса төҙәлмәй, ғәҙәттә, рус теленән калька килеп сыға. Әйтһәң йәки яҙһаң, "Бөтә кеше лә башҡорт филологияһын тамамламаған", тип кенә яуаплайҙар. Беҙ үҫкәндә халыҡ башҡортса һөйләшә ине, телде тойомлау көслө ине. Дөрөҫ һөйләшеү өсөн филолог булыу кәрәкмәй, бала саҡтан телде тойомлау тәрбиәләнергә тейеш. Гәзит-журналдарҙа, уларҙың сайттарында, социаль селтәрҙәрҙә зәғиф һәм хаталы һөйләмдәр уҡыла, белем усаҡтарында башҡорт теле һәм әҙәбиәте икенсе сортлы фәндәр рәтендә өйрәнелә - баланың хәтерендә туған теле шулай булып һаҡланып ҡала ла инде. Мәктәптәрҙә дәрестәр һаны ҡыҫҡартылған осраҡта ла, исмаһам, гәзит-журналдарҙа, социаль селтәрҙәрҙә, шулай уҡ ғаиләләрҙә камил башҡорт телен ҡулланайыҡсы әле!

**Наилә ЯМАЛОВА.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Бөгөн - Бөтөн донъя йөрәк көнө. Шул айҡанлы һиңә бер һорау: нимәгә йөрәгеңде бөтөрәһең?

***Әкрәм КӘЙЕПҠОЛОВ, Баймаҡ районы Икенсе Этҡол ауылы:*** Йөрәкте ауырттырып, гел борсоп торған проблемалар күбәйеп китте шул бөгөн. Бына әле мәктәптәрҙә яңы уҡыу йылы башланыу уңайы менән дә һөйөнә торған урынға көйөнөргә тура килә. Ни өсөн тигәндә, беҙҙә ата-әсәләрҙең балаларын туған телдәрендә түгел, ә русса уҡытыу өсөн ғариза яҙыуына шаҡ ҡатам. Йәнәһе лә, башҡортса уҡыһалар, Берҙәм дәүләт имтихандарын бирә алмаясаҡтар, имеш.

Күңел яраһына сәбәпсе тағы бер афәт - эскелек. Ауылдарҙа былай хәҙер айыҡлыҡ өсөн ниндәйҙер эштәр башҡарыла башланы ул, шуға эргә-тирәлә бындай алама ғәҙәтте үҙ иткәндәр һирәгәйә төштө һымаҡ. Минең үҙемдә лә булды ундай гонаһ йәшерәк саҡта, 15 йыл шул ағыуҙың ҡоло булғандан һуң, шөкөр, бер һелтәүҙә ташланым да ҡуйҙым. Йонсоманым да, "баш төҙәтергә" лә кәрәкмәне, һис бер ниндәй ауырлығы булманы - хәҙер, уның ҡарауы, айыҡлыҡтың өҫтөнлөгөн, ҡиммәтен тойоп, йәшәү ҡәҙерен аңланым. Тик бына район үҙәгенә барған һайын ҡала урамдарында, автовокзал тирәһендә гел иҫерек ҡатындарҙы - милләттәштәрҙе күреп йөрәгем әрней. Кемдеңдер ғәзиз ҡыҙҙары, әсәләре, ҡатындары бит улар, тик яңылыш юлға баҫҡан был ҡатындарҙың яҙмыштары бер кемде лә борсомай...

**(Дауамы 2-се биттә).**

*АФАРИН!*



**Өфөлә Мостай Кәримдең "Беҙҙең өйҙөң йәме" повесы буйынса "Һеңлекәш" фильмының премьераһы уҙҙы. Премьера Башҡортостандың халыҡ шағиры, күренекле яҙыусы, драматург һәм йәмәғәт эшмәкәре Мостай Кәримдең бер быуатлыҡ юбилейы йылында ҙур мәҙәни ваҡиға булды. Ә 20-24 сентябрҙә Ялтала үткән "Евразия күпере" халыҡ-ара кинофестивалендә Александр Галибиндың был фильмы "Иң яҡшы уйын фильмы" номинацияһында Гран-при яуланы.**
**19 сентябрҙә картина киң прокатҡа сыҡты.**

**(16-сы биттә уҡығыҙ).**

12+

✓ *Илдәге система халыҡты көнкүреш хәстәренә генә батырыуға ҡоролған. Хатта ниндәйҙер социаль яҡлауға хоҡуғың булғанда ла, ул ярҙамды алыу өсөн дә әллә күпме бюрократия ҡаршылыҡтарын үтеү кәрәк.*



УЙЛЫҒА - УЙ

# ҠАТНАШ НИКАХ...

## үҙеңә лә, милләтеңә лә юғалтыу ул



**Гәзиттең үткән һанында ҡатнаш ғаиләләр тураһында фекер алышыу юҫығында "Милләт әсәһе бул!" тигән баш аҫтында һорау-яуап баҫылды. Ошо хаҡта мин дә үҙ фекерҙәремде еткермәксемен.**

Ҡатнаш никах ҡороусы йәштәр һәр ваҡыт мөхәббәткә һылтана, ә атай-әсәйҙәр "Әйтеп ҡараныҡ та ул, хәҙергеләр тыңламай бит", тип уфтана. Әлбиттә, көршәк ватылған, тукмауҙың бер генә лә файҙаһы юҡ. Әммә ғаилә ҡорорға теләүсе йәштәргә шуны әйткем килә.

Беренсенән. Мөхәббәт күктәрҙә ярала, бер бөтөн икегә бүленеп бар була, аҙаҡ табыша, тиҙәр. Бәлки, шулайҙыр ҙа. Әммә Тәбиғәт (Хоҙай, Алла) кешелек донъяһы халыҡтарын милләттәргә бүлеп яратҡан һәм уны һәр төрлө саралар менән (тел, традиция, ғөрөф-ғәҙәт, моң үҙенсәлеге) һаҡларға тырышҡан икән, мотлаҡ ҡауышырға тейеш булған ике яртыны, моғайын, үҙ ҡанундарына ҡаршы килеп, ике төрлө милләт мөхитенә бүлмәгәндер.

Икенсенән. Ғаилә ҡороуҙың төп маҡсаттарының береһе - артабан ишәйеү, кешелек донъяһын дауам итеү. Тимәк, балалар бағыу. Ә был бик ҡатмарлы бурыс. Кешенең тышкы ҡиәфәтен, үҙен тотошон, аралашыу әҙәбен, хеҙмәткә, тәбиғәткә, белемгә мөнәсәбәтен тәрбиәләүҙә бөтөн кешелек донъяһы халыҡтары өсөн уртаҡ ҡағиҙәләр булһа ла, иң ҡатмарлыһы - күңел донъяһы тәрбиәләү. Әске тойғолар донъяһы фәҡәт үҙ милләтеңдең ҡиммәттәре нигеҙендә генә тәрбиәләнә. Әске тәрбиә сифаттары бала тыуғанда уҡ уның ҡанында, күҙәнәктәрендә, булмышында туплана. Үҙғәртергә маташҡанда ла фәҡәт үҙ ҡалыбы эсендә генә камиллаштырырға мөмкин. Туған моң, холоҡ-фиғел, һәләт - тәрбиә менән булдырып булмай торған төшөнсәләр. Улар баланың тәбиғәтенә, булмышына ярала башлағанда уҡ һалына. Хатта, медиктарҙың раҫлауынса, ашаған ризыҡтағы, йәки атай менән әсәйҙең бала тыуғанға тиклем тукланыуындағы айырма ла бала сәләмәтлегенә бик ныҡ тәьҫир итә. Шулай булғас, ни эшләп бала күңелен бүлгеләп, теткеләп маташырға?..

Өйләнешкәндә төрлө яҡлап уйларға кәрәк. Мөхәббәтләнеү өс баҫыстан ғибәрәт: күҙ күрә, күңел елпенә, йөрәк хәл итә. Ана шул иң тәүге мәлдә, күҙ күргән осорҙа, ныклап, һәр яҡлап уйлаған йәш кеше аҙаҡ үкенмәй ҙә, балаһын да аптырауға һалмай.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# *Бөгөн - Бөтөн донъя йөрәк көнө. Шул айҡанлы һиңә бер һорау: нимәгә йөрәгеңде бөтөрәһең?*

**(Башы 1-се биттә).**

Йөрәкте өйкәгән өсөнсө мәсьәлә - һуңғы ваҡыт тәбиғәтебеҙгә, уның кейек-йәнлектәренә ҡарата аяуһыҙлыҡ. Ауылыбыҙ биләмәһенә ҡараған урман-ҡырҙарҙың мул ғына өлөшө һунарсылыҡ шөғөлө өсөн буленгәйне, хәҙер шунда ситтән ҡомһоҙ браконьерҙар килеп тулды - урман кейектәренә көн дә бөттө. Айыуын да ала улар, мышыға атырға ла ҡулдары ҡалтырамай, һуйыр, ҡор кеүек матур ҡоштарҙы ла аяп тормайҙар. Был ниндәй вәхшәтлек әҙәм балаларында! Миңә ҡалһа, шул һунарсылыҡ кәсебен, ҡыр хайуандарын атыпҡырып ләззәт тапҡан был ҡырағай шөғөлдө, ғөмүмән, тыйырға кәрәк, тип иҫәпләйем. Урмандарҙы ҡуртымға биреп бөттөләр ҙә, хәҙер уның байлыҡтарын тәләфләргә тотондолар, бер ниндәй контроллек итеүсе орган да, вазифалы кешеләр ҙә юҡ, ни теләйҙәр - шуны эшләйҙәр. Бер кем яуап бирмәй. Был турала хәҙер сараһыҙлыҡтың көнөнән тура-нан-тура республика Башлығына мөрәжәғәт итергә тура килер, тип уйлайым. Уның ҡарамағындағы "Инцидент" системаһы, моғайын, берәй тикшереү ебәрер йә сара күрер ине, исмаһам. Әмәлгә ҡалғандай, яңыраҡ шундай хәбәр ҙә ишетелеп ҡалды: РФ Тәбиғәт ресурстары һәм экология министрлығы Рәсәй урмандары һәм ҡыр хайуандары хаҡын ҡайтанан билдәләгән. Мышы һәм башҡа ҡайһы бер ҡыр кейектәренең дөйөм хаҡы 400 тапҡырға тиклем арттырылған, тип яҙалар. Бирһен Хоҙай, браконьерҙарға ҡайырып түләү һалыу ғына айнытыр ине, бәлки...



***Илшат ИБРАҺИМОВ, табип:*** Йөрәккә уй һалып, борсоп торған мәсьәләләр кешене ғүмере буйы оҙата киләләр, тип уйлайым. Йөрәк кеше организмының иң һиҙгер һәм нескә ағзаһы. Бөтөн стресс һәм тетрәнеүҙәрҙе иң беренсе булып ул ҡабул итә; аҡыл "уйлағансы", тәүге яраны йөрәк үҙенә алып та өлгөрә. Ғөмүмән, теләһә ниндәй конфликт нигеҙендә йөрәк менән аҡыл ҡапма-ҡаршылығы ята. Уларҙың икеһен бер кәскә туплап, "килештереп" йәшәү һәләте һәр кемгә лә бирелмәйҙер ҙә, бәлки. Тән ағзалары булыуҙан тыш, бына шундай фәлсәфәүи категория ла бит ул йөрәк менән аҡыл темаһы. Үҙ-үҙең менән килешеп йәшәү өсөн генә түгел, ә сәләмәтлегең өсөн дә кәрәк әле ул берсә - аҡылыңды, берсә йөрәгеңде тыңлау. Ә инде күберәк аҡылын тыңлап өйрәнгән кеше иң тәүҙә ни-мәнең үҙе өсөн яҡшы һәм дөрөҫ булыуын самалай, нигеҙҙә шәхси мәнфәғәттән сығып эш итә, ә йөрәк һүҙенә ҡолаҡ һалырға яратыусылар ғәҙәттә игелекле, ғәҙел, тоғролоҡло була, ләкин улар шул уҡ ваҡытта, имеш, көсһеҙ, уңмаған, ҡыйыуһыҙ булып та күренә икән. Уның ҡарауы, "Аҡыл - ала, йөрәк - бирә", "Аҡыл - ҡурҡаҡ, йөрәк һәр саҡ батырлыҡҡа, осошҡа талпына", "Йөрәгеңде алдай алмаҫһың" тигән ҡанатлы һүҙҙәр ҙә бар. Ҡыҫҡаһы, бая әйткәнемсә, аҡыл һәм йөрәк килешеүе буйынса йәшәү генә алтын урталыҡта булырға мөмкинлек бирә. Йөрәк борсолоуҙарына килгәндә иһә, тормош-көнкүрешебеҙҙәге проблемаларға күнеккәнбеҙ инде, миңә илдәге, халыҡ-ара кимәлдәге ваҡиғалар көсөргәнеше тынғылыҡ бирмәй. Нигеҙле-нигеҙһеҙ, сейле-бешле социаль реформалар минең генә түгел, күптәрҙең йөрәгенә ятып етмәйҙер, тип уйлайым. Туған телебеҙҙең бөгөнгө хәле, киләсәге йөрәкте һыҙландыра. Балаларыбыҙ, ейәндәребеҙ киләсәген уйлап, уларҙың бөгөнгөһөн хәстәрләп тә йөрәкте бөтөрөргә тура килә, сөнки уларҙы бигерәк әҙергә өйрәтеп ташланыҡ. Әлеге БДИ арҡаһында ҡайһы вузға балдар суммаһы үтә - шунда уҡып сығып, яратҡан һөнәренә эйә була алмағандар байтаҡ. Хәҙер осраҡлы урындарҙа эшләп, үҙҙәрен таба алмауҙары йөрәкте әрнетә.

***Сабира НИЯЗОВА, мәҙәниәт хеҙмәткәре:*** Минең йөрәгемде рухи идеяларымдың, хыялдарымдың көнкүреш ваҡлыҡтары, мәшәҡәттәре аҫтында күмелеп ҡалыуы бөтөрә. Йәшәү, ашау өсөн эшләүҙән үтеп булмауы бөтөрә. Кешеләрҙең (һәм үҙемдеңдә) башын өскә, күккә ҡарай йүнәлтә алмауы, йондоҙло күккә лә бағырға ваҡыт тапмауы, һәр саҡ ашығып, көсәнеп йәшәп, бары ерҙәге етешһеҙлектәргә генә шаһит булып йөрөргә мәжбүр булыуы...

Илдәге система халыҡты көнкүреш хәстәренә генә батырыуға ҡоролған. Хатта ниндәйҙер социаль яҡлауға хоҡуғың булғанда ла, ул ярҙамды алыу өсөн дә әллә күпме бюрократия ҡаршылыҡтарын үтеү кәрәк. Ниндәйҙер көндәлек, мәғәнәһеҙ, ваҡ эштәр менән булышыу, туктауһыҙ аҡса табыу тураһында ғына уйлау деградацияға алып килә. Быларҙың барыһын да аңлайһың, беләһең, әммә ошо ҡалыптан сығыр әмәл юҡ. Ипотека, кредиттар, коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләү, балаларҙы кейендереү, уҡытыу кеүек хәстәрҙәр яурынға таш булып ятҡан. Ошо марафон эсендә әллә ниҙә бер барып ҡараған концерттылаолобайрам итеп ҡабул итәһең. Асылда бит былай булырға тейеш түгел! Хеҙмәт бит рухи ҡиммәттәрҙе тулыландырыусы физик тәғәйенләнеш кенә булырға тейеш. Рухи үҫеш иң алда барырға тейеш. Ә беҙ тап ана шул мәғәнәһеҙ хеҙмәткә ҡол булғанбыҙ. Сит ил ни өсөн ҡыҙыҡһындыра беҙҙе? Ундағы йәшәү шарттары яҡшыраҡ булыуы, кешеләренең үҙҙәрен ысын һәм тулы хоҡуҡлы граждандар итеп тойоуы, социаль яҡлаулы, ҡараулы йәшәп, йәмғиәттәренең иреклелеге, иркен күренеүе ҡыҙыҡтыра. Тап ошо көнкүрештең аяҡҡа һалынған быҒау булып тороуы, ижади тормош һәм эшмәкәрлектән ҡәртәләүе, сикләүе бөтөрә йөрәкте.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республикала йәшәүселәрҙе йорттарға йылы бирелмәгән осраҡта социаль селтәрҙә үҙенә хәбәр итергә саҡырҙы. Радий Хәбировтың социаль селтәрҙәге сәхифәләре: "Бәйләнештә", Facebook, Instagram һәм "Класташтар". Алдан хәбәр ителгәнсә, Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә йылытыу миҙгелен 23 сентябрҙән башларға йөкләмә бирҙе.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Лилиә Ғүмәроваға Рәсәй Федерацияһы Федераль Йыйылышының Федерация Советы ағзаһы - Рәсәй Федерацияһы Федераль Йыйылышының Федерация Советында Башҡортостандан вәкил вәкәләттәрен тапшырыу тураһындағы указға ҡул ҡуйҙы.

✓Республика Башлығы Радий Хәбиров бойороғо менән Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһе урынбаҫары вазифаһын башҡарыу бурысы Искәндәр Әхмәтвәлиевҡа йөкмәтелде. Башҡортостан Башлығының икенсе бойороғо менән Динир Әхмәтйәнов үҙ теләге менән республика Башлығы Хакимиәте етәксеһе урынбаҫары вазифаһынан бушатылды.

✓Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы балаларға тәмәкеһеҙ тартыу ҡатнашмалары, таштар, сироптар һәм уларҙың аналогтарын, шулай уҡ уларҙы ҡулланыу йәйланмаларын - кальяндар, вейптар, электрон парга әйләндереүселәр һатыуҙы тыйыу тураһында закон ҡабул итергә ниәтләй.

✓Радий Хәбиров ҡарары менән Өфө ҡалаһының 2-се Башҡорт лицейына күренекле башҡорт яҙыусыһы Ғәли Ғиззетдин улы Ибраһимовтың исеме бирелде. Документҡа ярашлы, лицей биләмәһендә ҡыҙҙары Һөйөклө Ибраһимова һәм Гүзәл Корнилаева-Ибраһимова аҡсаһына Ғәли Ибраһимовтың бюсы ҡуйыла.

✓Республика Дәүләт Йыйылышының сираттан тыш пленар ултырышында депутаттар Хәйҙәр Вәлиевты Башҡортостандың Конституция суды рәйесе урынбаҫары вазифаһына тәғәйенләү тураһында ҡарар ҡабул итте. Ағымдағы йылдың 28 мартына тиклем ул республиканың Үҙәк һайлау комиссияһын етәкләне, ә ваҡытынан алда отставкаға сыҡҡандан һуң республика Башлығының дәүләт хеҙмәте һәм кадрҙар сәйәсәте идаралығы начальнигы итеп тәғәйенләнде.

БЫЛ АЙҘА...

**Халҡыбыҙ телендә йыл миҙгелдәренә ҡағылышлы ғәжәп ҡылыҡһырламалар, тос һүрәтләүҙәр, ғибрәтле әйтемдәр, зирәк сағыштырыуҙар бик күп, "Башҡорт халыҡ ижады"ның мәҡәлдәр һәм әйтемдәр томын уҡый башлаһаң, айырылып булмай - ҡыҙыҡлы романдарың ары торһон. Бөтөн миҙгелдәргә лә тигеҙ ҡарашта булып, һәр береһенең мөһимлеген иҫкә төшөрөп, мәртәбәһен баһалаған хәлдә лә, алтын көҙҙөң урыны башҡа халыҡ күңелендә. "Яҙғы көн - ярты аҡыл, көҙгө көн - көр аҡыл", "Яҙ үлмәгән - көҙ үлмәҫ", "Көҙҙөң йәме көлтә менән", "Күҙ өсөн яҙ яҡшы, ауыҙ өсөн көҙ яҡшы" тигән тапҡыр һүҙҙәрҙән дә асыҡ аңлашылып тора был мөнәсәбәт.**

# КӨҘГӨ КӨН - КӨР АҠЫЛ

Уңыш, муллыҡ һәм туҡлыҡ символы көҙ, шулай итеп, халыҡта элек-электән яҡшы кәйеф һәм сәләмәтлек сығанағы булараҡ һаналып килә. Шуғалыр ҙа, бәлки, был ай календарында аҙыҡ-түлек, сәләмәтлек тураһында йышыраҡ телгә алына. Икмәк булһа, йыр ҙа булыр, тигәндәй, ҡарасайҙа (октябрь) Халыҡ-ара музыка көнө лә **(1)**, Бөтөн донъя йылмайыу көнө лә **(4)**, Бөтөн донъя икмәк көнө лә **(16)**, ана шул хуш еҫле икмәкте ауыл мейесендә ҡабартып бешереп алыусы унған Ауыл ҡатындары көнө лә **(15)** бар. Артабан Аҙыҡ-түлек сәнәғәте эшсәндәре лә **(20)** үҙҙәренең һөнәри байрамын билдәләр, ләкин уларҙың хеҙмәте бөгөн сәләмәтлеген ҡайғыртҡан кешеләр араһында бер ҙә ихтирам менән телгә алынмай. Был бигерәк тә ҡала мөхитенә ҡағыла, сөнки ауыл халҡы был йәһәттән отошлораҡ хәлдә: күпселек аҙыҡ-түлекте ул үҙ хужалығында етештереп ҡуллана. Ә бына магазиндарҙа һатылған аҙыҡ-түлек араһынан зыянһыҙ һәм файҙалыһын һайлап та алып булмай, һирәк ундай ризыҡ бөгөн. Магазин һәм баҙар кәштәләре уйынсыҡ һымаҡ матур, ләкин пестицид менән ағыуланған хәүефле йәшелсә-емеш менән тулды. Көндәлек аҙыҡ-түлекте лә сараһыҙҙың көнөнән һатып алаһың һәм унда күпме пестицид, үҫеш гормондары һәм антибиотиктар, консерванттар, Е өҫтәмәләре, яһалма тәмләткестәр һәм башҡалары, башҡалары хаҡында уйланып баш ватаһың. Һөҙөмтәлә ашағаның, тәбиғи, организмға сәләмәтлек өҫтәмәй, киреһенсә, сир сығанағына әйләнә. Антибиотикһыҙ ит тә, башҡа төр ит ризыҡтары ла бөгөн юҡ, ти белгестәр. Хатта шундай кәңәш тә бирәләр: итте өс сәғәт буйы ҡайнатыу ундағы антибиотиктың 90 процентын юҡҡа сығара, имеш. Был осраҡта антибиотиктың 20 проценты тарҡала, ә 70 проценты һурпаға сыға. Шуға ла ҡайһы бер хужабикәләр һурпаның туртаһын алып ташлай йә ит ҡайнап сыҡҡас төүге һурпаны түгә, йә уны, нисек кенә һурпа эскеһе килмәһен, бөтөнләй ҡулланмай. Хатта ондоң да бит сифатына етди дәғүә белдерелә бөгөн. Халыҡ-ара табип көнө **(7)**, Бөтөн донъя күреү һәләте, Бөтөн донъя психик сәләмәтлек **(10)**, Бөтөн донъя инсульт менән көрәш **(29)** көндәре юкҡа ғына календарь биттәренән урын алмағандыр. Әйткәндәй, Рәсәйҙә инсульттан ғына ла йыл һайын 450 мең кеше ваҡытһыҙ рәүештә яҡты донъя менән хушлаша.



Ә шулай ҙа күңелһеҙ темаларҙан арынып, ҡарасайҙың иң ҙур байрамы хаҡында онотоп китмәйек. Республика көнөн **(11)** быйыл беҙ Башҡортостан Башлығы вазифаһына быйылтыр ошо көндә тәғәйенләнгән Радий Хәбировтың күптән түгелге һайлауҙарҙа күпселек тауыш менән Башҡортостан Башлығы итеп һайланған көндәрҙә ҡаршылайбыҙ. Шуға күрә лә Башҡортостандың киләсәген халыҡ тарафынан һайлап ҡуйылған яңы етәксе исеме менән бәйләүебеҙ бер ҙә осраҡлы түгел. Яңы етәксенең һайлауға тиклемге эшмәкәрлегенән сығып, республика халҡы Башҡортостанды Рәсәйҙең алдынғы төбәктәренең береһе иҫәбенә сығарыуға, халыҡтың тормош кимәлен яҡшыртыуға Радий Фәрит улы бөтөн көсөн һалыр, тип ышаныс белдерә.

Быйыл Башҡортостандың автономиялы республика статусын яулауына бер быуат тулыу менән бәйле бик күп шанлы тарихи ваҡиғалар билдәләнде. Шуларҙың бер нисәүһе башҡорт матбуғатына ҡағыла. Сентябрь сығарылышында беҙ революцион Петроградты һаҡлаусы ғәскәрҙең башҡорт телендә сыҡҡан "Салауат" гәзите хаҡында телгә алғайныҡ. Октябрҙә иһә шул уҡ йылда (1919) Омскиҙа башҡорттарҙың Рәсәй Көнсығыш окраинаһы Хәрби-милли идаралығының матбуғат органы булған "Ҡаһарман башҡорт" гәзитенең тәүге һаны баҫылып сығыуға 100 йыл тула. Был тарихи даталар халҡыбыҙҙың яҙма матбуғат баҫмаларына ҡеүәтле ойоштороу, туплау һәм тәрбиә сараһы булараҡ шул йылдарҙа уҡ ихтирам менән ҡарауын раҫлай. Ошо уңайҙан әсә телебеҙҙе һаҡлау, өйрәнеү, үҫтереү бурысы ҡырҡыу мәсьәлә булып торған бөгөнгө көн, үкенескә, башҡорт телендә сыҡҡан яҙма матбуғат баҫмаларына иғтибарҙың кәмегәндән-кәмей барыуын һәм шул уҡ ваҡытта гәзит-журналдарыбыҙҙың дәүләт яҡлауына ла бик ҙур мохтажлыҡ кисереп йәшәүен әйтеп китмәй булмай. Ҡарасайҙың күп һанлы иҫтәлекле көндәренән тағы ла Өлкән йәштәгеләр **(1)**, Халыҡ-ара социаль педагог **(2)**, ОМОН, Бөтөн донъя айыҡлыҡ көнө һәм алкоголизмға ҡаршы көрәш **(3)**, Бөтөн донъя йәнлектәрҙе яҡлау **(4)**, Уҡытыусы **(5)**, Бөтөн донъя почта **(9)**, Ауыл хужалығы һәм эшкәртеү сәнәғәте эшсәндәре, шулай уҡ Стихиялы һәләкәттәр хәүефен кәметеү буйынса халыҡ-ара көндәр **(13)**, Заповедник эше хеҙмәткәрҙәре, Халыҡ-ара стандартлаштырыу **(14)**, Фәҡирлекте бөтөрөү өсөн халыҡ-ара көрәш **(17)**, Юл хужалығы эшсәндәре, Статист, Авиадиспетчер, Ашнаҡсы көндәре **(20)**, Реклама хеҙмәткәре **(23)**, Махсус тәғәйенләнеш подразделениелары **(24)**, Бөтә Рәсәй гимнастика **(26)**, Автомобиль һәм ҡала пассажирҙар транспорты **(27)**, Халыҡ-ара мәктәп китапханалары **(28)**, Сәйәси золом ҡорбандарын иҫкә алыу **(30)**, Бөтөн донъя ҡалалар һәм Халыҡ-ара экология **(31)** көндәре билдәләнәсәк. Шулай уҡ быйыл **16 октябрҙә** З. Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте ойошторолоуға ла 100 йыл тулыуҙы әйтеп китеү кәрәк.

**Ҡарасайҙа тыуғандар:**

**1 -** шағир, прозаик, драматург, публицист, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Ғәзим Шафиҡовтың тыуыуына - 80 йыл** (1939-2009).

**4 -** А. Мөбәрәков исемендәге Сибай башҡорт дәүләт театры актеры, Башҡортостандың халыҡ артисы **Риф Сәйфуллинға - 70 йәш** (1943).

**14 -** шағир, Ш. Бабич исемендәге премия лауреаты **Рәйес Түләковтың тыуыуына - 60 йыл** (1959-2007).

**20 -** Башҡортостандың халыҡ шағиры, драматург, тәнҡитсе, публицист, 1951-1962 йылдарҙа БАССР Яҙыусылар берлеге идараһы рәйесе, Социалистик Хеҙмәт Геройы, Рәсәй кимәлендәге бик күп премиялар, шул иҫәптән БАССР-ҙың Салауат Юлаев исемендәге премияһы лауреаты **Мостай Кәримдең** ( Мостафа Сафа улы Кәримов) **тыуыуына - 100 йыл** (1919-2005).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Дыуан районының Республика лицей-интернатына Башҡортостандың халыҡ шағиры Тимербай Йосоповтың исеме бирелде. Ғафури районының Красноусол башҡорт гимназия-интернаты хәҙер билдәле ғалим Нияз Мәжитовтың исемен йөрөтә. Башҡортостан Хөкүмәтенең тейешле ҡарарҙары республиканың хоҡуҡи мәғлүмәт порталында баҫылды.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров йәмәғәт транспортында түләү терминалдары эшен тикшерергә ҡушты. Быға шәхси пассажир ташыусыларҙың бөтәһенең дә автобустарҙа яңы түләү системаһына күсмәүе сәбәпсе булды. Бөгөнгә республикала 125 мең "Алға" картаһы һәм транспорт ҡушымтаһы булған 250 мең уҡыусы картаһы һатылған.

✓Республика парламентының пленар ултырышында "Берҙәм Рәсәй" вәкиле Суфия Зидиханованың депутат вәкәләттәрен ваҡытынан алда һалыуы тураһында ҡарар ҡабул итеү күҙаллана, тип хәбәр итә Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышының матбуғат хеҙмәте. Ошо көндәрҙә Дәүләт Йыйылышы шулай уҡ ЛДПР-ҙан Айгөл Ханафинаның вәкәләттәрен ваҡытынан алда һалыуы тураһында ҡарар ҡабул иткәйне.

✓Башҡортостан Хөкүмәте 2020 йылда ике төп мосолман байрамын билдәләү тураһында ҡарар ҡабул итте. Документҡа ярашлы, республикала Ураҙа байрамы - 24 майҙа, ә Ҡорбан байрамы 31 июлдә билдәләнә. Был көндәр ял тип иҫәпләнә.

✓Аҫҡар Абдразаҡов Башҡорт опера һәм балет театрының художество етәксеһе итеп тәғәйенләнде. Аҫҡар Әмир улы Абдразаҡов - Рәсәйҙең опера йырсыһы (бас), Башҡортостандың халыҡ артисы, Мариа театры солисы, Башҡортостан Республикаһы Башлығының мәҙәниәт һәм сәнғәт буйынса кәңәшсеһе.

✓Хәсән Татриев "Роснефть" составындағы "Башнефть" компанияһының яңы президенты итеп тәғәйенләнде. 2015 йылдан Хәсән Татриев Рәсәйҙәге ҙур нефть сығарыу предприятиеһы, "Роснефть"тең "РН-Юганскнефтегаз" бүлендек компанияһы етәксеһе булған.

✓1 октябрҙә Өфөлә Башҡортостан Республикаһының 100 йыллығына арналған VIII "Мин яратам һине, тормош!" республика фестиваленең гала-концерты була. Сағыу һәм матур байрам "Торатау" конгресс-холына өлкән быуындың талантлы һәм көр күңелле 500-ҙән ашыу вәкилен йыя.

ҠЫҪҠАСА

# БИШ ЙЫЛЛЫҠҠА...

✓**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров алдағы биш йылға республиканың социаль-иҡтисади үҫешенең стратегик йүнәлештәре тураһындағы указға ҡул ҡуйҙы.** Радий Хәбиров һүҙҙәренсә, документ ентекле әҙерләнгән. Тиҙҙән брифингтар уҙғарыу күҙаллана, уларҙа хөкүмәт ағзалары республика үҫешенең стратегик йүнәлештәре, алдағы йылдарҙа нимә менән шөғөлләнергә йыйыныуҙары тураһында һөйләй. Башҡортостан Башлығы командаһында республика социаль-иҡтисади үҫешенең стратегик йүнәлештәре хаҡында указды "беренсе үҫеш биш йыллығы" тип йөрөтәләр. Барлыҡ йөкләмәләрҙе һәм пландарҙы яңыртылған хөкүмәт башҡара. Уның составы ай дауамында билдәле булырға тейеш.

✓**2020 йылда Башҡортостанда республика Башлығы Радий Хәбировтың сентябрь указы сиктәрендә "Ауыл тренеры" проекты ғәмәлгә индерелә.** Уға 60 миллион һум бүлеү күҙаллана, тип хәбәр итте йәштәр сәйәсәте һәм спорт министры Руслан Хәбибов. "Бөгөн ауылдарҙа 130 тренер етешмәй. Башҡортостандың 200 мәктәбендә "Спорт көрәше - мәктәптәргә" программаһын индереүҙе иҫәпкә алғанда, был ҙур һан. Киләһе йылда республика башлығы указы сиктәрендә "Ауыл уҡытыусыһы" һәм "Ауыл табибы" проекттарына оҡшаш "Ауыл тренеры" проектын тормошҡа ашырыу эшенә тотонабыҙ", - тип аңлатты министр. Уның һүҙҙәренсә, ауылдағы спорт мәктәбенә эшкә ҡайтҡан һәр тренерға муниципалитет билдәләгән осорҙа эшләү шарты менән бер тапҡыр 600 мең һум аҡса түләнә.

✓**Республиканың автомобиль юлдарында һәм урам-юл селтәрендә 169 - стационар, 63 - күсмә, 6 - мобиль, барлыҡ юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоуҙы теркәүҙең 238 автоматлаштырылған комплексы эшләй.** Быйыл июлдә Рәсәй Президенты Владимир Путин РФ Дәүләт Советы ултырышы һөҙөмтәләре буйынса автомобиль юлдары селтәрен үҫтереү һәм юл хәрәкәте хәүефһеҙлеген тәьмин итеү мәсьәләһе буйынса бурыстар билдәләгәне. Шуларҙың береһе булып тап юл хәрәкәтендә ҡатнашыусыларға юл хәрәкәте хәүефһеҙлеген боҙоуҙы теркәүсе автоматик комплекстарҙың ҡайҙа урынлашыуы тураһында мотлаҡ хәбәр итеү тора.

✓**2019 йылдың авгусында Өфөлә торлаҡтың квадрат метрының уртаса хаҡы 0,5 процентҡа арҡан.** ЦИАН порталы белгестәре мәғлүмәттәре буйынса, Башҡортостандың баш ҡалаһында бер "квадрат" бөгөн 72,5 мең һум тора. Июлдә был сумма 72,2 мең һумға тиң ине. Шулай уҡ эксперттар һуңғы йылда Өфөлә бер квадрат метрҙың хаҡы 10 процентҡа артты, тигән һығымтаға килгән, 2018 йылдың авгусында иһә "квадрат" өсөн уртаса 66,2 мең һум һорағандар. Башҡортостандың баш ҡалаһында бер бүлмәле фатирҙың уртаса майҙаны - 36,3 квадрат метр, ә уртаса хаҡы 2 278 094 һум тәшкил итә.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# БЫНДАЙ ФИЛИАЛ КӘРӘК!



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Һаулыҡ һаҡлау сәғәте" күсмә кәңәшмәһендә Урал арьяғында Башҡорт дәүләт медицина университетының филиалын асырға тәҡдим итте.**

"Беҙ әҙер. Һеҙҙән йөкләмәләр көтәбеҙ", - тине БДМУ ректоры Валентин Павлов. Шулай уҡ Башҡорт дәүләт медицина университеты ректоры быйыл 1300-ҙән ашыу табиптың юғары уҡыу йортон тамамлауы хаҡында һөйләне. Статистикаға ярашлы, 2024 йылға БДМУ алты меңдән ашыу белгес әҙерләп сығарырға тейеш. Ике йылдан вуз беренсел звено табиптарына (терапевтар һәм педиатрҙар) ҡытлыҡ мәсьәләһен хәл итергә, биш йылдан республика һаулыҡ һаҡлау системаһында кадрҙарға ҡытлыҡты тулыһынса бөтөрөргә ниәтләй. Валентин Павлов һүҙҙәренсә, алты йыл уҡығандан һуң күпселек - ординатураға, 500-ҙән ашыу белгес илдең башҡа вуздарына артабан уҡырға китә, 300-гә яҡыны терапевт һәм педиатр булып эшкә урынлаша, ә 10 процент самаһы һөнәрен ҡалдыра һәм, ҡағиҙә булараҡ, кире әйләнеп ҡайтмай.

Башҡортостан етәксеһе район башлыҡтарына ординатураны тамамларға тейешле белгестәр менән тығыҙыраҡ эшләргә, вуз тамамлаусыларҙы район медицина учреждениеларына йәлеп итеүгә яуаплы ҡарарға, уларға эш һәм йәшәү шарттары булдырырға тейеш, тип билдәләне. Әле республикала табиптарға матди ярҙам саралары эшләй. "Ауыл табибы" федераль проекты буйынса 99 табипҡа - 1 миллион һум, 10 фельдшерға - 500 мең һум, "Ауыл фельдшеры" республика программаһы буйынса 72 медикка - 500 мең һум, 125 табипҡа 1 миллион һум бирелә.

# ҠУНАҠТАР КӨТӘБЕҘ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Мәскәүҙә VI Бөтә донъя фольклориадаһына әҙерләнеү һәм уны уҙғарыу буйынса федераль ойоштороу комитеты ултырышында ҡатнашты. Республикала Халыҡ-ара фольклор фестивале 2020 йылдың 18 июленән 1 авгусына тиклем барасаҡ, унда 100 илдән 3 меңдән ашыу кешенең ҡатнашыуы күҙаллана.**

Кәңәшмәне асып, Рәсәй Хөкүмәте рәйесе урынбаҫары Ольга Голодец 2017 йылдың 1 июнендә Рәсәй Президенты Владимир Путин VI Бөтә донъя фольклориадаһын үткәреү тураһындағы указға ҡул ҡуйыуын иҫкә төшөрҙө. 2018 йылдың 6 февралендә Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәтенең 2020 йылғы Фольклориадаға әҙерләнеү һәм уны уҙғарыу буйынса ойоштороу комитетын булдырыу тураһындағы бойороғо сыҡты.

"Был традицион сара алтынсы тапҡыр ойошторола. Беҙгә төрлө илдәрҙән коллективтар килә. Фестивалде юғары кимәлдә үткәрергә тейешбеҙ", - тип билдәләне Ольга Голодец.

Радий Хәбиров ошо күләмле сараға әҙерлек барышы хаҡында һөйләне. Уның һүҙҙәренсә, 100 илдән 3 меңдән ашыу ҡатнашыусы үҙҙәренең милли йыр-моңо, бейеүҙәре, халыҡ кәсептәре, аш-һыуы, кейемдәре һәм сәхнә сәнғәте менән таныштыра. Әлеге ваҡытта 85 дәүләт ҡатнашыуҙарын раҫланы. Фестиваль көндәрендә Башҡортостанға 2,5 миллион самаһы турист килер тип көтөлә. "Фольклориаданың программаһы республиканың баш ҡалаһы менән генә сикләнеп ҡалмай, ә бөтә районадарҙы һәм ҡалаларҙы үҙ эсенә ала. Бөгөнгә сығыш яһау майҙансыҡтары, фестивалдә ҡатнашыусыларҙың йәшәү һәм туҡланыу урындары билдәләнгән, - тине Радий Хәбиров. - Алда ҙур эш тора. Күмәк көс менән бөтә донъя мәҙәни форумын юғары кимәлдә уҙғара алырбыҙ тип ышанабыҙ".

# БАЛА ҺӨНӘР ҺАЙЛАЙ

**2020 йылда Өфөлә уҡыусылар һәм мәктәп тамамлаусылар өсөн Һөнәри әҙерлек үҙәге асыла. Был хаҡта мәғариф министры вазифаһын башҡарыусы Айбулат Хажин һөйләне.**

"Һөнәри әҙерлек үҙәген 2020 йылда асыу күҙаллана. Беҙ "Мәғариф" милли проекты сиктәрендә 50 миллион һумлыҡ грант оттоҡ. Майҙансыҡты Тыныслыҡ урамының 14-се йортонда урынлашҡан бизнес үҙәгендә булдырыу ҡарала", - тине Айбулат Хажин.

Мәғариф министры һәм хеҙмәт, ғаилә, халыҡты социаль яҡлау министры Юрий Мельников һүҙҙәренсә, һөнәри әҙерлек үҙәге алтынсы-ун беренсе класс уҡыусылары өсөн көндәлек эш форматында эшләргә, балалар унда ҡыҙыҡлы уйын формаһында ниндәй һәләттәрен үҫтерергә кәрәклеген, ниндәй һөнәри мөхиткә ҡарағанын билдәләй алырға, эш биреүсе менән аралашырға өйрәнергә тейеш. Мәктәптәрҙә лә һөнәри йүнәлеш биреү эше алып барыла. Иртә һөнәри йүнәлеш биреү проекты сиктәрендә быйыл Өфө районының Миловка ауылында аграр университет һәм урта махсус уҡыу йорттары менән берлектә агрокласс асылды. Уҡыусылар бишенсе кластан алып һөнәр серҙәренә төшөнөргә тейеш. "Яңы һөнәрҙәр атласы" проектының да һөнәри йүнәлеш биреүҙә ярҙамы ҙур. Уның ярҙамында уҡыусыларҙың хәҙерге һөнәрҙәрҙән тыш, киләсәк һөнәрҙәре менән танышыу мөмкинлеге бар. 2019 йылдың аҙағына проект әҙер булырға тейеш. Унда 22 тармаҡ буйынса яңы һөнәрҙәр күрһәтелә, айырым блок эшҡыуарлыҡҡа арнала.

ЙЫЛ ВАҠИҒАҺЫ

# ҮҘ ӨЛӨШӨНДӨ...

## үҙеңә насип ҡыл!

**Күптән түгел шундай хәл-ваҡиға булды: бер исемлеккә теркәлергә кәрәк, ә минең һис кенә лә ваҡытым юҡ. Әхирәтем, теркәлдеңме лә теркәлдеңме тип, көн һайын ҡолаҡ итен ашай. "Уф! Юҡ әле. Ә теркәлмәһәм ни була?" - тип һораймын. "Артыҡ хәүефле бер ни ҙә булмай, бары тик был сарала ашау-эсеү теркәлгән кеше һанына ҡарап ҡына алына, урындар ҙа шулай билдәләнә. Шунан, тарих өсөн дә был исемлек кәрәк булыуы бар". Уның яуабынан шул аңлашылды: теркәлеү үтмәһәм дә ул сарала ҡатнаша алам, әммә башҡалар ашағанда ас ултырып ҡалыуым, ул ғына ла түгел, урындар исемлек буйынса булғас, хатта урынһыҙ ҙа ҡалыуым мөмкин. Ошонан һуң тиҙ генә теркәү үтеп тә ҡуйҙым...**

Башҡортостанстат журналистар менән үткәргән түңәрәк ҡорҙағы һөйләшеүҙең асылы ла тап ошо үрҙә яҙ-

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Республика көнө унайынан Башҡортостанда йәшәүселәр октябрҙә өс көн ял итә. Йома, 11 октябрь - байрам көнө. Шәмбе һәм йәкшәмбе, 12 һәм 13 октябрь, ял була. Кесаҙна, 10 октябрҙә, эш көнө бер сәғәткә ҡыҫҡара. Киләһе оҙайлы ялдар ноябрь башына тура килә, улар Халыҡтар берҙәмлеге көнөн билдәләү менән бәйле.

✓1 октябргә тиклем федераль льгота алыусыларға яңы йылда социаль хеҙмәттәр йыйылмаһын алыу формаһын һайларға кәрәк. "Льготалар алыуҙың ғәмәлдәге формаһын ҡалдырыу өсөн ғариза яҙырға кәрәкмәй. Киләһе йылдың 1 ғинуарынан уны үҙгәртергә теләгән осраҡта Пенсия фонды идаралығына ғариза бирергә кәрәк, - тине Рәсәй Пенсия фондының Башҡортостан буйынса бүлексәһе идарасыһы Фоат Хантимеров. Әлеге ваҡытта социаль хеҙмәттәр йыйылмаһының хаҡы айына 1121,42 һум тәшкил итә.

✓БР Хеҙмәт министрлығы инвалид балаларҙың ата-әсәләре өсөн бушлай "Социаль ял" хеҙмәтен ойошторҙо. Туймазы районында урынлашҡан Серафимовка йорт-интернаты 4 йәштән 18 йәшкәсә баланы 30 көнгә ҡабул итә. Проектҡа ҡатнашыу өсөн баланың ата-әсәһенә йәки законлы вәкилдәренә документтар пакетын, шул иҫәптән медицина анализдарын килтерергә кәрәк.

✓Башҡортостан спортсыһы Айгөл Ғәрәева юниорҙар араһында велоуҙыш буйынса донъя чемпионы булды. Ул, ғәмәлдәге донъя чемпионы Ширин ван Анруйҙы уҙып китеп, 13,7 сәкрым арауыҡта беренсе булып килде. Юниорҙар араһында велоуҙыш буйынса донъя чемпионатын Англияның Йоркшир графлығы ҡабул итте.

✓Һауа шарттарының боҙолоуына һәм юлда боҙлауыҡ барлыҡҡа килеүгә бәйле Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы һәм Өфөнөң Граждандарҙы яҡлау идаралығы автомобилселәрҙән машиналарының тәғәрмәстәрен алмаштырыуҙарын һорай. Шулай уҡ автоһәүәҫкәрҙәргә юлда йөрөү тәртибен үҙгәртергә: арауыҡты арттырырға, тиҙлек режимын үтәргә, киҫкен маневрҙар яһамаҫҡа, ҡапыл туҡтамаҫҡа тәҡдим итәләр.

✓Башҡорт дәүләт аграр университетының өсөнсө курс студенты Наилә Ғәлина бишенсе Бөтә Рәсәй милли һәм олимпияға ҡарамаған спорт төрҙәре фестивалендә иң көслө ҡыҙ тип танылды. Спортсы, 24 килограмм гирҙе 127 тапҡыр күтәреп, гер спорты буйынса алтын миҙал яуланы. Был хаҡта республиканың Спорт министрлығынан хәбәр иттеләр.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Интернет аша иҫәп үткәндә махсус код бирелә һәм ул иҫәп алыусының исемлегендә сағылыш таба. Шулай ҙа иҫәп алыусы йортоғоҙға килеп, кодты сағыштырып ҡарай һәм ғаилә ағзалары барыһы ла иҫәп үткәнме икәнен белешә ала.*



ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# БӘНДӘ БАҒЫШЛАЙ,

## Хоҙай һағышлай



**Кәрәкте бирәме йыл? Кем әйтмешләй, быйыл тиртунды сисеп тә торманыҡ - йәйен дә һыуыҡ булды, әле Әбейҙәр сыуағына өмөт иткәйнек тә, хыялдар һабын ҡыуығы кеүек шартланы. Көн тағы ла шул тиртунға ҡалды: урамда аҡ күбәләктәй ҡар күҙҙәре оса. Ярай әле, йорттарға йылы биреп ҡыуандырҙылар. Беҙ ҡышҡа әҙер тиһәң дә була. Ә бына коммуналь техника әҙерме икән? Баш ҡала округы хакимиәтендәге сираттағы оператив кәңәшмәлә төп урынды ошо мәсьәлә алып торҙо ла инде.**

Был тармаҡтағы хәл-торош менән Коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы начальнигы Рөстәм Хәмитов таныштырҙы. Ҡаланың коммуналь предприятиелары көҙгө-ҡышҡы миҙгелдә урам-юл селтәрен таҙартыуға йәлеп ителәсәк 442 берәмек техника әҙерләй. Шуныһы ҡыуаныслы: баш ҡалаға былтыр декабрҙә - 39, быйыл 35 берәмек яңы техника, шулай уҡ киң ҡулланылышлы, шул иҫәптән ҡышын боҙлауыҡтарға махсус ҡатнашма һибеү өсөн дә ҡулайлаштырылған 7 берәмек КДМ ЭД-405Б техникаһы һатып алынған. Ҡала райондары менән килешеү буйынса ҡала бюджеты иҫәбенә тағы 32 берәмек техника алынасаҡ, ә инде БР Торлаҡ-коммуналь хужалығы министрлығы аша тағы ла 7 ЭД-405Б машинаһын алыуға заявка ебәрелгән. Тимәк, быйыл "Техника иҫке, техника етешмәй" тигән зарланыуҙар аҙыраҡ буласаҡ. Сығыш яһаусы белдереүенсә, боҙлауыҡҡа ҡаршы яңы реагенттар - галит минераль концентраты (7940 тонна) һатып алынасаҡ һәм ҡулланыласаҡ, шулай уҡ бионорд алыу мәсьәләһе хәл ителгән. Ҡар иретеү пункты тәүлек әйләнәһенә эшләргә әҙер. Ғөмүмән, Өфөнөң коммуналь предприятиеларына һауа торошо үҙгәреүе ҡурҡыныс түгел. Әлеге ваҡытта юл үткәргестәр, күперҙәр, урам-юл селтәренең хәүефле урындары боҙлауыҡҡа ҡаршы ҡатнашма менән эшкәртелгән. Башгидромет белдереүенсә, алдағы көндәрҙә лә һауа торошонoң үҙгәреүсән, ҡарлы-ямғырлы булыуы көтөлә. Тимәк, бында коммуналь хеҙмәттәргә генә түгел, автомобиль хужаларына ла яуаплылыҡ тойорға кәрәк.

Шулай уҡ кәңәшмәлә ҡала хакимиәте делегацияһының Белорус сәнәғәт-инвестиция форумында ҡатнашыу йомғаҡтары ла ҡаралды. Хакимиәттең идаралыҡ начальнигы Елена Суворова белдереүенсә, өфөләр унда ҡала йәшәйешен тәьмин итеү һәм төҙөкләндереү тармағында махсус техника яңылыҡтары менән танышҡан. Минск ратушаһындағы рәсми осрашыуҙа яҡтар автомобилдәрҙе парковкалау, заманса балалар баҡсалары һәм бассейндар төҙөү, граждандар менән ике яҡлы һөйләшеүҙәр алып барыу өсөн һөҙөмтәле бәйләнеш мәсьәләләре буйынса фекер алышҡан. "Минск автомобиль заводы" предприятиеһы менән танышыу өфөләр өсөн һөҙөмтәле була: Өфө ҡалаһын таҙартыу буйынса махсус автохужалыҡ завод менән хеҙмәттәшлеккә - техниканы лизингка алыу тураһында килешеүгә өлгәшкән.

Оператив кәңәшмәлә яңғыраған һандар һәм яңылыҡтар, әлбиттә, ҡыуаныслы, сөнки ҡыштың ниндәй булырын алдан күҙаллап булмай. Кеше бағышлай, Хоҙай һағышлай, тигәндәй, тәбиғәттең үҙ ҡанундары. Ә беҙгә бары тик уның һынауҙарына ниндәйҙер кимәлдә булһа ла әҙер торорға кәрәк.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

---

ған ваҡиға менән ауаздаш булды - тап бер йылдан, 2020 йылдың 1 октябренән Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу уҙғарыла. Эйе, унда ҡатнашмаһаң да була, әммә, һаңға бар - һағышҡа юҡ, тигәндәй, миллионлаған кеше араһында һин дә буталанып йөрөйәсәкһең, әммә үҙеңдең өлөшөң, урының, ҡыҫҡаһы "мин"ең булмаясаҡ!

Юҡҡа ғына тотош донъяла һәр 10 йыл һайын халыҡ, ауыл хужалығы һәм улар араһында башҡа иҫәп алып барылмай. Әгәр һәр айырым хужалыҡ үҙенә күрә бәләкәй дәүләт тип күҙ алдына килтерһәк, уның хужалары ла бит киләсәккә план төҙөү өсөн үҙенә күрә иҫәп алып бара, мөмкинлеген самалай, ниндәй етешһеҙлеккә иғтибар бирергә, уны бөтөрөргә кәрәклеген асыҡлай икән, оло дәүләт тә шундай принциптан сығып эш итә, әммә уның яуаплылығы ҙурыраҡ. Ләкин ошо оло яуаплылыҡ һәр кемдең кескәй генә яуаплылығынан барлыҡҡа килә. Ҡыҫҡаһы, халыҡ иҫәбен алыу - ул һәр кемдең илдең үҫешен планлаштырыуға индергән бәләкәй генә өлөшө. Хатта иҫәп алыусылар биргән һорауҙар ниндәйҙер кимәлдә үтә шәхси булһа ла ҡурҡырға ярамай - барлыҡ мәғлүмәт конфиденциаль һәм ул дөйөмләштерелә. Хәҙерге юғары технологиялар заманында иҫәп алыусыны көтөп тормайынса, Дәүләт хеҙмәте (Госуслуги) сайтына инеп, электрон иҫәп алыу ҡағыҙҙарын үҙаллы тултыра алаһығыҙ. Әммә бында шуны онотмағыҙ: әйтәйек, бер йортта нисә кеше йәшәй, уларҙың барыһы ла иҫәпкә алынырға һәм быны бер кеше башҡарырға тейеш. Йәғни, бер кеше сайтҡа инеп, 4-5 кешенән торған ғаиләне иҫәпкә ҡуя. Белгестәр әйтеүенсә, быны өсөн уртаса алғанда 30 минут ваҡыт китеүе һәм был эсул менән халыҡтың 10 проценты теркәлеүе ихтимал. Интернет аша иҫәп үткәндә махсус код бирелә һәм ул иҫәп алыусының исемлегендә сағылыш таба. Шулай ҙа иҫәп алыусы йортоғоҙға килеп, кодты сағыштырып ҡарай һәм ғаилә ағзалары барыһы ла иҫәп үткәнме икәнен белешә ала.

Ғөмүмән, халыҡ иҫәбен алыуға әҙерлек күптән бара һәм уның беренсе этабы муниципалитеттарҙа үткән: объекттарҙың сиктәре билдәләнгән, исемлектәр төҙөлгән һәм асыҡланған, мәғлүмәт тупланған. Икенсе этабы декабрҙән киләһе йылдың беренсе кварталы тамамланғансы барасаҡ. Был ваҡытта ойоштороу планы төҙөләсәк, перепись алыу персоналы асыҡланасаҡ. 2010 йылғы иҫәп алыуҙа барлығы 13 мең иҫәп алыусы ҡатнашһа, киләһе йыл улар 10 мең генә буласаҡ, йәғни барлыҡ иҫәп алыусылар планшеттар менән тәьмин ителгәнлектән, уларға эш күләме арттырыласаҡ.

Әлбиттә, бер йыл дауамында беҙ гәзит уҡыусыларҙы төрлө мәғлүмәт менән яйлап таныштырасаҡбыҙ, ә әлегә иң мөһиме - миллионлаған кеше араһында һинең дә тауышың ишетелһен, һинең "мин"еңдең дә үҙ өлөшө булһын өсөн уйлана тор, хөрмәтле гәзит уҡыусы!

**Земфира ХӘБИРОВА.**

---

БАШ ҠАЛАМ



# БЕР РӘХӘТТЕҢ БЕР МИХНӘТЕ

**Күп фатирлы йорттарҙа подъездарҙы ремонтлау башланғас, ниһайәт, тип еңел һулап ҡуйҙыҡ. Сөнки быға тиклем гелән косметик ремонт эшләнә лә, шуның менән эш тә бөтә ине.**

Әлбиттә, капиталь ремонт булғас, ҡайһы бер уңайһыҙлыҡтарға ла түҙергә тура килә инде. Мәҫәлән, беҙ биш ҡатлы хрущевкала йәшәйбеҙ һәм бындай йорттарҙа лифт юҡ. Шуға ла юғары ҡатҡа менеп еткәнсе ундағы фатир хужаларының аяҡ кейеме табандары ғына түгел, хатта үҙҙәре лә бысранырға өлгөрә. Ни тиһәң дә, был территорияла ысын мәғәнәһендә ремонт бара: электр һәм башҡа кабелдәр хәрәкәт итергә ҡамасаулап, һәленеп тора, эшселәр ҡаттарҙы бүлеп-бүлеп түгел, тотош эшләй. Фатирҙа бит беҙ бер бүлмәлә ремонт эшләгәс, унда тәртип булдырып, шунан икенсеһенә күсеп өйрәнгәнбеҙ. Шулай уҡ подъездарҙа ошо ваҡыт эсендә саң һуларға ла тура килә. Әммә киләсәктә матурлыҡта йәшәргә теләйбеҙ икән, бындай хәл-торошҡа күнәбеҙ инде. Юҡҡа ғына, бер рәхәттең бер михнәте тимәгәндәр бит.

Икенсе яҡтан, ремонт эштәрен ситтән ялланған бригадалар башҡармаясаҡ, тигән мәғлүмәттәр ишетелеп ҡалһа ла, беҙҙең подъезда үзбәк егеттәре эшләй. Бәлки, был бер яҡтан һәйбәттер ҙә, сөнки ошо ваҡыт эсендә уларҙың эсеп, тәртип боҙоп йөрөгәндәре булманы. Тыныстар, итәғәтлеләр. Ҡайһы бер ваҡыт, шуның менән генә ярлыланып китмәбеҙ әле, тип, ашатып та сығарабыҙ. Икенсе яҡтан, үҙебеҙҙең республикала, ауыл-райондарҙа ҡулы эш белгән егет-ҡыҙҙар юҡмы икән әллә, тип аптырап та ҡуяһың. Исмаһам, бер аҙ аҡса эшләрҙәр ине.

Әле беҙҙә ремонт дауам итә, шуға артабан нисек булырын әйтә алмайым. Был егеттәр подъездарҙы ремонтлап, буяп ҡына китерме, ошо һәленеп торған төрлө сымдарҙы ла эшләргә тейештәрме икән, әллә ул электриктарҙың бурысымы? Юҡһа, ҡайһы бер йорттарҙа ремонттан һуң да сымдар буялған стеналарҙы йәмһеҙләп, һәленешеп тора, тип зарланыусылар булды. Шуға әлегә эштәр тамамланыуын көтәбеҙ. Моғайын, подъездарҙы беҙҙең йорт советы рәйесеме, кемдер ҡабул итеп алырға тейештер бит. Ул эштәр еренә еткерелмәй тороп, ҡабул итмәҫ, тип өмөтләнәбеҙ.

**Валерий ВӘЛИЕВ.**

---

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Шалҡан

❖ Шалҡандың үҙендә лә, япраҡтарында ла кальций күп, шуға ла һөйәк һәм тештәрҙең оҙаҡ һау булыуын теләһәгеҙ, шалҡан ашағыҙ, бала-сағаға ла кимерергә бирегеҙ. Шалҡан уртты ныҡыта, теш тиреһе зарарланыуын да булдырмай.

❖ А витамины күп, шалҡан һарыраҡ төҫтә булған һайын был витамин да күп була.

❖ Эсәктәре насар эшләгән кеше өсөн шалҡан үтә лә файҙалы.

❖ Шалҡандағы үҫемлек еңһәләре тәндәге артыҡ холестеринды ла сығара.

❖ Магний тоҙҙары гел борсолоп йөрөүҙән, йоҡоһоҙлоҡтан ҡотҡара.

❖ Тештәрегеҙ насар булһа, ҡырғыстан ҡырып йәки бешереп ашарға.

❖ Ашҡаҙан сирле булһа, нәҙек һәм йыуан эсәк йәрәхәте, ауырыуы булһа, шалҡан ашарға ярамай, эскәккә һауа йыйылыуға килтерә. Шалҡан ашағас, һыу ҙа эсмәҫкә.

### Етен орлоғо

❖ Етен орлоғо атеросклероз булғанда, эс ҡатҡанда файҙалы.

❖ Орлоҡтан әҙерләнгән төнәтмә менән ауыҙ эсе боҙолғанда, унда ваҡ йәрәхәттәр барлыҡҡа килгәндә сайҡарға кәрәк. Төнәтмәне әҙерләү: 2-3 балғалаҡ тартылған орлоҡто 1 стакан һалҡын һыуға һалып, 3-5 минут талғын утта ҡайнатып, көнөнә 2 тапҡыр яртышар стакан эсергә.

❖ Етен орлоғонан алынған лайла тын алыу юлдары шешкәндә, гастрит, энтерит сире булғанда файҙалы. Лайланы әҙерләү: 1 балғалаҡ орлоҡто ярты стакан ҡайнар һыуға һалып, 15-20 минут ентекләп болғатырға, көнөнә 3 тапҡыр ашар алдынан 1 ҡалаҡ эсергә.

### Имән сәтләүеге

❖ Имән сәтләүеге һарҡындыһын бешкән, туңған урындарға һөртәләр, ҡайһы бер тире ауырыуынан да файҙалы.

❖ Эс киткәндә имәндең ҡабығын йәки сәтләүеген ҡайнатып эсергә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ БАЛАҪЫ

**Популяр мотивтар (ромбтар, өсмөйөштәр, трапециялар, ауыш сатраш, йондоҙҙар һ.б.) йышыраҡ барыһы ла бер балаҫта ҡулланылған. Ромбтар, мәҫәлән, барлыҡ балаҫтарҙа ла бар.**

Өсмөйөш тә иң йыш осраған фигура. Композицияһына ҡарап, уларҙы ниндәйҙер фигураның эсендә лә, үҙәк фигура тирәләй ҙә, ҡаймала ла күрәбеҙ. Нигеҙе менән тоташып, улар ромб йәки дүрткел, ҡабырғаһы менән тоташып трапеция йәки параллелепипед барлыҡҡа килтерә ала. Ҡаймала өсмөйөштәрҙән үҙенсәлекле рәт һуғыла. Ромб периметры буйынса теҙелгән ваҡ ҡына өсмөйөштәр ҡауырһынлы орнамент булдырып, Урта Азия балаҫтары һәм һөнәрселәр һуҡҡан ебәкте хәтерләтә.

Ошоға оҡшаш орнамент өлгөләре Урта Азияның көньяғындағы малсыларҙың балаҫтарында, биҙәкле йөн таҫмаларҙа, йүкәнән үрелгән япмаларҙың биҙәктәрендә осрай.

Төрки телле халыҡтарҙа балаҫ биҙәүҙә ҡусҡарҙар йыш осрай. Ромбтың остары кәкерсәләр яһап тора, йәки эре ҡуш мөгөҙҙәр ҙур булмаған ромбты ике яҡлап урата. "Мөгөҙлө" 4 ромбтан торған ирекле композиция миҫалы булып Ҡырмыҫҡалы районы балаҫы тора. Ул Рәсәй этнография музейында һаҡлана.



*"Мөгөҙлө" ромб - көньяҡ-көнбайыш балаҫтары орнаменты детале.*
*Т. Сурина фотоһы*

Үзбәк балаҫтарын өйрәнеүсе ғалим В.Г. Мошкова билдәләүенсә, үзбәк, ҡырғыҙ, ҡаҙаҡ һәм башҡа милләт оҫтабикәләре "һарыҡ мөгөҙө" тип атаған был биҙәк көнкүреше малсылыҡ менән бәйле Урта Азия халыҡтарында иң боронғо һәм иң йыш ҡулланылған биҙәк. Үзбәктәрҙә, ҡырғыҙҙарҙа, ҡаҙаҡтарҙа ҡаймала йәки балаҫтың дөйөм композицияһында һәм башҡа һуғылған, үрелгән әйберҙәрҙә интеграл формаһындағы элемент осрай. Уның кәсерсәктәрендә асылып килгән сәскә тажы йәки фонарҙе хәтерләткән фигуралар бар. Өсмөйөштәрҙән йыйылған был биҙәк Урта Азия балаҫтары орнаментында осрай һәм "умыртҡа бағанаһы" тип атала. Бер-береһенең эсендә урынлашҡан төрлө төҫтәге ромбтар һәм үҙәгенә ромб урынлаштырылған тешле биҙәктәрҙе ҡаҙаҡтар айға оҡшатып, "Айшыҡ" тип йөрөткән. Ҡаҙаҡ балаҫтарында ошо элементтар менән бер рәттән, 8 осло йондоҙ йыш ҡулланыла.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

ШАҢДАУ

# "ЙОМОШ, ХӘЙЕР, ҮТЕНЕС..."



**Миләүшә Ҡаһарманованың "Киске Өфө" гәзитенең 38-се һанында сыҡҡан ошо мәҡәләһен уҡығас, мин дә үҙемдең бер кәлимә фекерем менән уртаҡлашмаҡсы булдым. Автор ифрат көнүҙәк проблемаларҙың береһен - тәрбиә юлының бер төрөн асып биргән, тип уйлайым.**

Хәҙер балалар тулыһынса яңы технологиялар менән мәшғүл булып, ысын йәнле аралашыуҙы онота бара. Уларҙы урамдағы түгел, ә смартфондағы дуҫтар көтә. Быныһы - беренсе сәбәп булһа, икенсеһе ата-әсәгә бәйлелер, тип уйлайым. "Үҙебеҙ етешһеҙ тормошта үҫтек, хатта шырпыға ла кешегә йөрөнөк", - тип кенә ебәрә бит ҡайһы берәүҙәре. Балаларын ошо "ыҙанан" йолоп алып ҡалып, һөҙөмтәлә, бәләнең олорағына юлығыуҙарын аңламайҙар. Дөрөҫ, хәҙер кеше элекке кеүек йомош-юлға йөрөрлөк хәлдә етешһеҙ йәшәмәй. Шунлыҡтан, күрше-күлән менән аҙнаһына бер осрашмаған саҡтар ҙа була. Ҡалаларҙа ҡайһылар күршеһен дә белмәй йәшәй.

Бала саҡта беҙҙе әсәйҙәр бер семтем сәйгә, тоҙға, биш-алты шаҡмаҡ шәкәргә, ярты икмәк, биш-алты йомортҡа, һауыт-һабаға ла йомошҡа йөрөтөр ине. Күршенең мунсаһын яғып төшөргә һорап барыу ҙа балалар иңенә төшә. Шулар араһында иң күңеллеһе - ҡунаҡҡа саҡырыу. Әсәйебеҙ сит кешеләргә барып ингәс, нимә тип әйтергә, нисек итеп саҡырырға өйрәтеп ебәрә. Әсәй ҡушҡанды ҡабатлап, йомошто үтәгәс, өй хужаларынан маҡтау һүҙҙәре ишетәһең. "Уй аллаҡайым, ҡайһылай уңғанһың, һаулыҡ һораша белә, ҡунаҡҡа саҡырырға эшкингән бит" - тип, хуплап, берәй тәмлекәс тотторол сығарып ебәрәләр. Икенсегә быңдай йомошто әсәй өйрәтмәһә лә урынеренә еткереп үтәй беләһең инде. Икенсенән, кеше менән һөйләшергә, аралашырға ла өйрәнәһең - быныһы ғүмерлек һабаҡ. Өсөнсө һәм иң отошлоһо тип уйлайым: бала бәләкәйҙән йомош йомошлау, кешеләрҙең хәленә инеү кеүек төшөнсәләрҙе һеңдереп үҫә. Дүртенсенән, ул артабан үҙ йәшәйешендә ошондай аралашыу мөнәсәбәтен ҡора белеү ысулын ҡуллана ала. Төрлө мөхиттә үҙен нисек тоторға өйрәнә, лидерлыҡ сифаттары ла асыла бара. Мин дә балаларымды ҡунаҡ саҡырырға йөрөттөм. Улар хәҙер үҙҙәре атай-әсәй, ә шул йомошҡа барыуҙарын бер мәрәкә итеп иҫкә алырға яраталар.

Кешегә күстәнәс тотоп инеү, көтөп тороусыларға бүләк менән ҡайтыу ҙа шул юл хәйеренең бер рәтенә инә бит ул, тип өйрәтә торғайны миңә әсәйем. Хәйер бирер кешең өйҙә булмаһа, ҡапҡаһына еткәс, урамынан кире боролма, шунда һалып булһа ла кит, тип әйтә торғайны. Шулай уҡ: "Юлға сыҡһаң, уң күршеңдән фатиха ал, ҡайтып инһәң дә уң күршеңә рәхмәт уҡы, ашарыңа ултырғанда, ҡаршы күршеңә фатиха бир", - тип әйтә торғайны. Йәш саҡта был аҡылдарҙың мәғәнәһенә әллә ни төшөнмәһәм дә, йәшәй бара яҡшы аңланым.

Берәүгә лә сер түгел: хәҙер кешеләр бер-береһенә йомош бирер тороу тигән нәмәне лә онотто. Шулар рәтенә үтескә әйбер, аҡса биреү кеүектәр ҙә инә. Ҡайһы берәүҙәр яҡын туғандарынан да бурысҡа алып тора алмай. Был ана шул аралаша алыу кимәленең сикле булыуының һөҙөмтәһе. Етеш йәшәү ҡайһы берәүҙәрҙә ысынлап та үҙен башҡаларҙан өҫтөн икән тип уйлауға килтереп ҡуя. Ҡиммәтле машиналар, затлы кейемдәр, ҡиммәтле ял йорттарында булыуҙы хәйер, йомош, үтес биреү менән тиң булырлыҡ төшөнсәләр түгел тип иҫәпләйҙәр. Ундайҙарҙа рухи ҡиммәттәр юғала бара: кеше хәле - кештәктә, үҙемдеке - үҙәктә, тип йәшәү принцибы өҫтөнлөк ала. Улар өсөн йомош - юҡ, үтескә - кәртә, хәйер биреү - иҫкелек күренеше. Шулай ҙа ундайҙар ҙа бер килеп асылдарына ҡайта ул. Бындай миҫалдар тормошта етерлек.

Яңыраҡ миңә бер уҡыусым: "Рәйсә Миҙхәт ҡыҙы, шуның (исемен әйтә) менән һөйләшеп ҡарағыҙ әле, ул һеҙҙе тыңлаясаҡ", - тип, икенсе уҡыусым менән һөйләшеүемде үтенде. Был да үҙенә күрә йомош. Күрәһегеҙ, уҡыусым минең аша икенсе йәштәше менән һөйләшеп килешә алды. Был да йәш кешенең үтенес белдерә, шул үтенес аша аралаша алыу мөмкинлеге. Ошо алымды эшләй белмәһә, ул да йөрөр ине йомошон йомошлай алмай. Эйе, йомоштоң йөкмәткеһе үҙгәрҙе хәҙер, ләкин ул балаларҙы заман технологиялары аша ғына түгел, ә йәнле, тере аралашыуға этәрә.

Әле яңыраҡ ауылыбыҙҙың зыяратын матур итеп кәртәләтеп ҡуйҙылар. Был эшкә тип аҡса йыйылғайны. Хәйер ебәреүселәр илебеҙҙең төрлө нөктәләрендә йәшәүсе, әле хәйер төшөнсәһен онотоп бөтмәгән ауылдаштарыбыҙ булып сыҡты. Әрүахтарыбыҙ өсөн хәйер булһа, ерҙәгеләргә был сауаплы йомош бит ул.

Күптән түгел Ҡорбан байрамы булды. Ауылдаштарымдың күбеһе ҡорбан салып, аят уҡытып ҡалды. Милләттәштәребеҙ араһында был күренештең изге традицияға әйләнә барыуы ла күҙгә салына. Был да сауаплы изге ғәмәл, үҙ бурысыңды үтәп, иманыңа ҡайтыу, Аллаһы Тәғәләгә яҡынайыу.

Автор әйткәнсә, йомоштоң ябай йомош булыуынан бигерәк тәрбиәүи йөкмәткеһе ҡиммәтерәк. Бер ҙә йомош һорамай, үтес алмай, үтескә бирмәй йәшәргә, бәлки, мөмкиндер, әммә күңел йылылығы менән бүлешмәй, хәл белешмәй, сауап алмай, башҡаларға файҙалы булмай йәшәүҙең мәғәнәһе бармы икән?..

**Рәйсә ИҪӘНБАЕВА.**
**Баймаҡ районы Нигәмәт ауылы.**

БЕҘГӘ ЯҘАЛАР



# ШАТЛЫҠ ҠАЙҘА ЙӘШӘЙ?

**Һеҙҙең ынйы эҙләүселәр тураһында ишеткәнегеҙ бармы? Ә уны хатта эҙләргә лә кәрәкмәй, ынйылар үҙебеҙҙә бихисап. Тап быңа Нөгөш һыуһаҡлағысын Башҡортостан ынйыларының береһе тип йөрөтәләр ҙә инде.**

Күптән түгел Сибай ҡалаһының бер төркөм мәғариф хеҙмәткәрҙәре шул тарафтарға юлланды. Башҡортостан автономияһының 100 йыллығы уңайынан профсоюз комитеты ойошторған был сәфәр ысын мәғәнәһендә һәр сәйәхәтсегә оло бүләк булды, һәр кемдә матур тәьҫораттар ҡалдырҙы. Ике көнгә һуҙылған сәйәхәтебеҙҙә Нөгөш буйлап ҡеүәтле ҡәлғә-нығытма кеүек текә ҡаяларға, атлы ғәскәр шикелле һаҡҡа баҫҡан имән-ҡарағайҙарға һоҡландыҡ, һыуһаҡлағыстың көслө тулҡындарында катерҙа сайҡалдыҡ, хатта Ленин бабайҙың таныш йөҙө лә күҙгә салынғандай, беҙгә йылмайғандай булды. Булмаҫ, буш һүҙ, йә мистика тиһегеҙме? Юҡ шул, уҙған быуатта бөйөк юлбашсы һыны ҡаяға уйылып төшөрөлгән һәм әле лә юйылып бөтмәгән. Ярҙа айыу күргән кешеләр ҙә булды. Ысынмы-бушмы, уныһын әйтә алмайым, булмаҫ тимә.

Артабан һәр кем күңеленә ятышлы, һаулығына ярашлы ял һайланы. Берәүҙәр, һалҡынырак булһа ла, һыуҙан сыҡманы, ҡайһылары тауға үрмәләне, бәғзеләре тыныс ҡына зәңгәр тулҡындар менән хозурланыуҙы хуп күрҙе. Кемдер бейене, кемдер йырланы тигәндәй. Һәр хәлдә, бәйге ойошторолһа, һәр кем үҙ һөнәрен күрһәтергә әҙер ине. Гүзәл тәбиғәт, юлдаштарҙың шат йөҙө, ҡәнәғәт йылмайыуы, үҙ-ара йылы мөнәсәбәттәр күңел бөтөнлөгө, тормош һиллеге тураһында һөйләй, бөгөнгө өсөн ҡыуаныс, иртәгәһе өсөн ышаныс уята, көс бирә, "Татыулыҡҡа тау ҙа ҡыҙыҡҡан" тигән әйтем, бәлки, ошо туралалыр. Ял итеүселәрҙе, йәшен-ҡартын, моғайын, бер тойғо берләштерәлер, тигән уй башҡа килә. Улар матурлыҡҡа, тормошҡа ғашиҡ кешеләр, эшләй ҙә, ял да итә беләләр. Сибай мәғариф хеҙмәткәрҙәренең профсоюз ойошмаһы рәйесе Зифа Вәсил ҡыҙы Кәлимуллина үҙе лә оҫта ойоштороусы булараҡ, ялыбыҙҙың бер күрке, йәме булды. Ихласлығы, олоһокесеһенә ихтирамы, иғтибарлы мөнәсәбәте менән абруй ҡаҙанған етәксе ул.

Шундай кешеләр менән генә донъя матур, донъя йәмле түгелме ни?

Ҡайтыуҙа ла сәфәребеҙ уйын-көлкө, йыр-моң менән аралашып барҙы. Оҙон юл шулай ҙа уйһыҙ-ғәмһеҙ ҙә булмай инде. Һәр һуҡмағы, һәр тауы тарих һөйләгән тыуған еребеҙ аша барғанда халҡыбыҙҙың шанлы ла, данлы ла яҙмышы яңынан күҙ алдынан үткәндәй. Әсәһенең ҡыҙы Наҙгөлдән һәр райондың күренекле шәхестәре тураһында һорашыуы, ҡолаҡ һалыусыларҙың әүҙемлеге үтә лә фәһемле булды.

Йылайырға етәрәк, юлдаштарымдан бәләкәй генә интервью алам, тәьҫораттары менән уртаҡлашыуҙы һорайым.

- Ҡырым яҡтарынан тәбиғәтебеҙ һис ҡалышмай, - ти Гөлфиә.

- Профсоюзға рәхмәт, беҙгә уҡыу йылы алдынан күңел байлығы бүләк итте, - Анна ла ҡыуанысын йәшермәй.

- Бәхет - ул ынйы шикелле бәләкәй һәм оло шатлыҡтарҙан тора. Һәр ҡыуаныслы мәлгә шатлана беләйек, - тип өҫтәй иң етди юлдашым Татьяна. Хаҡ һүҙҙәр! Ғ. Сәләмдең ошо һүҙҙәргә ауаздаш шиғыр юлдары күңелгә килә:

*Тауҙар, тауҙар!*
*Ҡайһы тау бейек, тип,*
*Мин тағы ла Уралға ҡараным,*
*Тик тапманым,*
*Шул тауҙарҙа тыуған*
*Шатлыҡтан да бейек ҡаяны!*

**Зәкиә ХӘМИТОВА,**
**мәғариф ветераны.**
**Сибай ҡалаһы.**

✓ *Хәҙерге заманда ла тарихи ерлектә Әйлеләр союзына ингән көҙәй, ҡошсо һәм башҡа ырыу башҡорттары үҙ нәҫел-ырыуының атамаһынан тыш, әйле исеменән дә һис баш тартмай.*



ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# БАТШАЛАРҒА БАШ ЭЙМӘГӘН ӘЙЛЕЛӘРБЕҘ!



**Тарихсы-этнолог Р.Ғ. Кузеев әйлеләрҙе төньяҡ-көнсығыш башҡорттары төркөмөнә индерә. Унынса, был төркөм үҙе төньяҡ (Әй-Йөрүҙән), Урал аръяғы һәм тау башҡорттарынан хасил була. Ошоға ярашлы, был зонала өс этник берләшмә - әйле, ҡатай һәм табын ырыуҙары тирәһендә уҡмашҡан башҡорттар тығыҙ аралашып йәшәй.**

Ғилми әҙәбиәттә әйле этнонимы ике төрлө мәғәнәлә ҡулланыла: беренсенән, ул тарихи Башҡортостан ерлегендә XIV - XV быуаттарҙа бер тиҫтә тирәһе башҡорт ырыуҙарынан ойошҡан сәйәси берләшмә (ырыуҙар союзы, ҡәбилә) атамаһы булһа, икенсенән, заманында башҡорттар араһында оло абруй ҡаҙанған айырым, үҙ аллы ырыу исемен белдерә. Ябайыраҡ әйткәндә, төп әйле ырыуы ерлегендә үҙ заманында оло әйле ҡәбиләһе барлыҡҡа килгән. Был XVIII быуатта Көнгөр бургомистры Юхнев (1725-1726 йылдар), Өфө провинциаль канцелярияһы (1730 йыл), Ырымбур экспедицияһы начальнигы И. Кириллов (1735 йыл) тарафынан төҙөлгән документтарҙа, П.И. Рычковтың "Топография Оренбургская..." китабына (1762 йыл) индерелгән башҡорт олоҫтары һәм ырыуҙары списогында сағылыш таба. Мәҫәлән, И. Кириллов яҙҙырып алған мәғлүмәттәргә ярашлы, "ысын ырыуҙар, йәғни рәсәйсә олоҫтар" теҙмәһенә индерелгән Әйле олоҫона унын составындағы түбәндәге ырыуҙар (аймаҡ һәм түбәләр) күрһәтелгән: Әйле, Өпәй, Дыуан, Һыҙғы, Сырҙы (Чарлынский, тип бирелә), Мырҙалар, Ҡаратаулы (Карата-Улынский), Һарт, Түбәләҫ, Тырнаҡлы (Тарлак-Лынский), Сүпле Һыҙғы. П.И. Рычков исемлегендәге Әйле олоҫона И. Кириллов яҙмаһында булмаған түбәләр ҙә бар: Ҡаршын (Аршинский, тип алынған), Йылан-Әйле, Өпәй, Дыуан, Таҙ-Дыуан, Һыҙғы, Яйырлы (Еирлинский), Мырҙалар, Тырнаҡлы, Ҡаратаулы, Һарт, Түбәләҫ, Сүпле Һыҙғы. Әйтергә кәрәк, был мәғлүмәттәр башҡорт олоҫтары старшиналарының, ырыу тарихын белгән ҡарттарҙың аңлатмаларына ярашлы яҙып алына.

1737 йылда Башҡортостандың төньяҡ-көнсығыш олоҫтарының айырым списогы төҙөлә (был исемлеккә Урал аръяғы олоҫтары ла индерелә), ул өс ҙур төркөмдән - Ҡатай, Әйле һәм Табын түбәләренән хасил була. Был список буйынса Әйле түбәһенә Дыуан, Өпәй, Һыҙғы, Һарт, Мырҙалар, Ҡаратаулы, Түбәләҫ, Әйле, Сырҙы, Тырнаҡлы олоҫтары инә.

Юғарыла һанап үтелгән Әйле ҡәбиләһе ырыуҙары, әлбиттә, үҙҙәре биләгән территорияла аҫабалыҡ хоҡуғына эйә булып, губерна хакимиәтенә урындағы административ бүленеште (йәғни, олоҫтар системаһын) аныҡ билдәләй алыу мөмкинлеген биргән. Был йәһәттән, оло ырыу составына ингән вағыраҡ этник берләшмәләр, үҙ атамаһынан башҡа, үҙҙәренә тәғәйен ер хужалары булып, билдәле кимәлдә үҙаллы көн итә алған.

Төньяҡ-көнсығыш башҡорттарынан көҙәй (күҙәй) ырыуы иң эре этник берләшмә булып, сәйәси яҡтан оло Әйле союзына ҡараған булһа ла, унын аҫабалығы айырым һәм үҙаллы формалашҡан. Ошо зоналағы башҡорттарҙың күп быуатлы тарихында Әйле союзына ингән барлыҡ ырыуҙар бер төптән сығыш яһап, ҡәҙимге көн итмештәрендә тығыҙ аралашып, туғанлашып йәшәй. Шул уҡ ҡошсо ырыуы башҡорттары үҙҙәрен бар замандарҙа ла әйлеләрҙән айырып ҡарамаған, гәрсә уларҙың үҙҙәре биләгән ерҙәрендә айырым аҫабалыҡ хоҡуғы булһа ла.

Р.Ғ. Кузеев та Әйле союзына ингән ырыуҙарҙы, аҫабалыҡ хоҡуҡтарының үҙенсәлектәренә ярашлы, ике төркөмгә бүлеп ҡарай. Ул беренсе төркөмгә уртаҡ аҫабалыҡ ерлегендә берләшкән әйле ырыуҙарын - төп әйле, ҡаратаулы, тырнаҡлы, төркмән, һарт-әйлеләрҙе генә индерә. Р.Ғ. Кузеевса, тарихи документтарҙа дыуан, мырҙалар, ҡошсо, һыҙғы һәм өпәй ырыуҙары әйлеләр составына индерелгән хәлдә лә, улар үҙҙәрен батша хакимиәте алдында хоҡуҡи яҡтан үҙаллы этник төркөм рәүешендә күрһәтергә тырыша, быны боронғо ата-бабалары ҡалдырған аҫаба ырыу ерҙәрендә йәшәүҙәре менән нигеҙләй.

Замандашыбыҙ, тарихсы һәм журналист С. Хәмиҙуллин әйлеләр составын билдәләү һәм аныҡлау айҡанлы башҡаларҙан айырылыбыраҡ торған үҙ версияһын тәҡдим итә. Ул теге йәки был аҙ һанлы ырыуҙың Әйле союзына инеү-инмәүен сәйәси конъюнктура (мохтажлыҡ) менән бәйләп аңлата. Мәҫәлән, 1737 йылда Ырымбур экспедицияһы хеҙмәткәрҙәре тарафынан йыйналған мәғлүмәттәр буйынса (улар Себер даруғаһы старшиналарынан алына) көҙәйҙәр Табын, ә ҡошсолар Ҡатай түбәһенә индерелә. Әммә ошо тарихи документта ул саҡтағы рус хакимиәтенең олоҫтар системаһын үҙҙәренә уңайлы булған тәртиптә, әммә ғәмәлдә булмаған түбәләргә бүлеп күрһәтеүен иҫәптән сығарырға ярамай. Ысынбарлыҡта түбә (аймаҡ) атамаһы ырыу бүлемдәрен аңлата, ул ырыуҙар берләшмәһе төшөнсәһенә тап килмәй. Үрҙә аталған бүленеш принцибына хәҙерге геногеография мәғлүмәттәрен өҫтәп, С. Хәмиҙуллин тырнаҡлы (мырҙаларҙың генетик нәҫелдәштәре), ҡаратаулы (ҡыпсаҡтарға нәҫелдәш) һәм түбәләҫ (монгол сығышлы) ырыуҙарын да әйлеләр составынан башҡа ҡарарға тәҡдим итә.

Әммә ошондай тикшеренеүҙәр алып барыусылар бер мөһим нәмәне онотмаһындар ине: ырыу берҙәйлеге (родовая идентичность) - тарихи феномен, һәм башҡорт мөхитендәге никахлашыу ҡанундарына ярашлы, ырыуҙарҙың бер-береһенә ныҡ яҡынайыуы ла ысынбарлыҡҡа тап килә. Әммә халҡыбыҙҙың тарихи үҙаңында әлегә тиклем ата-бабалар буйынса нәҫелдәшлек менән бер ҡатар ер-һыу (аҫабалыҡ) яҡынлығы һәм йәшәйеш, азатлыҡ өсөн көрәш тыуҙырған берҙәйлек тә һаҡланып ҡалған. Тап шуның өсөн хәҙерге заманда ла тарихи ерлектә Әйлеләр союзына ингән көҙәй, ҡошсо һәм башҡа ырыу башҡорттары үҙ нәҫел-ырыуының атамаһынан тыш, әйле исеменән дә һис баш тартмай. Халҡыбыҙҙың 40-тан ашыу төрлө сығышлы ырыуҙары вәкилдәренең башҡортлоҡ тип аталған милли берҙәйлектәрен быуаттар дауамында һаҡлап ҡала алыуы ла ошоға бер дәлилдер.

Әйлеләргә ҡараған ырыу-ҡәбилә төркөмдәре, Р.Ғ. Кузеев билдәләүенсә, төньяҡ-көнсығыш Башҡортостан территорияһына көнбайыштан да, көнсығыш тарафтарынан да үтеп инә. Баштараҡ дыуан, ҡошсо, көҙәй ырыуҙары тарихи Башҡортостандың көнбайыш өлөшөндә йәшәп, ул тарафтан көнсығыш һәм төньяҡ-көнсығышҡа табан күсә килеп, әле йәшәгән ерҙәрен биләй. Һыҙғылар һәм өпәйҙәр ҙә Урал алды территорияһының көнбайышында көн итә. Төп әйлеләр, ҡаратаулы, тырнаҡлы, һарт-әйле һәм мырҙалар ырыуҙары Әй йылғаһы үҙәненә көньяҡ-көнсығыштан, Урал аръяғынан килеп урынлаша.

Ғилми әҙәбиәттә әйлеләрҙең килеп сығышын Иртыш буйында йәшәүсе себер татарҙарының аялы ырыуы төркөмө менән сағыштырып, уртаҡлыҡ табырға тырышыусы тикшеренеүселәр ҙә бар. Әммә әй һәм аялы этнонимдарының тышҡы оҡшашлығынан башҡа улар араһында ниндәй ҙә булһа уртаҡ этник һыҙаттар һәм тарихи сығанаҡтар менән дәлилләнгән яҡынлыҡ юҡ.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ



# БОРОНҒО БАШҠОРТ ДӘҮЛӘТСЕЛЕГЕ

Элек "Тарихта башҡорттоң үҙ милли дәүләте булғанмы?" тигән һорауға совет тарих фәнендә, ғөмүмән, кире ҡараш булды. Халыҡтың, унын иҡтисадының, мәҙәниәтенең юғары кимәле күрһәткесе булараҡ, дәүләт тик алдынғы, мәҙәниәте ныҡ үҫешкән халыҡтарҙың ҡайһы берҙәре өсөн генә хас сәйәси күренеш, тип аңлаттылар беҙгә. Ә үҙебеҙҙең тарихсылар башҡортто бик боронғо замандарҙан алып совет власына тиклем яҙмаһыҙ, милли мәҙәниәтһеҙ, күсмә тормошта, төрлө көслө күршеләре тарафынан иҙелеп, таланып йәшәгән, ырыу-ҡәбилә ойошмаһынан сыға алмаған халыҡ итеп күрһәтте. Йәнәһе лә, йә татар-монгол хандарынан, йә Ҡаҙан, Нуғай, Себер хандарынан иҙелеп, таланып йәшәгәндәр. Ҡайҙан инде был халыҡҡа дәүләт төҙөү. Имеш, тик ленинсы большевиктар партияһы, улар тормошҡа ашырған ғәҙел милли сәйәсәт кенә башҡортҡа һәм элекке Рәсәй империяһының башҡа халыҡтарына ысын мәғәнәһендә милли дәүләт төҙөргә мөмкинлек тыуҙырҙы.

Башҡорттоң боронғо мәҙәниәтен, сәйәси тормошон төптән, ныҡлап һәм объектив тикшерергә теләү партия, дәүләт органдары тарафынан гел күҙәтеү аҫтында булды. Күренекле башҡорт тарихсыһы Билал Хәмит улы Юлдашбаев "Башҡорт милләтенең формалашыу тарихы" тигән хеҙмәтендә "Башҡорт милләт булып революцияға тиклем үк формалашҡан" тип әйтергә баҙнат иткәне өсөн үҙе лә, баяғы хеҙмәте лә эҙәрлекләүҙәргә дусар ителә. Ошондай ныҡлы күҙәтеү аҫтында булған ғалимдарға башҡорттоң боронғоһон объектив яҡтыртыу мөмкин дә түгел ине. "Үҙгәртеп ҡороу" осоро башланып, партия диктаты бөткәс, хәл әкренләп булһа ла ыңғай яҡҡа үҙгәрҙе.

Тарих фәндәре докторҙары, профессорҙар Роза Буканова, Нияз Мәжитов, филология фәндәре докторы, профессор Ғайса Хөсәйенов һәм күршебеҙ Татарстандың күренекле ғалимы, филология фәндәре докторы, профессор Мирфәтих Зәкиев һуңғы йылдарҙа халҡыбыҙҙың боронғоһонан ышаныслы дәлилдәр, факттар килтереп, башҡорттоң үҙ милли дәүләте булыуын иҫбатлап яҙып сыҡтылар. Уларҙың хеҙмәттәрендә килтерелгән факттар объектив ҡарашлы һәр кешене ышандырырлыҡ. Ошо факттарҙың дөрөҫлөгөн, башҡорттарҙың боронғо дәүерҙәрҙә үк үҙ дәүләттәре булғанлығын "Дәүләт һәм хоҡуҡ теорияһы" тигән иң төп юридик фән күҙлегенән анализлап та иҫбат итергә була. Тарихсылар башҡортто төрлө ырыу-ҡәбиләләрҙән уҡмашҡан, ти. Был ҡәбиләләрҙең һанын төрлө ғалим төрлөсә әйтә. Кемдер - башҡорттарҙың формалашыуы ете ырыуҙың берләшеп, килешеүенән башланған, ти. Икенселәре башҡорттоң утыҙ дүрт, ҡырҡ йәки унан да күберәк ырыуҙары бар, тип һанай. Мин бында был ғалимдарҙың ҡараштарын анализларға йыйынмайым. "Башҡорт" тигән халыҡты барлыҡҡа килтереүҙә күпме ырыу ҡатнашҡанын, яҡынса ғына әйтмәһәк, теп-теүәл генә итеп берәү ҙә әйтә алмайҙыр хәҙер. Әммә беҙгә шуныһы аныҡ билдәле - башҡорт халҡы сығыштары төрлө булған ырыуҙарҙан ойошҡан. Тарихсылар өсөн был шикһеҙ.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ,**
**этнограф.**
**(Дауамы бар).**

✓ ***Эшҡыуарлыҡта һин был системаны үҙең төҙөп алаһың. Бында эшкә ҡарата ҡыҙыҡһыныуҙар, ҡараш, мөнәсәбәт бөтөнләй икенсе. Һинең арырға, йыбанырға ваҡытың да юҡ.***



# ДАУЫЛДА ЮЛҒА елкәндәреңде

***МАНСУР ҒИЛФАНОВ:***

*Беҙҙең баштан уҡ маҡсат та шундай ине: башҡорт донъяһына файҙалы булғандай бизнес асыу. Һәм бөгөн беҙгә ысынлап та башҡорт донъяһының ижади бер өлөшө килә. Яҙыусылар, артистар, эшҡыуарҙар. "Самрау" нәшриәте баш ҡалалағы берҙән-бер шәхси милли баҫма.*



**Бизнесҡа ынтылыусылар күп, әммә уны ауыҙлыҡлап алып китә алыусылар ғына һынаулы. Бәхетле йондоҙ аҫтында тыуамы ундайҙар, әллә булмыштарында ниндәйҙер бер айырым һыҙаттар, ниндәйҙер артыҡ көс йәки аҡыл буламы? Әллә ундайҙарҙы бала саҡтан икенсерәк шарттарҙа тәрбиәләгәндәрме? Бына ошондай ҡыҙыҡһыныу менән саҡырҙыҡ беҙ диалогка эшҡыуарлыҡ өлкәһен гөрләтеп алып барыусы башҡорт ир-егеттәрен. Эшҡыуарҙар - "Булат" компанияһы етәксеһе Руслан ЗАРИПОВ һәм "Самрау" нәшриәте директоры Мансур ҒИЛФАНОВ менән әңгәмә был тәңгәлдә ниндәйҙер ҡиммәтле ҡуйынлы аҙымдар яһарға торған йәштәргә лә, шәп милләттәштәре менән ҡыҙыҡһыныусан гәзит уҡыусыларға ла файҙалы булыр ине.**

**Егеттәр, гәзит уҡыусыларыбыҙға аңлайышлыраҡ булһын өсөн, әйҙәгеҙ, тыуған яҡтан, ата-әсәнән, хыялдарҙан башлайыҡ.**

**Руслан Зарипов:** Мәсетле районының Һабанаҡ ауылында тыуып үҫтем. Ғаиләлә бер ҡыҙ һәм биш малай булдыҡ. Күҙ алдына килтерәһегеҙҙер инде. Өйҙә барыһы ла малайҙарса, тәртип көслө, эшләһәң, емертеп эшләйһең, ашаһаң, ҡайырып ашайһың. Үҙенә күрә бәләкәй бер армия кеүек, тиһәм дә хата булмаҫ. Уҡыуҙа ла, спортта ла әсәй-атайҙың йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килтермәҫкә тырыштыҡ. Атайыбыҙ, заманына ярашлы, тигәндәй, коммунистик ҡарашлы кеше булды, үҙе лә бер минут буш торманы һәм беҙҙе лә шулай өйрәтте. "Ҡул ҡаушырып ултырмағыҙ, шунда эшләгеҙ, бында эшләгеҙ, кеҫәгеҙҙә аҡса, өҫтәлегеҙҙә ризыҡ булһын", ти торғайны.

Мәктәптән һуң Мәсәғүт педагогия училищеһында, артабан Башҡорт дәүләт университетында белем алдым. Үҙләштергән һөнәрҙәрем буйынса эшләп ҡараным ҡарауын, тик күпмелер ваҡыттан һуң уларҙың күңелемә ятмауын аңланым. Дөрөҫө шул: бәләкәй саҡтан миңә гел гено спорт, хәрби тематика яҡын булды. Өфөлә уҡыған осорҙа уҡ шәхси һаҡ ойошмаһында һаҡсы булып эшләнем. Еңел тиһәләр ҙә, был хаталы фекер. Төрлө әһәмиәттәге саралар ваҡытында алыштырғыһыҙ, көслө хеҙмәткәр булыр өсөн спорт менән дә етди шөғөлләнергә кәрәк, кешеләр менән дә яҡшы аралаша белеү мөһим. Шулай итеп, был йүнәлештең нескәлектәренә төшөндөм һәм ваҡыт уҙыу менән үҙемдең һаҡ ойошмаһын асырға баҙнат иттем.

Ойошманы булдырып, эштәрҙе яйға һалып ебәргәс, ирекле ваҡыт та барлыҡҡа килә башланы. Шундай мәлдәрҙә нисек итеп ошо ваҡытты бушҡа уҙғармаҫҡа, тағы ла ниндәй шөғөлдә үҙләштерергә икән, тип баш ваттым. "Тайпан" һаҡ предприятиеһын аҫҡан ваҡытта дуҫым Шамил Яубаҫаров менән уның логотибы, реклама материалдары, интернет селтәрендәге сайтын булдырыу буйынса тығыҙ эш алып барҙыҡ. Позитив юҫыҡтағы бәхәс, фекер уртаҡлашыу ваҡытында яҡшы идеялар тыуа тигәндәре дөрөҫ ул. Ҡыҫҡаһы, берҙәм уй менән 2014 йылда "ФрешФормат" исемле нәшриәт хеҙмәтен булдырырға ниәт ҡылдыҡ. Дәртләнеп тотондоҡ был эшкә. Ошо уҡ йылда Башҡортостан Республикаһы Ҡатнаш алыш бәйгеһе (ММА) федерацияһын етәкләнем. 2015 йылда иһә "Мин - илһөйәр" ("Я - патриот") тигән йәмәғәт ойошмаһына нигеҙ һалдыҡ. Бөгөнгә көндә уларҙан тыш, "Интерсервис" ойошмаһын (халыҡҡа янғын һәм башҡа тәр хәүефһеҙлек өлкәһендә хеҙмәттәр күрһәтә) астыҡ. Шулай итеп, биш йыл эсендә биш йүнәлештә эш алып барған ойошмалар үҙ ҡуласаларын әйләндерә башланы.

**Мансур Ғилфанов:** Ишембай районының Ҡолғона ауылы улымын. Шунда туғыҙ класты тамамлағас, Ишембай интернат-гимназияһына уҡырға барҙым. Унан БДУ-ның журналистика факультетын тамамланым. Был һөнәрҙе һайлауым, нисектер, осраҡлы килеп сыҡты. Әле мәктәпте тамамламаҫ элек, март айҙарында микән, Мәләүездә һынап ҡарау имтихандары ойошторолдо. Мин дә үҙ көсөмдө һынап ҡарарға булдым һәм һөҙөмтәләрем юғары булып, уҡырға ҡабул ителеп тә ҡуйҙым. Шулай итеп, журналистикала уҡып сығып, радиола, телевидениела эшләп алдым. Унан "Шоңҡар" журналында хеҙмәт итеп, Архангел районының район гәзитендә редактор булып хеҙмәт юлы үттем. Аҙыраҡ тәжрибә туплағас, тип әйтәйек, тормоштоң аңын-тонон айыра башлағас, үҙ эшемде асыу теләге тыуҙы. Ә нимәгәләр өлгәшеү нимәнән башлана? Әлбиттә, хыялдан. Мин дә төрлө хыялдар менән яна, шуларҙы ысынбарлыҡ итеү өсөн көнө-төнө уйлана, пландар төҙөй инем. Идеяларымды яҡын дуҫтарым менән дә бүлешәм, уларҙың фекерен тыңлайым, сағыштырам. Шулай уйлаша торғас, 2015 йылда беҙгә уҡыған дуҫ егет Вилнур Хәсәнов менән "Самрау" нәшриәтен асып ебәрҙек. Илдә иктисади торғонлоҡ, күп ойошмалар, шул иҫәптән нәшриәттәр ҙә ябылған саҡ. Аҡса юҡ, ҡорамалдар кәрәк, уларҙы алыу өсөн заказдар кәрәк... Шундай ауыр ваҡытта, бөтөн ҡаршылыҡтарға үс итеп тигәндәй, беҙ эш башлап ебәрҙек. Туғандар ҙа, яҡындар ҙа "яҡшыраҡ, унайлыраҡ ваҡыттарҙы көтөп торорға" кәңәш бирә ине, әлбиттә, күңелдә шик тә, ҡурҡыу ҙа булды. Әммә беҙ "Дауылда юлға сыҡҡанһың икән, елкәндәреңде күтәр" тигән девиз менән маҡсатҡа ынтылдыҡ. Аллаға шөкөр, бөгөнгә көндә нәшриәтебеҙҙә республикабыҙҙың билдәле яҙыусылары, эшмәкәрҙәре китаптарын баҫтыра, район-ҡалалар беҙҙең менән хеҙмәттәшлек итә. Коллективыбыҙ ҙа үҫә бара, цехтарыбыҙ киңәйә, эш дәүмәле лә арта ғына.

**Бала саҡта һеҙгә ниндәй тәрбиә бирелде? Уларҙы һеҙ әлеге йәшәйештә файҙалана йәки "Әлдә шулай иткәндәр" тип хәтерләй алаһығыҙмы?**

**Руслан Зарипов:** Төплө, аңлы фекер йөрөтә белгән осорҙан атайымдың һәм әсәйемдең эш башҡарыу алымдарын анализларға яраттым. Әсәйем, мәҫәлән, нимәгәләр тотонор алдынан ултырып уйлап ала ине. Ул күберәк үҙ интеллектына таянып эш итте. Атайым иһә, эшен үҙ ҡулдары менән башҡарҙы. Ул оҙаҡ уйлап тормай, тотор ҙа эшләр булды. Һәм күп осраҡта ана шул уйһыҙниһеҙ тырышлығы менән эшенең осона барып та сыға ине. Аҙағына еткермәйсә туктамай торғандар була бит, ул да шундай кеше булды. Атайыбыҙ беҙҙе лә ярты юлда икеләнеп, туктап, йөҙ тапҡыр уйлап ултырмаҫҡа өйрәтте. Ә әсәйебеҙ һәр ваҡыт "Эшегеҙҙе уйлап башҡарығыҙ, уйламай бер эште эшләргә, ә аңлы ғына итеп тотонғанда, бер юлы биш эште башҡарырға була", тип аңлатты. Шулай итеп, ошондай ике миҫал араһында үҫтек, бөгөн уларҙың икеһенең кәңәштәре лә беҙгә ярҙам итә.

**Мансур Ғилфанов:** Мин бына әле Русланды тыңлап ултырам да, икебеҙ бер ғаиләлә үҫкән кеүек. Минең дә әсәй педагогик белемле кеше, балалар баҡсаһында эшләне. Атайыбыҙ ҙа шулай уҡ осҡа ҡуллы, эшһөйәр кеше ине. Уларҙы тап ана шул ижади фекерләү, донъяға ижади ҡараш бәйләгәндәр тип уйлайым. Атай, үкенескә ҡаршы, иртәрәк китеп барҙы һәм әсәйгә беҙҙе аяҡҡа баҫтырып, юғарыға күтәрергә тура килде. Миндә, бәлки, шул ваҡытта атай яуаплылығы һалынғандыр ҙа инде, әсәйгә нисек тә ярҙам итергә, уның хәлен еңеләйтергә, йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килтермәҫкә тигән ынтылыш күңелемә тәрән булып инеп уйылғайны.

**Эшҡыуарлыҡ йәки башҡа хеҙмәттәр өлкәһендә, ғөмүмән, тормошта ир-егеттең уңышлы булыуы нимәнән тора? Бармы уға ыңғай йоғонто яһаусы сәбәптәр?**

**Руслан Зарипов:** Эштә, тормошта булһынмы, ир-аттың уңышлы кеше булыуы тик бер үҙенән генә тормай. Тәү сиратта, уны уратып алған яҡындарынан, ғаиләһенән тора. Үҙ миҫалымдан сығып әйткәндә, ир-егеттең уңышын ҡаҙаныуында, шул уңышын башҡаларға өләшеүендә ҡатынының роле ҙур. Ҡатын-ҡыҙ, әсәй - ул йорт тотҡаһы, ғаиләнең усағын һаҡлаусы кеше. Уларҙың ыңғай энергияһы, яғымлы, һөйкөмлө ҡарашы, ҡанатландырғыс, дәрт өҫтәүсе һүҙҙәре - ир-егет өсөн ҙур көскә эйә. Мин, мәҫәлән, бик егәрле, башлы, төрлө идеялар менән янып йөрөүсе егеттәрҙең эш башлап та, ҡатындары тарафынан теләктәшлек, терәк таба алмай юғалып ҡалғандарын беләм. Һәр бөйөк ирҙең артында аҡыллы ҡатын тора, тигән әйтем бар. Уның менән тулыһынса килешәм. Был, ҡатын кәңәшенә мохтажлыҡ, уның һүҙенә генә ҡарап тороу, йәшәү тигән һүҙ түгел. Киреһенсә, һине ғүмере юлына юлдаш, ир, балаларына атай итеп һайлаған һәм балаларымдың әсәһе булған ҡатындың баһаһын юғарылап, күңелен ҡалдырмай, берҙәмлектә матур тормош итеүҙең бер рәүеше тип һанайым.

Уңыштың икенсе ҡанаты иһә - коллектив. Бергә эшләгән хеҙмәттәштәремдең төплө белемле, алдынғы фекерле, креатив идеялы һәм, әлбиттә, маҡсатлы булыуы мөһим. Ундай дуҫтар араһында эш көнө генә түгел, хатта ял ваҡыттары ла файҙалы һәм эшлекле үтә.

**Эшҡыуарҙар ни сәбәптән йәмәғәт эштәренә ылыға? Был күңел талабымы, әллә башҡа сәбәптәр бармы?**

**Руслан Зарипов:** Ысынында, йәмәғәт эшмәкәрлеге эшҡыуарлыҡҡа ҡарағанда ла күберәк көс һәм ваҡыт талап итә. Был йүнәлешкә һалынған аҡса кире ҡайтмай икәнен дә аңлау кәрәк. Мәҫәлән, БР Ҡатнаш алыш бәйгеһе (ММА) федерацияһын үҙ ҡулыма алғанда уның (ойошманың) бер нәмәһе лә юҡ ине. Бары тик арлы-бирле уҙғарылған икеөс сара ғына. Бөгөн артҡа күҙ атаһың да, һоҡланырға, ғорурланырға ла урын бар, тип уйлап ҡуяһың. Иң мөһиме, балаларға спорт залдары булдырылды, тренерҙар йәлеп ителде, улар даими рәүештә Рәсәй Ҡатнаш алыш берлеге тарафынан ойошторолған махсус курстарҙа белемдәрен нығытып, лицензияланып тора. Бөгөнгә көндә беҙҙең Федерация Рәсәй кимәлендә иң яҡшылар, йылдам үҫеүселәр сафында.

2015 йылда булдырылған "Мин - илһөйәр" йәмәғәт ойошмаһы үҙ эсенә спорт, тәбиғәт, тирә-яҡ мөхитте һаҡлау, тарихыбыҙҙы, йәшәгән еребеҙҙе өйрәнеү кеүек йүнәлештәрҙе ала. Республикабыҙҙың күп мәктәптәре менән тығыҙ бәйләнештәбеҙ. Мәктәп уҡыусылары, урта белем һәм юғары уҡыу йорттары студенттары, ғөмүмән, халыҡ араһында төрлө бәйгеләр ойоштора торабыҙ. Бөгөн балалар барыбер интернетта ултыра һәм шул белемдәрен, ваҡыттарын уйын-мажарға ғына әрәм итмәһен тип, уларҙы төрлөсә ҡыҙыҡһындырырға тырышабыҙ. Ике ҡыҙ атаһы булараҡ, ойошманы булдырған осорҙа уҡ балаларҙың, үҫмерҙәрҙең көнитмешенә ҙур иғтибар бирә торғайным. Ни тиһәң дә, баяғы педагог - уҡытыусы рухы йәшәй күңелдә. Тамамлаған Мәсәғүт педагогия колледжы менән Бөрө социаль-педагогик академияһының йоғонтоһо ҙур булғандыр, күрәһең. Балаларҙы, йәш быуынды илһөйәрлек рухында тәрбиәләргә, уларға яҡшы кәңәштәр менән ярҙам итергә ынтылыш мине шул юҫыҡтағы эштәргә тотонорға көс бирә лә инде.

**Үҙенә эшләгән кеше менән хөкүмәткә бил бөккән хеҙмәткәр араһындағы айырма нимәлә? Ни өсөн улар икеһе лә бер үк сифатты бирә алмай?**

**Мансур Ғилфанов:** Хөкүмәткә эшкә төшәһең икән, һин бында тиклем төҙөлгән системаға барып инәһең. Был система һиңә тиклем дә унар, иллешәр йыл эшләп килгән һәм һинән һуң да буласаҡ әле. Ә эшҡыуарлыҡта һин был системаны үҙең төҙөп алаһың. Бында эшкә ҡарата ҡыҙыҡһыныуҙар, ҡараш, мөнәсәбәт бөтөнләй икенсе. Һинең арырға, йыбанырға ваҡытың да юҡ. Ысынында һин арымайһың да, сөнки башың идеялар менән тулы. Ә хөкүмәт эшендә һин оло системала бер шөрөп кенә, бөгөн бара алмаһаң да, ауырып ятһаң да, ул механизм ҡыҙырлап тора. Үҙ эшеңдә һин хатта ауырымаҫҡа ла, ваҡытты бушҡа үткәрмәҫкә тырышаһың. Шулай уҡ һинең яуаплылығыңда булған коллективты нисек тә яҡшыраҡ шарттарҙа тоторға ынтылаһың.

**Руслан Зарипов:** Ирекле ижадсы тигән төшөнсә бар. Нимәлер уйлап табыу, ҡыҙыҡлы, ҡайһы саҡта саманан тыш ҡыйыу аҙымдар ҡулланып ҡарарға, тәжрибәләр үткәрергә яратам. Хатта яһа-

ған аҙымым теләгәнемсә уңышлы булмаған осраҡта ла, һайлай һәм һынап ҡарай алыуҙан ҡәнәғәтлек тойғоһо кисерәм.

Һорауға килгәндә, хөкүмәт, дәүләт ойошмаһында, гәҙәттә, һин ниндәйҙер билдәле вазифа биләйһең, айырым, ҡушылған йүнәлеш буйынса ғына эш башҡараһың. Кешенең, йәғни хеҙмәтсәндең эше тотош системаға файҙа килтерә лә ул, тик йыш ҡына кеше үҙе ошо системала шәхес булараҡ үҫеш алмай ҡала. Үҫеш булмаған осраҡта ул эшенең, тимәк, йәшәүҙең тәмен тоймай, эш урынына ла ҡанатланып бармай тигән һүҙ. Мин шулай уҡ эш ваҡытының билдәле ваҡыт арауығында булыуы, һигеҙ сәғәт менән сикләнеүе менән дә килешмәй ҡуям. Илһам килгән мәлдә кешенең төнгәсә, таңға тиклем дә ултырыуы ихтимал. Әлеге сикләнгәнлек, мәжбүрилек йөгөнән азат булыу - үҙе үк рухи күтәрелешкә килтерә. Эштә булып алған көсөргәнешле, ҡатмарлы мәлдәр ҙә, осоштар-ҡолауҙар ҙа ана шул илһамлы тулҡын менән берлектә һиҙелмәй үтеп китә.

**Башҡорт эшҡыуарҙары булараҡ, башҡорт донъяһына ниндәй файҙа килтерәһегеҙ? Шундай уй килгәне бармы һеҙгә?**

**Мансур Ғилфанов:** Бар, әлбиттә. Күңелендә милли рухы булған һәр әҙәмгә киләләр ундай уй. Беҙҙең баштан уҡ маҡсат та шундай ине: башҡорт донъяһына файҙалы булғандай бизнес асыу. Һәм бөгөн беҙгә ысынлап та башҡорт донъяһының ижади бер өлөшө килә. Яҙыусылар, артистар, эшҡыуарҙар. Кемгәлер китап, кемгәләр афиша, кемгәлер реклама материалдары кәрәк. Беҙ һәр кем менән айырым эшләйбеҙ, уның мөмкинлектәрен самалап, төрлө ташламалар, бүлеп түләү ысулдарын ҡарап килешәбеҙ. Милли баҫмалар әҙерләүгә белемле телселәр, әҙәбиәтселәр менән хеҙмәттәшлегебеҙ бар. Һеҙҙең һораүҙан сығып һығымта яһағанда, бөгөн "Самрау" нәшриәте баш ҡалалағы берҙәнбер шәхси милли баҫма.

**Руслан Зарипов:** Быйыл, барлыҡ ойошмаларыбыҙҙы бер "йәрҙоҡҡа" туплап, "Булат" компаалмай. Бөгөнгө көндә, шөкөр, федерацияның бүлексәләре районд арҙа булдырылып тора. Тимәк, ауылда йәшәүсе балаларҙың, үҫмерҙәрҙең һәм йәштәрҙең донъя кимәлендә киң таралған спорт төрө - ҡатнаш алыш менән яҡындан танышыу, шөғөлләнеү форсаты бар бөгөн. Бәләкәйҙән спорт менән дуҫ булған кеше - йыйнаҡ, тыйнаҡ, ҡыйыу була. Ундайҙар ҡалала ла юғалып ҡалмай, әрмелә лә бирешмәй, тормошта ла ныҡышмал була. Бындай күрһәткестәр ҡатын-ҡыҙ тарафынан да юғары баһалана.

**Һеҙҙең кеүек йәш, сәләмәт, уңышлы ирҙәр өсөн ғаилә ҡиммәтәре ниндәй урында?**

**Руслан Зарипов:** Кешегә бирелгән сәләмәтлек, уңыштар, башҡа донъяуи рәхәтлектәрҙең барыһы ла - мәңгелек түгел. Бөгөн булып, иртәгә юҡҡа сығыуы бар. Ғаилә тигәнебеҙ ошо ваҡытлыса ҡиммәттәр араһында мәңгелек. Ниндәй генә хәлдә булһаң да, иң тәүҙә ғаиләңде уйлайһың. Ҡыуаныс икән, тиҙерәк улар менән бүлешәйем, хәсрәт икән, тыҡ риза түгелмен һәм малайҙарыма ҡаты булмаҫҡа тырышам. Ғаиләлә ир балалар ғына тәрбиәләнгәндә улар араһында тәртип тотоуы артыҡ ауыр ҙа түгел. Сөнки улар берәүгә лә ташлама булмаҫын яҡшы төшөнә. Олоһона әйтеүең башҡаларына ла ҡағыла һәм ағайҙарының ҡулы аҫтында башҡарылып та ҡуя. Ике әйттереү, ҡат-ҡат әйттереү хас түгел малайҙарға. Үҙ сиратымда инде уларҙы әсәйҙәренә ярҙам итергә, һәр кем үҙ бурыссын теүәл үтәргә, уға һалынған яуаплылыҡты башҡа туғандарына ауҙармаҫҡа, килеп тыуған проблеманан ҡасмаҫҡа, ә көнәшләшеп хәл итеү юлдарын ҡарарға, бер-береһе өсөн тауҙай булып торорға өйрәтәм. Һәм ғаилә ул ир кешеһең, атайҙың, ғаилә башлығының аҡылына нигеҙләнә икәнде лә аңлатырға тырышам.

**Руслан Зарипов:** Мансурҙың әйткәндәрен йөпләп, балаларҙың ғаиләлә үҫкән мәле бер осор ғына икәнлекте, уларҙы шул осорҙа һөйөп-яратып, тәрбиәләп, ҡанаттарын ныҡытып ҡалырға кәрәклекте иҫебеҙгә төшөргө килә. Минең бына ҡыҙҙарым - кеше фекерләй алмай аҙаплана. Бөгөнгө йәштәр тиҙерәк үҙаллы булырға ынтыла, мин быны бик тә хуплайым. Студенттар ҙа машиналы була һалырға тырышып тора. Был уларҙы ҡайһы бер мохтажлыҡтарҙан арындыра, яңы мөмкинлектәр аса. Насармы ни? Әйҙә, байлыҡҡа ынтылыу тип атаһындар быны, әйҙә, башҡа нәмә тип, әммә былар ир кешенең табыусы, һунарсы асылының ысынбарлығы ғына.

**Руслан Зарипов:** Егет, ир кеше борон замандан ғаиләһен аҫраусы, ҡурсалаусы булған. Был һыҙат, әлбиттә, башҡорт ир-уҙаманына ла хас. Мал табыу, уны дөрөҫ ҡуллана белеү серҙәре атабабанан киләсәк быуын ҡулына тапшырылып килгән. Әммә, заман башҡа - заң башҡа, тиҙәрме әле? Тәбиғәттән, ысынлап та, һалыналыр ҙа ул. Теләгәндәреңдең тормошҡа ашыуы өсөн бер ни ҡыбырлатмай, һаман да диванда аяҡ һуҙып, хыялдарыңдан айный алмай ятһаң, ышан, иртәгәһе көнө уңышһыҙ булыуыңда үҙеңде түгел, тәү сиратта башҡаларҙы әрләп, ғәйепләп ултырасаҡһың. Эшеңде башлап байып китһәң,

# күтәреп ебәр
# СЫҠҠАНҺЫҢ ИКӘН...

**РУСЛАН ЗАРИПОВ:**

*Башҡорт донъяһы өсөн файҙа - ул, берәү, икәү, йә унау булһынмы, башҡорт егеттәренең йәмғиәтебеҙ өсөн файҙалы эш өҫтөндә булыуҙарылыр, моғайын. Тик "башҡорт донъяһы" тип, һаман да ҡурай, тирмә, ҡымыҙ темалары тирәләй "бейеүҙе" дауам итһәк, бер ни ҙә килеп сыҡмаясаҡ.*



**Бизнеста команданы нисек һайларға?**

**Мансур Ғилфанов:** Минең командала осраҡлы кешеләр юҡ. Бына шундай эш урыны бар, шундай белгес кәрәк, тип кенә алмайбыҙ хеҙмәткәрҙе. Сөнки бында һәр берәһенең сифатлы хеҙмәте талап ителә, бер күҙәнәк йомшаҡ эшләй икән, бөтөн организм көсһөҙләнә, тигән һымаҡ, бер кешенең үҙ вазифаһын сифатлы башҡармауы дөйөм эште тотҡарлаясаҡ. Шулай уҡ хеҙмәткәрҙең башҡалар менән уртаҡ тел таба алыуы, килешә белеүе лә, алда әйткәнсә, идеялы булыуы ла ҡуҙ уңында тотола. Командала эшләй белеү, үҙ звеноң өсөн тулы яуап биреү, команда хеҙмәтенә тоғролоҡ кеүек сифаттар ҙа ҡарала, әлбиттә. Йәғни, бизнеста етәксе бер үҙе генә әллә нимә башҡара алмай, уның иң отошло эше - үҙенә торошло, үҙенә тура килгән команданы йыйып алыу һәм бер идеяға инандырыу.

**Руслан Зарипов:** Бөгөнгө көндә команданан күп нәмә тора, быны бер нисек тә инҡар итеп булмай. Айырыуса, шәхси эшҡыуар булһаң, был мәсьәләгә ҙур иғтибар бирергә кәрәк. Команда, коллектив ағзаларының төрлө өлкә өсөн яуаплы булыуына ҡарамаҫтан, барыһы ла бер маҡсаттан сығып эш итергә тейеш. Араларынан берәүһе көйһөҙләнә башланы икән, етәксе кеше быны тойоп торорға бурыслы. Коллектив, командаң ағзалары менән юғарынан ғына түгел, ә коллега булараҡ аралаша белеү, уларҙы ишетеү, фекерҙәре менән ҡыҙыҡһыныу ҙа етәксе өсөн иң юғары, дәрәжәле сифаттарҙың береһелер.

ниялар йыйылмаһын ойошторҙоҡ. Исеменә күрә есеме булыр тигән өмөт менән, әлбиттә. Башҡорт халҡы әкиәттәрендәге булат ҡылысты ла ҡуҙ уңында тоттоҡ. Икенсенән, был исемде яҡын күреүемдең сәбәбе атайымдың исеме Булат булыуы, эштәремдә уның яҡты иҫтәлегенә, хөрмәтенә арнау теләгенән дә булды.

Башҡорт донъяһы өсөн файҙа - ул, берәү, икәү, йә унау булһынмы, башҡорт егеттәренең йәмғиәтебеҙ өсөн файҙалы эш өҫтөндә булыуҙарылыр, моғайын. Тик "башҡорт донъяһы" тип, һаман да ҡурай, тирмә, ҡымыҙ темалары тирәләй "бейеүҙе" дауам итһәк, бер ни ҙә килеп сыҡмаясаҡ. Иң мөһиме - телеңде, халҡыңды, тарихыңды белеү, киләсәгеңә битараф булмау.

Ойошмаларыбыҙ тарафынан алып барылған эштәрҙән сығып фекер йөрөткәндә, барыһы ла файҙа килтерә, тип әйтә алам. Миҫал өсөн, "Мин - илһөйәр" йәмәғәт ойошмаһы уҙғарған "Илһөйәрлек һәр ғаиләлә. Минең шәжәрәм" республика конкурсы сиктәрендә балалар тыуған ягының тарихын, шәжәрәһен, ерһыу атамаларының килеп сығышын өйрәнә. Ышанаһығыҙмы, ҡайһылары шул тиклем ҙур, бай йөкмәткеле тикшеренеү эшен башҡара, хайран ҡалырһың! Балаларына йыш ҡына атай-әсәйҙәр, олатай-өләсәйҙәре ҡушыла. Тәү сиратта, балаларҙың эшен, тырышлыҡтарын баһалай белеү, күңелдәренә дәрт һалыу мөһим. Бәлки был уларҙың тәүге асыштарылыр! Спорт даирәһенә ҡараған ойошмабыҙ - БР Ҡатнаш алыш бәйгеһе (ММА) федерацияһының эше лә башҡорт донъяһын бер нисек тә ситтә ҡалдыра уларҙы бынан ҡурсалайым, тип янаһың. Бигерәк тә донъяға үҙ балаларың тыуғас был төшөнсәләр көсәйә. Эштән ҡайтып инеп, уларҙың нурлы йөҙҙәрен күреү, йүгерешеп килеп ҡосағыңа ырғыуҙары, ҡатыныңдың наҙлы йылмайыу менән ҡаршы алыуы - бер ғаилә башлығын да битараф ҡалдырмайҙыр. Ике ҡыҙ атаһы булыу мине, бәлки, нисектер йомшартып та ташлағандыр, әммә уларҙы уйлау менән күңелемә наҙ тула ла ҡуя. Ғаилә - ул йәшәү мәғәнәһе, йөрәк тибеше. Күп һүҙ - китапҡа яҙышы, тигәндәй, мине хәрәкәт иттергән, батырлыҡтарға дәртләндергән, көс биргән нәмә - ул минең ғаиләм!

**Мансур Ғилфанов:** Миндә өс малай үҫә, шунлыҡтан беҙҙең ғаиләлә "сүси-пүси"гә артыҡ урын юҡ. Шулай ҙа малайҙарға ғаилә ҡиммәттәрен ошо йәштәрендә үк аңлатыу, ғаилә өсөн эшләү, тырышыу ир кешенең бурысы икәнлекте төшөндөрөү минең өҫтөмдә. Быларҙы һүҙ менән генә һеңдереп булмай, тимәк, мин бары тик үҙ өлгөмдә генә күрһәтә алам. Мине, мәҫәлән, атайым ир бала булараҡ ҡатылыҡта тәрбиәләне, ундай ысул менән арбалалары, хәҙер сығыр ҙа китерҙәр, һуңынан улар бит атай йортонда нисек йәшәгәндәрен иҫләп кенә йыуанасаҡ. Әйҙә, атайҙарының һөйөүен һәм өҙөлөп тороуын ғына алып китһендәр хәтерҙәрендә. Беҙ, ғаилә башлыҡтары, үҙ ғаиләбеҙгә һәм балаларыбыҙға мөмкин тиклем мәрхәмәтле, иғтибарлы һәм ихтирамлы булайыҡ.

**Бөгөнгө ир-егеттә аҡса табырға, мал табырға, үҙаллы булырға ынтылыу, тиҙерәк машиналы, фатирлы булырға атлығыу бар. Был уға тәбиғәттән һалынған сифаттармы, әллә заман талабымы? Әллә халыҡтың, ниһайәт, бай булыуҙан ҡурҡмаҫҡа өйрәнә башлауымы?**

**Мансур Ғилфанов:** Беҙҙең быуын милләттәштәр араһында саҡсаҡ күҙгә ташлана башланы был сифат. Колхозлашыу һәм коллективлашыу халыҡтарҙа шул хәтлем тәрән эҙ ҡалдырған, улар шул колхоздары һәм союздары таралып-тарҡалғанда ла үҙаллы була алмай, үҙаллы эшләй һәм шөкөр ит, көс-тырышлыҡ менән тапҡан малыңды бушҡа сарыф итмә.

**"Эш юҡ" тигәнгә нисек ҡарайһығыҙ?**

**Руслан Зарипов:** "Эш юҡ!" тип йөрөһәң, бер нимә лә булмай инде ул. Эҙләгән кеше таба. Алған һөнәре буйынса эш урыны булмауы ла ихтимал. Сөнки бөгөнгө көндә тормош беҙҙән йыш осраҡта универсаль булыуыбыҙҙы талап итә. Бөгөн йәштәребеҙҙең төп хатаһы - ул бер эш тә күрһәтмәйенсә ҙур эш хаҡына өмөт итеүҙәрелер. Был насар түгел. Әммә эшең булһын, юғары эш хаҡы түләһендәр тиһәң, иҫбат ит, тырыш, һәләтлектәреңде күрһәт. Эш һәр ваҡыт бар ул. Таба белергә һәм, унан да мөһиме, тапҡан эшеңдән бөтә яҡлап файҙа ала белергә кәрәк.

**Мансур Ғилфанов:** Эштән күп нәмә юҡ. Ысын! Нисәгә ярылырға белмәй кителә. Әлеге ҡулдағы эштәрҙән тыш та бөтөнләй икенсе юҫыҡтағы ҡыҙыҡһыныуҙар, хыялдар һәм пландар бар. "Эш юҡ" тигәнде аңламайым. Ауылда ла, ҡалала ла эш етерлек. Бары теләк менән маҡсат ҡына булһын.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Барыһы ла хыялдан башланды", тигәйне башта Мансур Ғилфанов. Бик образлы әйтте, шулай бит? Тимәк, ниндәй генә оло эштәрҙең дә башы хыялда, йәғни, үҙеңде маҡсатҡа ярашлы көйләүҙә. Беҙ ниңәлер шундай терапияға етди ҡарамайбыҙ. Ә күп халыҡтарҙа был шәхес булып формалашыуҙың нигеҙе, тип билдәләнә. Бына бит, күҙ алдындағы һоҡланғыс миҫал. Шулай итеп, балаларҙы маҡсатлы хыялланырға өйрәтәйек.**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**әңгәмәләште.**

✓ **- Бына ул үҙе, бына уның аты! - тип, күп офицерҙар араһынан Шайморатов генералды күрһәттеләр. Шаһиттарҙың ҡултамғалары ҡуйылған протокол Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы архивында әле лә һаҡлана.**



# УРАЛ БӨРКӨТӨ



## Йырҙарға күскән ғүмер

1948 йылдың октябрендә Башҡорт АССР-ы Хөкүмәте башҡорт халҡының легендар улы Шайморатов генерал һәләк булған ергә комиссия ебәрҙе. Хөкүмәт комиссияһының председателе - ошо юлдарҙың авторы, комиссия ағзалары - БАССР-ҙың атҡаҙанған фән эшмәкәре, Башҡорт АССР-ы Һаулыҡ һаҡлау министрлығының суд-медицина эксперты, профессор В. Г. Кузнецов, ТАСС-тың Башҡорт дивизияһындағы элекке фотохәбәрсеһе Л. И. Яҡупов, дивизияның элекке политработнигы К. Х. Ғәбитов ине. Комиссия Ворошиловград өлкәһенең ул саҡтағы Ивановка районында Башҡорт дивизияһы командиры генерал-майор М. М. Шайморатовтың һәләк булған урынын Штеревка поселогынан бер километр көньяҡтараҡ һәм Ивановка поселогынан дүрт километр төньяҡтараҡ һуҙылған балкала билдәләне һәм генерал-майор М. М. Шайморатовтың кәүҙәһен шундағы бер туғандар ҡәберлегенән эҙләп табып, 1948 йылдың 20 октябрендә уны Петровский заводы алдына айырым күсереп ерләне.

Был мөһим ваҡиғаға тиклем, әлбиттә, комиссия тарафынан байтаҡ ҡына әҙерлек, эҙләнеү эштәре үткәрелде. Беҙ тәүҙә Мәскәүҙә Генеральный штабҡа инеп, Шайморатовтың фотоһы һәм үҙ ҡулы менән яҙған анкетаһы менән таныштыҡ. Ҡатыны Ольга Павловна менән осрашып, унан да күп кенә фотоларын, кейгән кейемдәренең үлсәүен алдыҡ.

Ворошиловградта өлкә Советы башҡарма комитетына индек, ундағы етәкселәрҙе үҙебеҙҙең план менән таныштырҙыҡ. Украин иптәштәр беҙҙе бик асыҡ йөҙ менән ҡаршыланылар.

- Ике машина биреп ҡуйырбыҙ, ярҙамға йәнә бер иптәште алырһығыҙ,- тине улар.

Бына беҙ, биш кеше, Ворошиловградтан көньяҡ-көнсығышта Ивановка (район үҙәге) һәм Штеревка тигән ауылдар араһындағы ҡалҡыулыҡҡа килеп баҫтыҡ. Ошонда 1943 йылдың февралендә Башҡорт кавалерия дивизияһы дошманға ҡаршы аяуһыҙ һуғыш алып барҙы. Ә шуға тиклем ул дошман тылында 17 тәүлек буйына һуғышты. Дивизия Совет Армияһы командованиеһы йөкләткән яуаплы бурысты тулыһы менән үтәп, әлеге ҡалҡыулыҡ аша дошман тылынан сығып килә ине... Ҡаты алышта яугир генералыбыҙ Шайморатов ҡаһармандарса һәләк булды. Ләкин беҙ уны үҙ ҡулыбыҙ менән ерләй алманыҡ, һәләк булғандарҙы дошман тылында яу яланында ҡалдырып китергә тура килде. Урындағы халыҡ уларҙы дөйөм ҡәберлеккә күмгән.

Ҡаршылағы Штеревка утарына йүнәлдек. Урамдың тап уртаһында бик матур баҡса: һомғол тирәктәр ҙә, ҡуйы япраҡлы сағандар ҙа тәрән хәтирәләргә күмелгәндәй, талғын ғына серләшеп, тирә-йүнгә йәм бөркөп ултыралар. Баҡса уртаһында ҡәбер өҫтөндә - дүрт ҡырлы обелиск-һәйкәл. Баҡһаҡ, иҫ китмәле хәл: таш таҡтаға алтын хәрефтәр менән: "Бында һөйөклө уҡытыусыбыҙ М. Н. Матвеева иптәш һәм 8-се кавалерия корпусы командиры генерал-лейтенант М. Д. Борисов ерләнде",- тип яҙып ҡуйылған... Был ҙур хата ине. Сөнки, беҙҙең белеүебеҙсә, тәрән рейдтан сыҡҡан саҡта генерал Борисов үлмәне, ул шул көндә, 23 февралдә иртәнге сәғәт биштә дошман тарафынан әсирлеккә алынды. Хәҙерге көндә лә иҫән-һау ине.

Ни ҙә булһа асыҡлап булмаҫмы тип, колхоз идараһына киттек. Унда беҙҙе фронтташ дуҫыбыҙ, хәҙер инде колхоз председателе Ф. Игнатенко шат йөҙ менән ҡаршы алды, мөмкин булған бөтә ярҙамды күрһәтергә әҙер тороуын белдерҙе. Тағы баяғы ҡәбер янына килдек. Бында Борисов түгел, кем ерләнгән һуң?..

Беҙҙең менән дошман тылында бөтәһе биш генерал булды. М. Д. Борисовтың яҙмышы беҙгә билдәле ине инде; уның урынбаҫары Г. Д. Дудко Миус йылғаһы тирәһендә 20 февралдә үлеп ҡалды. Уны үҙебеҙ ерләнек. Генерал И. Ф. Якунин (14-се дивизия командиры) менән П. Ф. Чаленко (15-се дивизия командиры) беҙҙең һымаҡ уҡ иҫән-һау Оло ергә сыҡты. Тимәк, был урында үлеп ҡалған генерал М. М. Шайморатов булырға тейеш. Ә инде был "Борисов"ты кем ерләгән, уның генерал икәнлеген нисек белгәндәр? Ошо ҡатмарлы һорауҙарға яуап табырға кәрәк ине. Көтөү ҡайтыу менән ауыл халҡын клубҡа йыйырға булдыҡ.

Кисен клуб халыҡ менән шығырым тулды. Башта үҙебеҙҙең бында килеү маҡсатын һөйләп бирҙек. Төрлө-төрлө һорауҙар ҙа күп булды. Беҙ үҙ сиратыбыҙҙа:

- Генерал "Борисов"ты күмгәндә кемдәр бар ине? Уның кәүҙәһен ҡайһы урындан алдығыҙ? Генерал икәнлеген ҡайҙан белдегеҙ?- тигән һорауҙар ҡуйҙыҡ. Зал бер аҙ тынып торҙо. Халыҡ араһынан аҡ һаҡаллы бер ҡарт, ҡалҡынып:

- Минең фамилиям Ф. Романенко,- тип һүҙ башланы.- Үҙем һуғышта була алманым, йәшем ҙур ине, ошонда ауылда ғына йәшәнем. Кавалерия корпусының дошманға ҡаршы ҡаты һуғыш алып барыуын үҙ күҙҙәрем менән күреп торҙом. Ҡаршылағы ҡалҡыулыҡта һуғыш тыныу менән беҙҙең утарға немецтәр килеп тулды. Улар тәүге көндә үҙҙәренең үлгән һалдаттарын, офицерҙарын күмделәр, йәрәхәтләнгәндәрен ҡайҙалыр оҙаттылар. Икенсе көндә мине, тағы ла И. Иванко ҡартты ике немец офицеры баяғы һуғыш яланына алып китте. Беҙҙе бер генерал кәүҙәһе янына килтерҙеләр ҙә шунда соҡор ҡаҙыттылар, үҙҙәре беҙ эшләгәндә ҡарап торҙолар. Ҡәбер әҙер булғас, генералды күмергә бойорҙолар; мәрхүмдең өҫ кейемдәре, хром итеге һәм башында ҡырма бүрке бар ине. Һуңынан тағы ла ике соҡор ҡаҙып, үлеп ҡалған һалдат һәм офицерҙарҙы йыйып күмдек.

- Яралангандары юҡ инеме ни?

- Юҡ, яралангандарын фашистар үлтерҙеләр инде. Әсир алынған ике офицерҙы тимер сыбыҡтар менән ҡушар бәйләнеләр ҙә, өҫтәренә бензин һибеп, сиркәү эргәһендә тереләй яндырҙылар,- тине ҡарт (Һуңынан уларҙың кем икәнлеге асыҡланды - береһе корпус политбүлеге начальнигы урынбаҫары майор Паршин, икенсеһе корпустың махсус бүлек начальнигы подполковник Лазарев булып сыҡты). Фашистар беҙҙең ауылда 25 йыл уҡытҡан, Ленин ордены менән наградланған уҡытыусыбыҙ М. Н. Матвееваны тиреҫләтә атып киттеләр. Ул өлкә Советы депутаты ине. Гитлерсылар олағыу менән беҙ уҡытыусыны ҡәҙерләп ана шунда - баҡсаға ерләргә булдыҡ. Йыйылған ауылдаштарға: "Әйҙәгеҙ, асыҡ яланда күмелгән генералды ла ошонда күсереп ҡуйайыҡ", - тип тәҡдим иттем. Фекерҙе халыҡ хуп күрҙе. Шулай итеп, баҡса эсендәге ҡәберҙә уҡытыусыбыҙ М. Н. Матвеева менән ана шул генерал ерләнгән, - тип һүҙен бөтөрҙө ҡарт.

- Бәлки, һеҙ ерләгән кеше генерал түгелдер, берәй өлкән офицер ғына булғандыр?

- Мин үҙем ҡарт һалдат, генерал менән офицерҙы ғына айырам. Генерал булмаһа, немецтәр уны дөйөм ҡәбергә һалырҙар ине.

Хәҙер инде баҡсала, ысындан да, ниндәйҙер генерал ерләнгәне хаҡында шик ҡалманы. Клубтан беҙ һуң ғына таралыштыҡ.

Иртәгеһенә генералды күмеүсе ҡарттарҙы колхоз идараһына саҡырҙыҡ. Өҫтәлгә таратып һалынған төрлө фотоларҙы күрһәтеп:

- Һеҙ күмгән генерал бында бармы, таный алырһығыҙмы? - тинек. Бер аҙ ҡарап торғас, икеһе бергә:

- Бына ул үҙе, бына уның аты! - тип, күп офицерҙар араһынан Шайморатов генералды күрһәттеләр. Шаһиттарҙың ҡултамғалары ҡуйылған протокол Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы архивында әле лә һаҡлана.

Баҡсалағы туғандар ҡәберлегендә генерал Шайморатовтың ерләнгәнлегенә беҙҙә шик ҡалманы. Ләкин профессор В. Г. Кузнецовҡа анатомик анализ яһап, акт төҙөргә кәрәк ине. Ҡәберҙе астыҡ. Профессор ҡәбергә үҙе төштө, һаҡлыҡ менән генә табутты асып ҡараны. Унда мәрхүмә ине. Икенсе табут тәңгәлен соҡой башланылар. Көтмәгәндә К. Ғәбитов менән Л. Яҡупов: "Ана, Шайморатов!"- тип, үҙҙәре лә һиҙмәстән, ҡысҡырып ебәрҙеләр. Табуттың өҫкө таҡтаһы ҡайырылып һынған, мәрхүмдең таныш сәсле башы күренеп тора. Муйыл сәстәре матур көйөнсә һаҡланған. Ҡуш эйәк, ҡалҡыу бит һөйәктәре - былар һәммәһе лә уның беҙ яҡшы белгән Шайморатов икәнлегендә һис бер төрлө шик ҡалдырмай ине. Табут тирәһендәге балсыҡты профессор үҙ ҡулы менән таҙартты, муртлана башлаған таҡталарҙы яңыртып нығытырға ҡушты, йәһәт кенә өс таҡта ала һалып, табуттың ҡабырғаһына һәм өҫтөнә беркеттек, шунан уны һаҡлыҡ менән өҫкә күтәреп алдыҡ. Машинаға һалып, Штеревканан дүрт саҡрымдағы Петровский тигән эшселәр поселогына - больницаға алып киттек. Завод етәкселәре лә, эшселәр ҙә беҙҙе алсаҡ ҡаршыланылар, ихлас хәстәрлек күрһәттеләр. Больницала табутты айырым бүлмәгә ҡуйҙыҡ. Профессорға ярҙамға ике медсестра беркетелде. Киң өҫтәлгә аҡ простыня йәйеп, профессор ҙур һаҡлыҡ менән тикшереү эштәрен башланы. Мин иһә генералдың тетелеп бөткән кейемдәрен ентекләп аҡтарам (улар, ҡарап тороуға бөтөн генә күренһә лә, тотоу менән үк ыуалып бара ине). Бына бер мәл һырыған салбар билендә бармаҡ ниндәйҙер ҡаты төйөнгә төртөлдө. Ипләп кенә мамыҡты аҡтарам. Тутығып бөткән ҡара ҡалайҙан яһалған медальон килеп сыҡты (уларҙы беҙгә Донда - Тербуны II поселогында саҡта уҡ тараҡтайнылар). Игәү менән урталай өҙгәс, төрөүле бер ҡағыҙ киҫәге күренде. Хәрефтәре юйылып бөткән. Лупа аша ҡарайбыҙ, айырым хәрефтәрҙе бергә теркәйбеҙ. Шуларҙан "Шаймур..." тигән һүҙҙәрҙе уҡыныҡ. Был инде мәрхүмдең генерал М. М. Шайморатов икәнлегендә бер ниндәй ҙә шик ҡалдырманы. Профессор ҙа мәрхүмдең янбаш һөйәгендә һаҡланған ҡара эҙ тапты. Был инде Шайморатов генералыбыҙҙың граждандар һуғышы осоронда алған яраһының йөйө - был хаҡта ул үҙенең анкетаһында ла яҙғайны. Профессор, анатомик анализды тамамлап, акт төҙөнө. "Был, ысынлап та, генерал М. М. Шайморатов", - тип билдәләп, документтың аҙағына барыбыҙ ҙа ҡул ҡуйҙыҡ (был акт та Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы архивында һаҡлана).

Яңы генерал кейеме тектерҙек, яңы табут яһатып, һөйөклө командирыбыҙҙы завод баҡсаһында ерләнек. Матәм митингыһына поселоктың, Штеревка утарының барса халҡы йыйылды. Уларға мин М. М. Шайморатовтың Ватан алдында, Коммунистар партияһы алдында күрһәткән яугир хеҙмәте, мәңге онотолмаҫ батырлығы тураһында һөйләнем. 25 мылтыҡтан өс мәртәбә хәрби салют бирелде. Ҡәбер өҫтөнә һәйкәл эшләтеүҙе завод дирекцияһы үҙ өҫтөнә алды. Ысындан да, тиҙҙән улар ул һәйкәлде мәрмәр таштан ҡойҙороп ҡуйғандар.

Легендар командирҙың ҡәбере хәҙер ҙә шул үҙе һуғышып йөрөп һәләк булған ерҙә оло хөрмәт менән солғап алынған. Янында - Ватан өсөн бергә ғүмерҙәрен биргән яуҙаштары. Изге урынға пионер ойошмаһы шефлыҡ итә. Ҡасан ҡарама - тере сәскәләр... Был һуҡмаҡтан һис ҡасан да ил аяғы өҙөлмәҫ.

**(Аҙағы. Башы 37-38-се һандарҙа).**

**Кеше етәксе булып тыуамай, әммә лидер булып тыуа. Ана шул лидерҙар иптәштәрен, класташтарын, хеҙмәттәштәрен ойоштороп, беректереп, ниməләргəлер әйҙәп йөрөтә, эргә-тирәһендәгеләрҙе хәрәкәткә килтерә, идеялар бирә, маҡсатҡа ынтылдыра. Бындайҙар үҙенә ышандыра, яуаплылыҡ ала белә. Тап шундай лидерҙарҙың береһе лә инде Сибай концерт-театр берекмәһе директоры, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Айбулат ҠОТОШОВ.**

# СИБАЙ ЕРЛЕГЕНДӘ...

## ғаилә ҡорҙом, хеҙмәт юлын башланым



➔ **Айбулат Миңлегәле улы, миндә йыш ҡына ошондай һорау тыуа: ни өсөн ауылда, шундай тәбиғилектә, ат уйнатып, көтөү көтөп, бесән сабып үҫкән малайҙар үҫеп етә лә актер һөнәрен һайлай? Ниндәй сәбәптәр һайлата ала унан был һөнәрҙе?**

- Сәнғәттең башланғысы тап ана шул ауыл һиллегендә, тәбиғилегендә, киске усаҡтар яҡтыһында, иртәнге томандарҙа, бесән сапҡанда уйланған уйҙарҙа, көтөү көткәндә ҡысҡырып йырланған йырҙарҙа инде. Асылда, сәнғәткә һөйөү, сәнғәти һәләт ул беҙҙең ҡанда. Ишембай районы Ҡарайған ауылы ҡыҙы Хәсбиямал өләсәйебеҙҙе "Ишембай һандуғасы" тип йөрөттөләр. Уның йырлағанын табындарҙа тын да алмай тыңлайҙар ине. Унан ҡала атай йырланы. Әсәй менән икеһе лә уҡытыусылар, бөтөн ауыл концерттарын әҙерләп ҡуйыусылар ҙа улар. Элек бит берәй байрам булһа, ҙурҙан концерт ҡуйҙылар, спектаклдәр әҙерләнеләр. Һәм бөтөн ошо мәҙәни-масса хеҙмәтен ауылдың ябай уҡытыусылары, механизаторҙары, һауынсылары, йәғни, ябай халыҡ араһындағы үҙ оҫталары башҡара ине. Ә гармунсылар күпме була торғайны! Беҙҙә, мәҫәлән, өй аша гармун уйнайҙар ине. Мин дә был моңға ғашиҡ булып, бәләкәй генә көйөнсә ҙур гармун артында ултырып өйрәндем. Әле уҡымаған да сағымда уҡ сәхнәлә йырлап-уйнап йөрөп, шул йәшемдә уҡ кем булырға теләгәнемде белә инем. Һәм мәктәптән һуң сәнғәт институтына килдем дә. Институтҡа килеп ингән тәүге көндәрем уҡ яҙмышымды хәл итте лә ҡуйҙы. Имтихандар ваҡытында уҡ буласаҡ ҡатыным Миңзәлә менән таныштым, уҡыуҙарҙы актерҙар ғаиләһе булып башланыҡ та киттек. 1997 йылда төркөмөбөҙ менән Сибай дәүләт драма театрына ҡайттыҡ һәм шунда 15 йыл хеҙмәт иттек.

Был дәүерҙә актер булыу менән бер рәттән, кем генә булманмы инде, хатта урам да һеперелде. Яратҡан һөнәребеҙҙең үҙенә арбалып килеүселәрҙе шулай аҡсаһыҙлыҡ, юҡлыҡ менән һынай ҙа икәнлеген төшөнә барҙыҡ. Ғүмер үтә торҙо, ғаилә артты, уның менән бергә яуаплылыҡ та, кәрәк-яраҡ дәүмәле лә артты. "Юҡ, Айбулат, былай булмай" тинем мин бер көн һәм ниндәйҙер икенсе юлдарҙы ла эҙләй башланым. Театрҙа администратор эшен дә бер юлы алып барып, художество етәксеһенә ярҙамсы булып, башҡа төрлө ойоштороу эштәрен дә башҡара килеп, үҙемде етәксе ролендә күрһәтә алғанмындыр күрәһең, ниндәйҙер бер араубыҡта Ишембай районы мәҙәниәт булеген етәкләргә тәҡдим иттеләр. Унда тәжрибә туплап, өйрәнеп, урынлашып китеүебеҙ булды, Сибай концерт-театр берекмәһенә саҡырып ҡайтарҙылар. Йөшермәйем, Сибайға мин йәрәкһеп ҡайттым, сөнки был ҡала, Урал арьяғы ерлеге минә үтә яҡын булып киткән, хеҙмәт башлаған, ғаилә менән күпме шатлыҡ-ҡыуаныстар кисергән, балаларыбыҙҙы тыуҙырған төйәк бит инде. Ҡайттыҡ. Ҡайттыҡ та ең һыҙғанып эшкә тотондоҡ.

➔ **Балаларығыҙға актер һөнәрен тәҡдим итәһегеҙме? Әйткәндәй, һеҙ дүрт бала тәрбиәләгән актер ғаиләһе - был үҙе үк һирәк күренеш.**

- Улыбыҙ Динислам 3 йәшенән сәхнәлә булды. "Ғәйебем булһа, кисерегеҙ", "Китмәгеҙ, торналар!" кеүек үтә етди тамашаларҙа ла уйнаны хатта. Һәм бына шул бәләкәс кенә баланы оло артистар рәтендә йөрөтөп тә, уны шул уйнағанына ышандырып, уның бәләкәй генә йөрәгә аша кисертеп, "Һин, улым, әртис булма инде" тип әйтәһеңме? Юҡ, әлбиттә. Береһенең дә теләгенә ҡаршы килмәйем. Күңелдәре теләгән һөнәрҙе һайлап, белем алып, хеҙмәт итһендәр. Миңә, мәҫәлән, был һөнәрҙе һайлауыма атай-әсәйем ҡаршы төштө һәм мин сәнғәт юлына ураý-ураý һуҡмаҡтар аша килеп төштөм. Ваҡытымды үткәрҙем, үҙемдекен иҫбатланым, әммә барыбер килдем. Шул сәбәптән сығып, балаларымдың теләгенә аяҡ салыу түгел, киреһенсә, хәлемдән килгән ярҙамды тәҡдим итәм. Иң мөһиме, ысын кеше булһындар, ә һөнәр ул үҙгәрә лә, алышына ла, яңыртыла ла торған нәмә.

➔ **Артист тормошоноң әсесәсөһөн кисергән кеше булараҡ, бөгөнгө артистарҙың йәшәйешен нисек баһалайһығыҙ?**

- Артист булһынмы ул, башҡа һөнәр эйәһеме, һәр кешенең үҙенән тора. Һин нисек йәшәргә теләйһең, шулай итеп көн күрә алаһың. Үҙебеҙҙең коллектив егет-ҡыҙҙарынан ғына алып әйтә алам - насар йәшәмәйҙәр. Йорттар төҙөйҙәр, ғаиләләрендә икешәр машина, ялдарын матур итеп ойошторалар. Беҙҙең һөнәрҙә бит ул ҡоро һәләт кенә алыҫ алып китә алмай, һәләттән былайыраҡ тырышлыҡ, маҡсатлы булыу зарур. Йырсыға ла, бейеүсегә лә, актерға ла үҙ-үҙен үҫтерә белеү, эҙләнеү, алға ынтылыш хас булһын. Беҙҙең артистарҙың бер проблемаһы бар: улар атҡаҙанған исемен алһа, йәшәйеш һәм хеҙмәт маҡсатының түбәһенә менеп баҫтым икән тип улай ҙа ҡуя. Был төптө хата уй. Тап бына ошо урындан тағы ла емешлерәк хеҙмәт башланырға тейеш. Тамашасы исемле артистан тәмлерәк емештәр көтә, ә улар ғәҙәткә генә һалына ла ҡала. Шунан рейтинги төшә был артистың һәм күп тә үтмәй, юғалып та ҡала. Бөгөн бит хәрәкәт, яңылыҡ, мәғлүмәт замана. Һәләтен халыҡҡа берәй мәғлүмәт йә яңылыҡ бирмәй икән, һин уларға ҡыҙыҡ та түгелһең. Был тәңгәлдә һәр кем үҙ хеҙмәте өсөн яуаплы булған кеүек, артист та һәләте өсөн яуаплы.

➔ **Күп осраҡта Сибай кеүек бәләкәй ҡалаларҙа, йәғни провинцияла башланғыс алған артистар ҙур ерҙәргә, мәҫәлән, баш ҡалаға тартыла. Был уларға популяр булыуға булышлыҡ итәме? Ғөмүмән, артистың ҡайҙа йәшәп ижад итеүе уның билдәле булыу-булмауын хәл итә аламы?**

- Сибай драма театрынан башлайым әле. Был театр баш ҡаланан да, башҡа оло төбәктәрҙән дә алыҫта ята. Әммә уны бөтә ерҙә лә беләләр һәм көтөп алалар. Халыҡ араһындағы ул яулаған һөйөү менән әлегәсә бер билдәле театр ҙа ярыша алмай. Шулай уҡ концерт-театр берекмәһе артистары ла, беҙҙең "сулпан"дар ҙа ошо кимәлдә. Уларҙы ябай халыҡ күберәк белә, сөнки улар сығыш яһаған бәләкәй ауылдарҙа ҙур филармониялар йөрөмәй ҙә. Был тәңгәлдә мин артистарға ла шуны аңлатырға тырышам: тамашаһы һөйөүен яулау өсөн оло сәхнә мөһим түгел, ә һәләт һәм ихласлыҡ кәрәк. Бына ошонда яратылып эшләп йөрөгән ҡайһы бер артистарыбыҙҙың ҙур ҡалаларға юлланып, ундағы үҙҙәре кеүек мендәр араһында юғалып ҡалғандары ла аҙ түгел. Һәм беҙ үҙебеҙгә килеп сығыш яһаған билдәле генә артистарҙың йәки коллективтарҙың да ҡайһы ваҡыт сифатһыҙ сығыштарын ҡарап ҡалырға мәжбүрбеҙ. Шулай уҡ телевизорҙан, гәзит биттәренән төшмәгәндәр ҙә әле иң һәләтлеһе һәм билдәлеһе тигән һүҙ түгел. Күрәһегеҙ, был миҫалдар артисты ерлек түгел, ә үҙе - һәләте һәм тырыш хеҙмәте генә популяр итә алыуын дәлилләй.

➔ **Бөгөн йәш артисты, мәҫәлән, Сибайҙа ҡалдырыу өсөн нимә тәҡдим итергә мөмкин?**

- Йәш ваҡытта, яңы ғаилә ҡорғанда иң кәрәкле нәмә нимә? Бына беҙҙе, мәҫәлән, торлаҡ тотто. Ул замандағы ҡала башлығы Зиннур Ғөбәйҙулла улы бөтөн өлкәгә лә белгестәрҙе һәм һөнәр эйәләрен торлаҡ менән йәлеп итеп йыйып алды. Һәм шул тулҡын менән килгән күс ҡаланы сәскә аттырҙы ла инде. Үкенескә күрә, бөгөн йәштәргә ундай иғтибар юҡ. Ысынлап йөрәк әрней бына, балҡып торған йәштәр бар, тик уларҙы урынлаштырыуы ауыр. Фатир бир шундайҙарға, хатта Өфөнән киләсәк талантлар һәм гөрләтеп эшләп тә китәсәк. Бер ниндәй экология ла, башҡаһы ла кәртә булмаҫ ине.

➔ **Театр-филармонияларҙа ниндәйҙер яңылыҡ индереү тулҡыны китте. Ғәҙәти булмаған, шаҡҡатырғыс тамашаларҙы, режиссер алымдарын ҡайһы ваҡыт аңлап та етмәй ҡуябыҙ. Һеҙҙең коллективҡа ҡағылдымы был заман еле?**

- Уйлап табылған яңылыҡ ғүмерһеҙ була, ғәҙәттә. Нисек кенә оригиналь булмаһын тамаша, ул үҙенең эстәлеге нигеҙендә генә йәшәй ала. Ә инде беҙҙең тамашасыға килгәндә, ул барыбер ҙә үҙ менталитетына хас булғанды ғына ҡабул итәсәк. Ҡарар ул яңыларын да, бәлки, ҡабул да итер, хатта маҡтар ҙа, әммә күңел һалмаҫ. Шулай уҡ заман һәм тарих үҙе лә күрһәтеп, иҫбатлап тора, яңылыҡтар үтеп китеп онотола ла, һаман урап килеп, шул халыҡсанлыҡҡа ҡайтып ҡалабыҙ. Боронғо киноларға, йырҙарға, костюмдарға, хатта декорацияларға әйләнеп ҡайтабыҙ. Үҙ булмышыңдан, асылыңдан китеп булмай, был беҙгә тәбиғәттән һалынған. Бына мин үҙем ниндәй генә концерт-спектаклдәр ҡараһам да, сит ил, сит мәҙәниәт саларын ҡарап һоҡланһам да, ҡурай моңон, халыҡ йырын тыңламайынса күңелем булмай.

➔ **Үҙе лә актриса булып, ҡатыныгыҙҙың дүрт балаға әсәй булырға йөрьәт итеүе һоҡландыра. Ул ғаилә өсөн үҙ һөнәрен ҡорбан иттеме?**

- Һәр бала беҙҙең ғаиләлә теләп алынды, ҡатыным береһенә лә "көүәм боҙола" йәки "эшем юғала" тип торманы. Мин дә уны "һуыш ваҡытында ла балалар тыуған һәм үҫкән, бирешмәбеҙ" тип ышандырҙым. Әлеге баштa һөйләгән "яуаплылыҡ" тигән төшөнсә мөһим бында ла. Ир кеше өйләнгән икән, ҡатыны, тыуған балалары, ҡорған ғаиләһе өсөн яуаплы була белһен, тип иҫәпләйем мин. Сөнки бөтөн кире күренештәрҙең дә башы ир-егеттең яуапһыҙлығынан килә. Айырылышыу һәм балаларҙың атайһыҙ үҫеүе лә, ҡатын-ҡыҙҙың эсеүе йәки башҡа бәйһеҙлеге лә, бала-сағаның яман юлға баҫыуы ла, аҡсаһыҙлыҡ, етешмәгәнлек һәм башҡалар ғаиләлә атайҙың үҙ бурысын тейешле кимәлдә үтәмәүенәндер тип уйлайым. Атай абруйы, һүҙе һәм башҡарған эштәре балаларҙы ла, ҡатынды ла тәртиптә тота ала.

Ҡатыным минең менән һәр эштә лә бергә, шунлыҡтан, мин уны бер нисек тә ҡорбан ролендә күрмәйем. Беҙ йәштән бер сәхнәлә, артабан мин етәкселек иткән коллективтарҙа ул да ижади эшмәкәрлек алып барҙы, бер ваҡытта ла икенсе планға күсмәне йәки оҙайлы декретта ултырманы. Ҡатынымды йәш актриса икән тип уйлай ҡайһы берәүҙәр. Был уның бәхетле әсәй, тормошо менән, ире менән ҡәнәғәт ҡатын-ҡыҙ булыуының да күрһәткеселәр, моғайын. Әйткәндәй, бөгөн беҙҙе ҡыҙыбыҙ менән кейәүебеҙ тупатай ейәнсәргә олатай-өләсәй итеп ҡуйҙы әле.

➔ **Етәкселек иткән коллективығыҙға өмөтөгөҙ ҙурмы?**

- Ҙур, бик ҙур. Өмөтлө һәм өмәтле, һәләтле коллектив тупланған Сибай концерт-театр берекмәһендә. Әгәр бөгөн берәй йәш артист төплө мәктәп үтергә һәм нимәләргәлер өйрәнергә теләй икән - беҙгә килһен. Бында халыҡсан ижад нигеҙендә тәрбиәләй торған оҫта һәм белемле уҡытыусылар етерлек. Бында ерлек, халыҡ, мөхит үҙе тәрбиәләй.

**Әлиә СӘЙҒӘФӘРОВА**
**әңгәмәләште.**

*✓ Өлкән йәштә лә теүәл аҡыллы булып ҡалыуға кешенең йәмғиәттәге статусы, байлығы түгел, ә даими рәүештә уйлау, фекерләү талап ителгән эштә эшләүе ярҙам итә.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ОҘАҠ ЙӘШӘҮ СЕРЕ

■ Ултырып эшләгән кешеләрҙә хроник сирҙәр йышыраҡ осрай, ти Канзас университеты ғалимдары. Һынауҙарҙа 45 йәштән 65 йәштәге ир-егеттәр ҡатнашҡан. Көндөң 4 сәғәттән артығыраҡ ваҡытын ултырып эшләүселәр араһында яман шеш сире, диабет, йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре йышыраҡ осраған. Бигерәк тә водителдәр һәм офис хеҙмәткәрҙәре араһында был күренеш киң таралған. Кешенең ауырлығы, йәше, матди һәм социаль хәле, шулай уҡ белеме мөһим түгел.

■ Бала ҡулдарының әүҙемлеге ни тиклем юғарыраҡ булған һайын уның фекерләү ҡеүәһе лә тиҙерәк үҫешә, бала яҡшыраҡ һөйләшә. Белгестәр шуға ла китапты баланың ҡулына иртәрәк тотторорға кәңәш итә. Ул уның биттәрен асырға маташҡанда ла, һыйпап ҡарағанда ла ҡулдарға массаж яһала. Шулай уҡ балалар китаптары тәкдим итеүсе етештереүселәрҙең төрлө уйынсыҡ формаһында яһалған китаптары ла бик уңайлы.

■ Йәшәү кимәле юғары булған илдәрҙә йәшәүселәрҙең ғүмер оҙайлығы күберәк, һаулығы ла яҡшыраҡ, әммә иң бай илдең дә оло кешеләре хәтер насарайыуы менән яфалана. Ғалимдар раҫлауынса, өлкән йәштә лә теүәл аҡыллы булып ҡалыуға кешенең йәмғиәттәге статусы, байлығы түгел, ә даими рәүештә уйлау, фекерләү талап ителгән эштә эшләүе ярҙам итә. Эше стандарт булмаған мәсьәләләрҙе хәл итеү менән бәйле булғандар хаҡлы ялға сыҡҡас та юғары менталь статусын һаҡлап ҡала.

■ Көнсығыш Финляндия университеты ғалимдары көрпәһенән таҙартылмаған ондан бешерелгән икмәктең файҙалы яҡтарын асыҡлаған. Ул ҡандағы шәкәрҙе түбәнәйтеп, икенсе типтағы диабет үҫеше хәүефен юҡҡа сығара. Ҡара икмәк инсулинға реакцияны ла яҡшырта, ә аҡ икмәктең сәләмәт кешеләргә лә файҙаһы бөтөнләй юҡ тиерлек. Көрпәле икмәк метаболизмға яҡшы йоғонто яһай, шуға ла ул диабеттан һаҡлаусы иң яҡшы сара тип табылған. Икмәктең был төрө ябыҡырға теләүселәргә лә ярҙам итә. Көнөнә бер нисә киҫәк икмәк ауырлыҡты нормала тотасаҡ, организмдағы майҙарҙан да ҡотҡарасаҡ.

■ Ғалимдар раҫлауынса, һәр кем 100 йәшкә тиклем йәшәй ала. Американың Джорджия штаты университетында ғүмерҙе оҙайтыу ысулдарын өйрәнеү буйынса ғилми эш алып барылған. Ғалимдар 2001-2009 йылдар арауығында 100 йәш һәм унан да олораҡ 240 кешене тикшереп, ғүмер оҙайлығына тәьҫир итеүсе психологик һәм социаль факторҙарҙы асыҡлаған. Геронтология институты директоры һәм тикшеренеүҙәр авторы Леонард Пун оҙаҡ йәшәргә теләүселәргә тормошто тик ыңғай яҡтан ҡабул итергә кәңәш итә. Был оҙағыраҡ йәшәүҙең иң мөһим факторы.

■ Корнелл университеты ғалимдары раҫлауынса, тәм тойоусанлыҡ боҙолоуы, тәү сиратта, организмға тимер етешмәгәндә барлыҡҡа килә. Һынауҙарҙа ҡатнашыусыларҙың тәм тойоусанлығы боҙолоуы менән бергә гемоглобин кимәле түбәнәйеүе асыҡланған. Ашарға ярамаған нәмәне ашарға теләү тойғоһо тимер дефициты менән бергә ҙурая. Анемия мейегә йоғонто яһай һәм кеше ғәҙәттән тыш ашарға ярамаған әйбергә ынтыла башлай, әммә бынан гемоглобин кимәле күтәрелмәй. Ғалимдар иҫәпләүенсә, табиптар дисгевзияға тейешенсә иғтибар бүлергә тейеш, юғиһә, уның сәләмәтлеккә насар йоғонтоһо ҙур.

БЕҘҘЕҢ СӘФӘРҘӘР

**Силәбе яғын көмөш күлдәр иле тип нарыҡлайҙар. Ысынлап та, бында балыҡлы тәрән күлдәр бик йыш осрай. Башҡортостан менән сиктәш мәғрур тау-ҡаяларҙы үтеп сыҡҡыһыҙ тайга, ҡарағай урмандары ҡаплаған. Мал үрсетеүгә ҡулай иркен дала яҡтарына башҡорт ырыуҙары Уралтау һырттары аша тегеләй-былай аша төшөп, күсенеп, күп ауылдарға нигеҙ һалған. Бында ҡыуаҡан, терһәк, һалйот ырыуы башҡорттары борондан йәшәгән, 18-се быуат баштарында хәҙерге Салауат районы яғынан, Әй һәм Йөрүҙән буйҙарынан әйле ырыуы күпләп күсенә, Учалы яғынан табындар килә. Был күсенеү башҡорт илендә ҡуптан ихтилалдар менән, батша карателдәре эҙәрлекләүе менән дә бәйле. Төбәктәге халыҡ Урал аръяғында боҫоп ятмаған, киреһенсә, башҡорттарҙың ер һәм ирек өсөн күтәрелгән ихтилалдарында, айырыуса Салауат яуында әүҙем ҡатнашҡан, ҡаҙылма байлыҡтар сығарыу рудниктарында һәм беренсе заводтарҙа эшләгән. Кантонлыҡ осоронда 8-се башҡорт кантонының күп ир-егеттәре Рәсәйҙең сиктәрен һаҡлауҙа һәм төрлө һуғыш-походтарҙа башын һалған. 1934 йылда ойошторолған Силәбе өлкәһенә Оло Башҡортостандың рудаға бай тау-урманлы, бик матур тәбиғәтле ерҙәре Калинин менән Сталиндың бер ҡултамғаһы менән бүлеп бирелә. Ерен-һыуын һаҡлап ҡорбан булған башҡорт батырҙарының ожмахтай бай ил хаҡында хыялы шулай Урал аръяғында айырылып торып ҡала. Әммә халыҡтың күңеле һәм аҡылы бер бөтөн булып ҡала: силәбеләр Өфө ҡалаһына уҡырға килә, Башҡортостанда эшләй, үҙҙәренең мәктәптәрендә башҡортса уҡыу-уҡытыуҙы өҙмәскә һәм өҙөлгәнен яйға һалырға ынтыла. Бөгөн өлкәнең Силәбе, Магнит, Златоуст (Алтынтамаҡ), Ҡурған, Сатҡа, Сим (Эҫем) ҡалаларында һәм башлыса Арғаяш, Сосновка, Ҡоншаҡ, Красноармеец, Сыбаркүл районы ауылдарында 162 меңдән ашыу башҡорт йәшәй (2010 йылғы мәғлүмәт). Был юлы беҙ Силәбенең биш районына сәфәр ҡылдыҡ. Һүҙебеҙ шул турала.**

# КӨМӨШ КҮЛДӘР ИЛЕНДӘ,

## аҫыл башҡорт ерендә



Ағаяшта.

### Сосновка районында

Силәбе өлкәһенең Сосновка районы ағинәйҙәрен мин тәүбашлап 2013 йылда Сибай ҡалаһында үткән "Мөнәжәт" байрамында күргәйнем. Алыҫ ара тип тормай, Уралтау буйлап 450 саҡрымды елдереп, Рабиға Фәрит ҡыҙы Бикбулатова етәкселегендәге был төркөм Ирәндек буйына килеп еткәйне. Сәхнә тулып килеп сыҡҡан силәбеләрҙе сәләмләп, тамашасы оҙаҡ ҡул сапты. Һикһән йәштән утыҙ йәшкә саҡлы уңһигеҙ ҡатын мөнәжәт, бәйет, төбәк йыры менән бәйге тотто. Уларҙы тыңлау үҙе бер асыш һәм кинәнес булды. Сосновка районы Табын ауылынан оло йәштәге Ғәйҙәнә Шафиҡова менән Заза Дауытова апайҙарҙың боронғо мөнәжәте бар халыҡты хайран ҡалдырҙы. Үҙҙәренең инәй-картинәйҙәренән мираҫ булып ҡалған милли кейемдәре әле ул осорҙа ағинәйҙәр араһында саҡ ҡыҙып барған мәҙәни яңылыҡ - халыҡсан кейемдәр тегеп кейеүгә яңы этәргес, бер һулыш-күтәрелеш бирҙе.

Быйылғы сәйәхәтебеҙ ҙә Сосновка районынан башланды. Беҙҙең тәүге осрашыу урынында - Трубный ауылының яҡты һәм аулаҡ мәҙәниәт йортонда "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзалары өсөн мәҙәниәт бүлмәһе булған. Ауыл һәүәҫкәрҙәрен әйҙәп, байрам-кисәләрҙә даими ҡатнашҡан ағинәйҙәргә туған башҡорт телен өйрәнергә теләгән балалар һәм йәштәр ҙә йыш мөрәжәғәт итә, тинеләр. Сосновка районы Дәрбиш ауылында (Ҡолой кантондан алда хеҙмәт иткән 5-се кантон начальнигы Дәрбиш Килмәков исеме менән бәйле, Оло Ҡарағай күл тигән икенсе атамаһы ла бар, янындағы Мәрзембай ауылын Кесе Ҡарағайкүл, тигәндәр, "төньяҡ әйләләр" нигеҙләгән ауылдар. А.А. Бикбулатов мәғлүмәтенән) тыуып-үҫкән һәм Трубныйҙа донъя көткән ветеран уҡытыусы Рабиға Фәрит ҡыҙы бынан дүрт йыл элек Силәбе өлкәһенең башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарын берләштергән "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһын ойоштора. Быйыл 2019 йылдың 13 августында ойошма рәсми теркәлеү үтә. Ағинәйҙәр өлкәлә туған телдә һәм мәҙәниәтте үҫтереү, яҡлау һәм һаҡлау, милли кейемдәр һәм биҙәүестәрҙе, халыҡ ижады өлгөләрен тергеҙеү, шәжәрәләр төҙөү, иртәк-эпос, йыр-көй, легендаларҙы йыйыу һәм башҡарыу, башҡорт йәштәренә халыҡ йолаларын өйрәтеү буйынса ғәйәт ҙур эш алып бара. Сосновкалағы ҡорға килгәндәр араһында ике ханым ныҡ иҫтә ҡалды. Трубныйҙан алыҫ ҡына ауылдарҙа йәшәүсе Ҡарамаҫтан, яйын табып йыйынсыбыҙға килгән был зыялы ханымдарҙың икеһе лә шиғыранә йәнле, дини белемгә ингән кешеләр булып сыҡты. Мәймүнә Хәкимова - хажиә, ауылдарындағы мәсеттә Ислам дине һабаҡтарын уҡыта. Уның сығышындағы "Ҡатын-ҡыҙҙың бала саҡтан уҡ, ғаилә мөхитендә уҡ белемгә, мәҙәниәтҡә ынтылыуы, уҙ-үҙен тәрбиәләүе - бөтә нәмәнән дә ҡиммәт, бар өйрәтеүҙәрҙән дә мөһим", тигән фекере иҫтә ҡалды. Икенсеһе, Фәриҙә Ғөбәйҙуллина иһә Башҡортостанда киң билдәле шәхес, милли башҡорт музыкаһына яңы заманса юл ярған композитор Халиҡ Заимовтың (1914-1977) яҡын туғаны булып сыҡты. Фәриҙә апай халыҡсан дидактика, аң һәм изгелек менән йәшәүгә өндәү, уйланыуҙар, тормош фәлсәфәһе менән һуғарылған ҡыҫҡа шиғри парсаларын уҡып ишеттерҙе.

Тамаша залындағы берҙән-бер ируҙаман тыуған яҡ тарихын өйрәнеүсе, Силәбе яғы башҡорттары һәм ауылдары буйынса тарихи материалдар туплап, халыҡты архив яҙмалары, шәжәрәләр менән таныштырыусы Бикбулатов Арыҫлан Авзал улы булып сыҡты. Утыҙ йыллап мәктәптә физкультура уҡытыусыһы булған, хаҡлы ялға сыҡҡас, тарих һәм топонимдар буйынса эҙләнеү-уҡыуға ныҡлап тотонған, ауылдар тарихы, шәхестәр тураһында ҡыҙыҡлы һәм фәһемле иҫтәлектәр, факттар туплаған. Ысынында, беҙҙең Башҡортостанда уның кеүек әүҙем крайҙы өйрәнеүсе юҡтыр ул. Арыҫлан Авзал улы үҙенең ошо эҙәрмән-тикшереүсе материалдарын өлкәнең һәм Башҡортостан Республикаһының төрлө баҫмаларында, ғилми йыйынтыҡтарҙа баҫтыра. Был эштә уға Силәбе ҡалаһындағы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһын етәкләүсе, ҡалала балалар өсөн йәкшәмбе башҡорт мәктәбен ойоштороусы ҡыҙы Резедә ярҙам итә.

## Арғаяш районында

Иртәгәһенә беҙҙе Арғаяш район мәҙәниәт йортонда көтәләр ине. Мәҙәни усаҡтың һылыу хужабикәһе Милә Кашаф ҡыҙы Үлмәҫбаева беҙҙе ҡояш кеүек балҡып ҡаршы алды. Шул арала Арғаяш районының "Ағинәйҙәр ҡоро" етәксеһе Мәрфуға Фәрит ҡыҙы Ҡорманғәлина осрашыуға бөтә башҡорт ауылдарынан да ағинәйҙәрҙе, фольклор ансамбле ағзаларын, уҡыусы ҡыҙ балаларҙы саҡырыуы тураһында хәбәр итте һәм район биләмәһендә үткәргән мәҙәни һәм тәрбиәүи саралар, ауылдарҙа башҡарылған эштәре тураһында ла һөйләп өлгөрҙө. Унын һүҙҙәрен йөпләп, ағинәйҙәрҙең район мәҙәниәт йорто эргәһендә эшләгән "Гүзәлем" фольклор ансамбле (етәксеһе Вәлиуллина Марина Ғәлиулла ҡыҙы) ошо төбәктең "Һәттә-түрә-ри" йырлы-бейеүле уйынын башлап ебәрҙе. Уларҙың сығышын Ҡуйһары ауылынан килгән ветеран уҡытыусы Винера Сөнәғәт ҡыҙы Шәймөхәмәтова яңғыратҡан моңло башҡорт халыҡ йыры алыштырҙы. Кисәбеҙҙе алып барыусы Милә Кашаф ҡыҙы һөйләүенсә, Винера апай үҙ тыуған яғында һәр милли байрамды, йыйындарҙы, осрашыуҙарҙы башҡорт халыҡ йырҙары менән биҙәй. Балаларға милли көйҙәрҙе өйрәтә, арымай талмай үҙ тыуған яғының мәнәжәт, бәйеттәрен пропагандалай. Йыраусыларҙың "Оҙон көй" (Туймазы ҡалаһы), "Ирәндек моңдары" (Сибай ҡалаһы), "Уралым" (Силәбе ҡалаһы) кеүек абруйлы бәйгеләре лә унын моңона шаһит - ул бер-нисә мәртәбә лауреат исеменә лайыҡ була, Башҡортостан һәм Силәбе телевидениеһы аша күп тапҡырҙар сығыш яһай. Ошондай Аллаһы Тәғәлә биргән һәләтен көнгәләм менән йомарт уртаҡлашып йәшәп ятҡан, моң әлиһәһе булған башҡорт ҡатынын нисек "ағинәй" тимәйһең инде!

Арғаяштағы осрашыуҙа Силәбе өлкәһенең "Урал" халыҡ ижады фестивалендә беренсе урын яулаусы, яҡташтарының йыр-моңға булған ихтыяжын ҡандырыусы "Сәләм" йыр төркөмө сығышы ла кинәндерҙе. Бигерәк тә унын ағзалары булған ағинәйҙәрҙең милли кейеме иғтибарҙы йәлеп итте. Нисек кенә булмаһын, был яҡтарҙағы башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары милли кейемдәге үҙенсәлектәрҙе һаҡларға тырыша. Кемдер "ҡартинәйемдең инәһенән ҡалған мираҫ" тип, тамбурлап ҡайылған алъяпҡыһын, кемдер "теге замандарҙан бирле һаҡланған" тип, ҡушъяулығын яҙып күрһәтә. Арғаяштар милли кейемде ҡушъяулыҡһыҙ кеймәй. Был яҡтарҙа ҡашмау осрамай тиерлек, ә төп биҙәүестәрен "яға" тиҙәр, унһы тәңкәләр һәм ҡортбаштар менән биҙәлә, гәрәбә теҙеп сығыла, ваҡ мәрйендән селтәрҙәр үрелмәй.

Беҙҙең осрашыуҙа "Һомай" халыҡ театры (Иҫән ауылы, етәксеһе Фәрхәнә Фәрит ҡыҙы Зөлфетдинова), "Аждаһаҡай" балалар драма студияһы ла ҡатнашты һәм үҙҙәренең эшмәкәрлеге - балалар баҡсаларында, мәктәптәрҙә башҡортса сығыш яһауҙары, "Башҡорт ҡунаҡханаһы", "Өләсәйем һандығы", "Инәйҙәр бәхете", "Беҙҙең ауыл", "Ирегет абруйы", "Атайҙар мәктәбе", "Ил батырҙары" тигән әңгәмәләр-уйындар ҡороуҙары тураһында һөйләне. Райондағы башҡорттар төрлө йолаларҙы, ырымдарҙы ла яҡшы хәтерләй икән. Мәҫәлән, тиҙ генә мал һатыу ырымдарын барлап сыҡтылар: "Малыңды һатҡанда уны бәйләгән бауҙы яңы хужаһына бирмәйһең. Мал артынан буш биҙрә сиртәһең (Былыһы ҡотоңдо ебәрмәй, үҙеңә саҡырыу була микән? Ҡорт айырғанда ла саңҡылдатып тимер һуғалар бит. - **Авт.**). Һатып алынған малдың алдына боронғо ырыу тамғалы таҫтамал йәйеп (жәйеп, тиҙәр), шунан ғына ихатаға кертәбеҙ. Мал һатып алғас, артҡа әйләнеп ҡарарға ярамай, етәкләп, йортоңа хәтле алып ҡайтырға кәрәк. Малды һатҡанда унын һыртынан кеше күрмәгәндә генә бер аҙ йөнөн ҡырҡып алып, һарай мөйөшөнә ҡыҫтыраһың..." Силәбе ерлегендә элекке йолаларҙың тотороҡло йәшәүенә, көслө рухлы, энергетикалы кешеләр күп булыуына ишара булды был.

Өфө дәүләт сәнғәт институтын тамамлаған юғары белемле ҡурайсы һәм фольклор белгесе Илмир Мансур улы Махиянов яңыраҡ Арғаяш районы мәҙәниәт комитеты етәксеһе булып эшкә килгән. Үҙе Баймаҡ районы Төркмән ауылы егете. Ул да киләсәктә бай фольклорлы, заманса ҡарашлы арғаяш таланттарын ҙур сәнғәт юлына алып сығыу тураһындағы уй-ниәттәре менән уртаҡлашты: "Ифрат сағыу талантлы йырсылар, бейеүселәр, театр сәнғәте маһирҙары күп Арғаяшта, - тине ул. - Бында тәрән халыҡсан традициялар һаҡланған. Был яҡтарға Башҡортостанда махсус белем алған музыканттарҙы саҡырыр инем, сөнки ҡурай, баян, думбыра, ҡумыҙҙа өйрәнергә теләүсе йәштәр күп. Шулай уҡ театр режиссерҙары, күмәк халыҡ менән тамашалар ҡора алған режиссерҙар ҙа кәрәк, улар бындағы һәүәҫкәрҙәрҙе оло сәнғәткә йәлеп итер ине..." Бына шундай уйҙар менән эш башлап тора йәш белгес.

## Ҡоншаҡ районында

Ҡоншаҡ районында осрашыу Хәлит ауылында үтте. 1950 йылдарҙа Өфөлә вуз тамамлаған башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларын юллама менән был яҡтарға эшкә ебәргәндәр. Хәлит ауылына бер нисә йыл элек Ләлә апай Бейешева менән бергә килеп киткәйнек, ул бында үҙенең уҡытыусылыҡ эшен башлаған булған. Уны был ауылда бик күптәр һаман да хәтерләй булып сыҡты, ҡырҡ йыл элек булған ваҡиғаларҙы иҫкә алып, рәхәтләнеп һөйләштеләр. Тап шул осорҙа, 1957-лә, аҙаплы Маяҡ атом станцияһы шартлай, ауыр хәлгә тарыған халыҡтарҙы ошо Хәлиткә лә күсерәләр. Һалдаттар бер аҙна эсендә төҙөп биргән щитовой йорттар әле лә ул йылдарҙағы ғибрәтле хәтирәләрҙе, радиация менән ағыуланған кешеләрҙең һыпырылып ҡырылыуы фажиғәһен иҫкә төшөрөп тора.

Район хакимиәте башлығы урынбаҫары Альбина Тайып ҡыҙы Нәжметдинова ауылда ағинәйҙәр башҡарған матур эштәрҙе һанап үтте, теләктәрен әйтте. Хәлит ауыл биләмәһе башлығы Әхмәт Әхнәф улы Һәүәлиев был заманда һалйот ырыу башҡорттарының нисек донъя көтөүе, ҡатын-ҡыҙҙың тормоштағы ҙур роле хаҡында һөйләне. Ҡоншаҡ районы "Ағинәйҙәр ҡоро"н етәкләүсе Нәжибә Йәнмөхәмәт ҡыҙы Дилмөхәмәтованың башҡорт теленең көнсығыш диалектындағы сығышы ҡолаҡтарҙы иркәләп, йәнгә майҙай яғылды: "Ҡәҙерҙе туғантар! Беҙең ағинәйҙәр беренсе тапҡырға Башҡортостандың йөҙ йылдығына ҡарай кисә үткәрҙе. Баймаҡта һабантуйға, Ғафуриға йыйынға барҙыҡ, бик матур эштәгән һәм йәшәгән ағинәйҙәрҙе күреп кинәндек. Шуңа ҡарап, беҫ тә инде үҙебеҙтең телебеҫте онотмай, ойоштар үткәреп торайыҡ, тип жыйылдыҡ. Район етәкселеге лә беҫте аңдап, ярҙам итеп тора - уңа рәхмәтебеҙ ҙур". Кем нисектер, иллә мәгәр мин үҙем барған бер ерҙә һөйләш-диалекттарыбыҙҙың һутлы, мәғәнәле, образлы әйтелешенә һоҡланып, шағир әйткәнсә, халҡымдың сәскә күңеленән бал ҡортондай ынйы йыямын". Туған башҡорт теле үҙенсәлектәрен боҙмайынса һаҡлаған, әҙәби телде белмәйем, тип үҙен һәм телен кәмһетмәгән, асыҡ итеп һүҙгә ҡушылған милләттәштәребеҙгә шул хәтлем рәхмәтлемен...

Ҡоншаҡ районы ағинәйҙәре үҙҙәренең эштәре тураһында ғына түгел, ә дөйөм Силәбе өлкәһе башҡорттарына ҡағылған проблемаларҙы ла телгә алды.

Ғәшүрә Ҡадирова һүҙ алып, Хәлит мәктәбендә башҡорт теле уҡытылмауы, йәштәрҙең бер генә башҡорт яҙыусыһын да белмәй үҫеүен әсенеп һөйләне. Элек мәктәптә башҡорт теле дәрестәрен алып барған, бөгөн килеп рус теле дәрестәрен уҡытып йөрөгән Земфира Шафранская, ветеран уҡытыусы Римма Маннанова ла ошо уҡ теманы дауам итте: "Беҙҙә лә туған телде уҡытыуға ҡаршы сыҡҡан әҙәмдәр табылды. Улар башҡорт кластары асырға риза булып, ғариза яҙғандарҙы ла ҡултамғаларынан баш тартырға күндерҙе. Беҙҙең ил башлыҡтары Текслер менән Хәбиров бер булып ҡарар сығарһын ине: башҡорттар йәшәгән ауылдарҙа туған тел һәм әҙәбиәт тулы программа менән уҡытылһын, беҙ быға лайыҡ, беҙ бит быға хаҡлы!" - тине улар.

Бына шулай, ҡасандыр Хәлит мәктәбендә башҡорт телендә гөрләп үтеп торған әҙәби-мәҙәни кисәләр тынып ҡалған, йәш быуын туған телде белмәй үҫә. Бөтә Рәсәйгә ябырылған был телһеҙлек афәте башҡорт ауылдарында айырыуса ҡотороңа. Уны кире ҡайтарыр, юҡ итер көс ҡайҙа - атай-әсәй, уҡытыусылар, закондар сығарыусылар, етәкселәр ҡулындамы? "Балаға йән биргән дә, тел биргән дә, шул туған телде киҫеп бәргән дә - бары тик атай-әсәй", - ти ағинәйҙәр. Ошоно, уйһыҙ атай-әсәйҙәргә уй һалып, балаһын туған телендә уҡытыу кәрәклеген аңғартып йөрөүҙе лә улар үҙ индәренә оло бурыс итеп ала. Силәбе өлкәһе "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы рәйесе Рабиға Фәрит ҡыҙы Бикбулатова ла һәр ерҙә үҙенең сығыштарын Силәбе яғының күренекле сәсәнһүҙ оҫтаһы Рамазан Шәғәлиевтың әйткәне менән йөпләп ҡуя:

*"Йәлләйем мин туған телен*
*Бар тип тә белмәүсене,*
*Туған телендә һөйләшмәй,*
*Шаяртып көлмәүсене…"*

Шунан халыҡҡа Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың ҡобайыр һүҙен еткерә:

*Телле көйө телһеҙ башҡорттар бар -*
*Әсә телен белмәй үҫкәндәр…*
*Бармы Ерҙә тағы үҙ ҡулдары менән*
*Сабыйының телен киҫкәндәр?!"*

**(Дауамы 15-се биттә).**



*Рәбиға һәм Арыҫлан Бикбулатовтар.*

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

Иҙәнгә аяҡтарығыҙҙы тубыҡтан бөкләп ултырығыҙ, ҡулдарығыҙ терһәктән бөгөлгән һәм тубыҡтарығыҙ өҫтөндә ята, тәнегеҙ көсөргәнештән арынған, тыныс. "Бер" тигәндә, уң янбашығыҙҙы күтәреп, уны, аҙым эшләгән кеүек, алға сығарығыҙ. Был ваҡытта аяҡтар тубыҡтан турая. Бер үк ваҡытта уң ҡулбашығыҙҙы алға сығарығыҙ һәм ҡыҫҡа, шаулы итеп тын алығыҙ. Тынды сығарғанда кәүҙәгеҙҙе турайтығыҙ, янбашығыҙҙы элекке хәленә ҡайтарығыҙ һәм туҡтамайынса икенсе янбашығыҙ менән шундай уҡ хәрәкәт эшләгеҙ. Алға сығарылған һәм турайған аяҡ табанға ҡуйыла һәм, тын сығарғанда, иҙәндән табан менән шыуышып, ҡабат тубыҡтан бөгөлә. Янбаш менән алға хәрәкәт ваҡытында аяҡ иҙәндән айырыла, һуңынан төшә һәм, янбаш менән бер ваҡытта ергә тейә. Тап шул ваҡытта ҡыҫҡа шаулы тын алыу кәрәк. Әгәр ҡулдарығыҙҙы тубыҡта тотоу уңайһыҙ булһа, уларҙы ҡабырғала, ярым бөгөлгән хәлдә бил тәңгәлендә, көсөргәнешһеҙ генә тотоғоҙ һәм уларға иғтибар итмәгеҙ. Янбаш менән 8 тапҡыр атлағас, туҡтап, 3-5 секунд ял итегеҙ һәм тағы ла 8 аҙым эшләгеҙ. Ике тапҡыр "һигеҙ" эшләгәс, шулай уҡ "һигеҙ" аҙымды артҡа эшләгеҙ. Хәрәкәттәр шул уҡ. Алға-артҡа барлығы 32 аҙым килеп сығыр. Күнекмә нормаһы - 96 аҙым. Йәғни өс тапҡыр "32".

## Тын алыу күнекмәләрен индереп атлау

Берәй ваҡыт урамдағы кешеләргә иғтибар иткәнегеҙ бармы? Кемдер яйлап баҫып, ашыҡмай ғына ял итеп йөрөй, кемдер ҡайҙалыр һуңлап бара һәм ашыға. Кемдеңдер тәбиғәте тыныс, ул ашыҡмай, бәғзеләр өсөн хәрәкәт итеү - ауыр хеҙмәт. Мәҫәлән, кешенең аяғы ауырта, ә ул яңғыҙ һәм бары тик үҙенә генә ышана. Әммә икмәкханаға тиклем барып етергә, сиратта торорға йәки һөт һатылған цистерна эргәһендә торорға кәрәк, сөнки унда һөт магазиндағыға ҡарағанда осһоҙораҡ. Хәйерсе пенсияһына иркен йәшәп булмай. Ә шул тиклем көҙгө паркта яйлап йөрөгө, ҡойолған япраҡтарҙы йыйғы, саф һауаны күкрәк тултырып һулағы, ағастан өҙөлөп төшкән япраҡҡа ҡарап: "Бәлки, был көҙөм һуңғыһы түгелдер әле?" - тип уйлағы килә. "Ҡайҙа ҡоларымды белһәм, һалам түшәп ҡуйыр инем", - тиҙәр. Быны ололар туранан-тура аңлай, шуға ла һаҡ ҡыланалар, аяҡтарын шыуҙырып ҡына йөрөйҙәр, тигеҙлек юғалтыуҙан ҡурҡалар... һәм барыбер ҡолайҙар, йәрәхәтләнәләр, аяҡ-ҡулдарын һындыралар...

Ололар алған йәрәхәттәр һәм уларҙың эҙемтәһе - бөгөнгө медицинаның бәләһе. Бот һөйәге муйынтығы һынғандан һуң кемделер аяҡҡа баҫтырған осраҡта ла, ул оҙаҡ ваҡыт үҙ аллы атлай алмаясаҡ. Ә остеохондроз, остеопороз, артроз, артрит һәм башҡа быуын сирҙәре?.. 60 йәштән һуң һәр кемдә уларҙың ҡайһыһы булһа ла бар. Аяҡ быуындарының формаһын боҙоусы артроздар кешенең хәрәкәтен сикләй. Быуындарҙа ауыртыуҙар барлыҡҡа килә, бигерәк тә баҫҡыстан менгәндә. Ә элекке хрущевкаларҙа лифттар юҡ, бик йыш күп ҡатлы йорттарҙа ла лифттар эшләмәй. Был саҡта нимә эшләргә? Тап ошо ваҡытта Стрельникованың атлағанда эшләү мөмкин булған тын алыу күнегеүҙәре ярҙамға килә лә инде!

**С. КУЗИНА.**

**(Дауамы бар).**

✓ *Ауылдың башҡа ағинәйҙәре лә туған телдә белһен, үҙенең аҫаба ерендә башҡорт булып йәшәһен өсөн балалар араһында тәрбиәүи эштәр алып барыуҙары, уларҙы төрлө һөнәрҙәргә өйрәтергә тырышыуҙары тураһында һөйләне.*



БЕҘҘЕҢ СӘФӘРҘӘР

# КӨМӨШ КҮЛДӘР ИЛЕНДӘ,

## аҫыл башҡорт ерендә

(Башы 12-13-сө биттәрҙә).

### Красноармейский районында

Красноармейский районының Тәүкәй менән Себәйгүрә (Яҡуп) тигән башҡорт ауылдарынан бер төркөм ағинәйҙәр, уҡытыусылар, китапханасылар беҙҙе Миәс ауылында - район китапханаһының аулаҡ һәм иркен залында көтә ине. Китапханала булғас, шунда уҡ бында башҡорт китаптары булыу-булмауы менән ҡыҙыҡһындыҡ. Тик бер генә дана ла башҡорт китабы юҡ икәнен, әммә ихтыяж булыуын, йәғни башҡорт телендәге баҫмаларҙы уҡырлыҡ кешеләр барлығын асыҡланыҡ. Сөнки Өфөнән килтергән китаптар, гәзиттәр, башҡорт милли кейемдәрен һүрәтләгән календарҙарҙы тарата башлағайныҡ, йыйылыусыларҙың уларҙы ихлас ҡабул итеүен, шунда уҡ гәзит биттәрен асып, уҡырға тотоноуҙарын күрҙек. Китапханаға ла Башҡортостан тураһында мәғлүмәт бирерлек матур баҫмалар тапшырылды. Шуға ла китапханасы Розазия Мөхәмәтованың, кемдең был яҡтарға юлы төшә - һәммәһе лә Тәүкәй, Себәйгүрә балалары өсөн башҡортса китаптар, дәреслектәр, журналдар алып килһә ине, тигән теләген еткерәбеҙ гәзитебеҙҙе уҡыусыларға. Был ҡыҙ Тәүкәй ауылы китапханаһында эшләй. "Ике йөҙ йортта алты йөҙҙән ашыу кеше йәшәй, беҙ башҡорттоң ҡалмаҡ һәм сарт ырыуынанбыҙ", тип, беҙҙе тыуған ауылы менән таныштыра һалып та ҡуйҙы. Уға райондың "Ағинәйҙәр ҡоро" етәксеһе Нәбирә Сәйғәфәрова ҡушылып, ауылда киң таралған фамилияларҙы, шәхестәрҙе һанап китте. Мәктәп директоры Фәриҙә Ғилмetдинова ла район тураһында байтаҡ мәғлүмәт биреп өлгөрҙө. Ул беҙҙең осрашыуға өлкән класс уҡыусыларын да алып килгәйне. Уларҙың кемдәрелер беҙҙең һөйләгәнде тыңланы, кемдәрелер Сәрүәр Аслаеваның оҫталыҡ дәресендә ҡатнашты. Себәйгүрә ауылы ағинәйе Мәнәүәрә Байбулатова һөйләгәндәр "Йыйылыусылар беҙҙең әҙәби башҡорт телендә һөйләгәнде аңлаймы икән?" тигән шигебеҙҙе таратып ебәрҙе: "Бында йыйылған балалар ҙа, үҙебеҙ ҙә һеҙҙе яҡшы аңлайбыҙ. Ғөмүмән, беҙҙең ауылда барыһы ла башҡортса һөйләшә, сөнки элек ауылда бик матур мәктәп булды, башҡортса ғына уҡытылды. Әксән Ибраһимов атлы уҡытыусы беҙҙең ауыл кешеләрен шат, бергәм, аҡыллы итеп тәрбиәләне, дан кеше ине, туған телгә, әҙәбиәткә һәм тормошҡа һөйөү менән, хөрмәт менән ҡарарға өйрәтте", - тине ул. Ошо уҡ ауылдың башҡа ағинәйҙәре лә туған телдә белһен, үҙенең аҫаба ерендә башҡорт булып йәшәһен өсөн балалар араһында тәрбиәүи эштәр алып барыуҙары, уларҙы төрлө һөнәрҙәргә өйрәтергә тырышыуҙары тураһында һөйләне. Ғөмүмән, был районда ла милләттәштәрҙең ихласлығын, берҙәмлеген, бер-береһенә хөрмәтен тойҙоҡ.

Әйткәндәй, бөгөн Дубровка ауылында йәшәүсе Тәүкәй ауылы уҙаманы Тәлғәт Ғәйнетдин улы Хәйеров та беҙҙең осрашыуға килеп етте. Заманында Силәбе өлкәһендә юғары вазифала эшләгән, өлкә башҡорттары ҡоролтайы етәксеһе булған Тәлғәт ағайҙы айырыуса шатланып ҡаршыланы яҡташтары. Тимәк, ул ысынлап та силәбеләрҙең хөрмәтенә лайыҡ аҡһаҡал, беҙ ҙә уны шулай тип беләбеҙ.

### Сибәркүл районында

Артабан беҙ Сибәркүл районының Ҡаҙбай ауылына киттек. Бер нисә йыл рәттән өлкәлә юл буйындағы атамаларҙы төҙәтеп яҙыу буйынса эштәр алып барылған, шул арҡала бик күп топонимик атамаларҙың башҡортса әйтелеше танымаҫлыҡ булып үҙгәртелгән йәки бөтөнләй төшөп ҡалған. Ошо ҙур боронғо башҡорт ауылының мәктәбендәге алтаҡтаға яҙылған "Коротовская" тигәнде төшөнә алмай торҙоҡ. Баҡһаң, Ҡаратал тигән атаманы шулай яҙып киткәндәр икән. Ә бына башҡорт ауылы осонда әллә ҡайҙан балҡып ултырған ҙур йәшелсә һаҡлау базаһының ҡоймаһына ат башындай хәрефтәр менән "Русские овощи" тип яҙып ҡуйылған. Күрәһең, йәшелсәнең "милләте" бар, ә бында нисәмә быуат йәшәгән халыҡтың милләте юҡ...

Ҡаҙбай ауылы балалары беҙҙе бейеү менән ҡаршы алды. Уларҙың килешле милли кейемдә теүәл һәм иплe хәрәкәттәр менән матур башҡорт көйөнә баҫыуы шунда уҡ кәйефте күтәреп ебәрҙе. Артынса уҡ башҡорт милли кейемендәге ҡатын-ҡыҙҙар ансамбле йырлап ебәрҙе. Дүрт ауыл балалары уҡый икән был мәктәптә: Ҡаҙбай, Көләс (Красный Ключ), Атъетәр, Ҡаратал, Бишкел. Мәктәп директоры - йәш һәм көләс йөҙлө Мәғәфүр Саҙрый улы Йомашев, баш ағинәй Гөлсимә Әбүзәр ҡыҙы Йомашева, башҡорт тарихсыһы һәм ғалимы, Абдулҡадир Инандың ейәне Таһир Миҙхәт улы Шаимов беҙҙе матур мәктәп бүлмәләренә алып инә. Ҡатын-ҡыҙҙар шунда уҡ беҙҙең юлдашыбыҙ - рәссам Сәрүәр Аслаеваның күргәҙмәһен һырып ала. Биҙәүестәр һайлай, кейем өлгөләрен самалай. Ҙур ғына класс бүлмәһендә күҙгә-күҙ ҡарашып һөйләшеү башлайбыҙ. Кинәнеп, ҡаҙбайҙарҙың һөйләшен тыңлайбыҙ: "Караурман" жырын беҫтең ауыл кешеһе Рамаҙан ҡарт сығарған, беҙ уны онотмабыһ, шуңа бергә жейелгәбыһ",- тип әйтеп ҡуя бер ағинәй. Кемдәрҙер урындағы башҡорттарҙың милли аш-һыу рецебы менән уртаҡлаша: "Сумар - ул ҡаймаҡ, он, тоҙ ҡушып баҫылған ҡамыр икән, уны бүлгеләп-йолҡҡолап ҡайнар һөттә бешерәләр; әүмәлә - ул ҡаймаҡты оҙаҡ ҡайнатып, саҡ ҡына он һалып, бутҡа рәүешендә бешерелгән ризыҡ". "Урыҫ халҡы беҫкә хайран ҡала, ҡандай берйәнһегеҙ, тиһ. Байрамдарҙа бешергәһ һый-хөрмәткә бөтә кеше ябырыла, тотош ашатабыҙ, йәлдәмәйбеҙ!" - ти тағы бер ағинәй һәм башҡорт ҡайҙа ғына йәшәһә лә, уның ҡунаҡсыллығы айырылғыһыҙ бер сифаты инде, тигәнде мисәтләп ҡуя.

Шулай итеп, Ҡаҙбай ауылында рәхәтләнеп һөйләшеп, уйын-көлкө араһында ил хәлдәрен белешеп ултырҙыҡ. Бишкил ауылы уҙаманы, ошо мәктәптә технология уҡытыусыһы булып эшләүсе Данир Ғиләжетдин улы Шарапов йәштәргә ауылдың тарихын һәм киләсәген аңлатыу эшенә ныҡлап тотонғанын һөйләне. Мәктәп директоры балаларҙы бөтә өлкә, Урал тауҙары буйлап сәйәхәт-походтарға йөрөтөүен, ата-әсәләре менән бергә сәйәхәт иттереп, берҙәмлек нигеҙе һалыуын телгә алды. Осрашыуға йәш кенә балаһын күтәреп, декретта ултырыусы башҡорт теле уҡытыусыһы ла килгәйне. Уны күреп шатландыҡ, сөнки бөтә өлкә буйлап өс көн йөрөй торғас, аҙнаһына ике сәғәт булһа ла башҡорт теле дәресе уҡытылған мәктәпте һәм башҡорт теле уҡытыусыһын күрҙек...

### Шундай диалекттар...

Силәбе яғында башҡорт теленең һалйот һөйләшe әле лә яҡшы һаҡлана. "Тел - тере шишмә, үлмәгән, бөгөнгә еткән", тигән бөйөк шағирыбыҙ Баязит Бикбайҙың рухына мең аят булып ишетелә минә был һөйләштең моңо. Сағыштырып ҡарап, төрлө һөйләштәр араһынан әҙәби тел нормаларын уртаға сығарыу ни хәтлe ҡатмарлы һәм яуаплы булғанын аңлайһың. Бынан йөҙ йыл әүәл, 1924 йылда, Шәһит Хоҙайбирҙин етәкселегендә башҡорт әҙәби теле ҡабул ителә. Тарихта ул комиссияла кемдәр булғаны, ҡырҡ ырыуҙан торған башҡорттоң берҙәм әҙәби телен айырып күрһәтеү өсөн ниндәй бәхәстәр ҡупҡаны әле һаман беҙҙең йөрәккә ҡағыла һәм ҡолаҡҡа салына төҫлө. Башҡорт теленең бик-бик боронғо төрки тамырҙарын, байлығын, тарихын билдәләү өсөн әҙәби дөйөм телгә "ауылдар, аттар, тауҙар" формаһы, йәғни "-тар, -дар, -ҙар" ялғауҙары алынған. Күпселек башҡорттар "урманнар, ҡыҙлар, егетләр" тип һаман да һөйләшә, ләкин көнсығыштағы ҡыуаҡан, һыҙғы, тамъян, терһәк, һалйот, барын-табын ырыуҙары телендәге үҙенсәлектәр әҙәби тел нигеҙенә һалына. "Беҫ һеҫтекенсә һөйҙәшмәйбеҙ ҙә уы, беҙтең телебеҙ бүтәнсә", тигән булалар ҡайһылары. Киреһенсә бит, туғанҡайҙар, һеҙҙең телдә ҡәҙерләп һаҡланған ялғауҙар - башҡорт теленең бөтә төрки телдәр араһында иң байы һәм тамырлы икәнен күрһәтеүсе бер сифат. Беҙ уларҙы бөгөнгәсә һаҡлап һөйләшкән милләттәштәргә рәхмәтлебеҙ. Һалйот, ҡыуаҡан, ҡатай һәм әйле һөйләшен тыңлап, кинәнәбеҙ генә, был ерле халыҡтың йәтеш кенә йор һәм ағымлы телен кәмһетергә, киҫергә бер кем дә баҙнат итмәҫ. Миҫал өсөн башҡорт һөйләштәренән бер нисә генә һүҙҙе сағыштырып ҡарайыҡ, башҡорт телендә һөйләшкән төбәктәрҙә улар бөгөн бөтәһе лә ҡулланыла: беҙҙеке - беҫтеке, беҙнеке, безнеке; һеҙҙеке - һеҫтеке, һестеке, һеҙнеке, сеҙнеке; ҡыҙҙар - ҡыҫтар, ҡыһтар, ҡыҙлар, ҡызлар, ҡыздар; егеттәр - егетләр, жегеттәр, жегетләр; әсәй - инәй, әней, әннә, әсей; атай - ата, әтей, әттә; өләсәй - ҡартәсәй, ҡәрсәй, нәнәй, ҙуринәй, дәүинәй, ҡартинәй, әбей һ.б. Шунан үҙегеҙҙе әҙәби тел төҙәргә ултырған ғалим тип хис итегеҙ, ҡайһыныһын һайлар инегеҙ? Бик ныҡ баш ватырға ла тура килә. Ләкин халыҡтың аңына, рухына, киң һәм тәрән тарихи хәтеренә таянып, әҙәби телле булғанбыҙ, уны бер ҡасан да юғалтырға, һанға һуҡмаҫҡа, өйрәнмәҫкә хаҡыбыҙ юҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡортостан Республикаһы Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының мәҙәни, социаль һәм рухи үҫеш буйынса "Ағинәй" төбәк йәмәғәт ойошмаһы нигеҙ йыл инде республикалағы ғына түгел, илдәге һәр бер башҡорт ҡатын-ҡыҙын барлап, хәлен-торошон белешеп, үҙ-үҙен һәм йәш быуынды боронғо милли тәртип талап иткәнсә - сабырлыҡ, аҡыл, тоғролоҡ менән үҙ асылында тәрбиәләргә саҡыра. Силәбе яғында ла ошо йүнәлешкә асыҡ йөҙ борған һәм халыҡ киләсәге, бөгөнгө рухи сәләмәтлеге өсөн ваҡытын-белемен йәлләмәгән фиҙаи йәндәр "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһына берләшеп, уны рәсми теркәтеп ҡуйған. Осрашыуҙарыбыҙ, һөйләшеүҙәребеҙ улар менән булды. Беҙҙең төркөмдә төп көс булған рәссам-дизайнер Сәрүәр Аслаева теләгән бер кешене башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары биҙәүестәрен эшләргә өйрәтте, уның өйрәнсек-уҡыусылары араһында ҡайнаған йәштәр ҙә, өлкәндәр ҙә - һәр береһе үҙенә һәм яҡташтарына милли күркәмлек арттырыусы ҡул эшенә ихлас тотондо.**

**Осрашҡан бер урында "Кем ул ағинәй?" тигән һорау ҡуйылды. Республика "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы Янбаева үҙенең бер нисә минутлыҡ сығышында ошо һорауға теүәл генә яуап бирҙе: "Ғаилә усағын, милләт ҡотон, башҡортлоҡ асылын, өләсәй-инәйҙәр асылын үҙ ҡанында, рухында, һын-йөҙөндә һаҡлаған ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ, нисә йәштә булыуға ҡарамай, Ағинәй вазифаһында. Ағинәйлек - үҙендә милләт әсәһе, милләт тәрбиәсеһе, хәҙистәрҙә әйтелгәнсә, "...баланың, буй еткән кешенең, кешелектең күркәм холҡон ҡойоп ҡуйыусы зат" итеп тойоу, кәңәшкә, тоғро юл табыуға мохтаж йәмғиәт вәкилдәренең күҙ төбәп бара торған кешеһе булыу, аҡыл, фекер, яуаплылыҡ, күркәм холоҡ, матур йөҙкиәфәт-кейем йәһәтенән дә өлгө булып тороу ул. Һәр башҡорт ҡатын-ҡыҙы ошо ағинәйлек сифаттарына эйә булырға ынтылып йәшәһә, милләт тамырҙарын ныҡытыуға тос өлөш индерәсәк..."**

**Сәрүәр СУРИНА.**
**11-13 сентябрь, 2019 йыл.**







*Сибәркүл районы, Ҡаҙбай ауылында.*

*✓ Бер-береңде аңлау өсөн оҡшашлыҡ кәрәк, бер-береңде яратыу өсөн бер-береңә оҡшамаған булыу кәрәк.*

*(Ханна Арендт).*



*СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ*

# "ҺЕҢЛЕКӘШ"



**"Һеңлекәш" фильмы Белорет районының Яңы Хәсән ауылында төшөрөлгән. Проект өсөн махсус рәүештә ҡуйыусы рәссам Вячеслав Виданов етәкселегендә декораторҙар 1940 йылдарҙағы өйҙәрҙең аныҡ күсермәләрен төҙөгән. Фильмдың режиссеры - танылған актер һәм режиссер Александр Галибин.**

"Беҙ шундай шәп урында һоҡланғыс кешеләр менән эшләнек, һеҙҙең төйәктә эшләү - ҙур бәхет. Мостай Кәрим - халыҡтың йөрәге, шуға беҙгә оло яуаплылыҡ йөкмәтелде. Был минең тормошомда иң тулҡынландырғыс көндәрҙең береһе булды - рус кешеһе башҡорт халҡы, тамырҙары менән башҡорт мәҙәниәтенә барып тоташҡан тарихы тураһында фильм төшөрә. Картина башҡортса бара, беҙ экранда башҡорт теленең русса тауышҡа ҡарағанда көслөрәк булыуын теләнек һәм шуға өлгәштек. Мин һеҙҙең республикаға, ошонда эшләгән кешеләргә ғашиҡмын", - тине Александр Галибин.

Фильмда төп ролдәрҙе 7 йәшлек Арыҫлан Ҡырымсурин (Йәмил) менән 9 йәшлек Марта Тимофеева (Оксана) бик оҫта башҡарҙы. Арыҫлан беренсе тапҡыр ғына киноға төшһә, йәш актриса - ысын йондоҙ. Марта Тимофееваның иҫәбендә кинола һәм сериалдарҙа 40-тан ашыу эше бар. "Һеңлекәш"тә төшөү өсөн Мартаға башҡорт телен өйрәнергә тура килгән. Фильмда шулай уҡ Илгизә Ғилманова, Виталий Салий, Рәүис Заһитов, Тимур Ғарипов, Гөлназ һәм Руслан Хайсаровтар, Сәғиҙулла Байегет, Ирада Ҡадирова, Йософ һәм Фәнис Рәхмәтовтар һәм башҡалар йәлеп ителгән. Шулай уҡ "Рейд" хәрби-тарихи клубынан 10-дан ашыу кеше ҡатнаша. Операторы - "Ищите женщину", "Крейцерова соната", "Покаяние", "Плащ Казановы" кеүек билдәле картиналарҙы төшөргән легендар Михаил Агранович. Фильмға музыканы Илья Духовный яҙған. Тулы метражлы нәфис фильм төшөрөү өсөн повеҫка бер нисә эпизод өҫтәлгән. Сценарий авторы - Айҙар Аҡманов. "Һеңлекәш" хәрби драмаһын Рәсәй Федерацияһының Мәҙәниәт министрлығы һәм Мостай Кәрим исемендәге фонд булышлығында "Мотор Фильм Студия" кинокомпанияһы төшөргән.

# БЕҘҘЕКЕЛӘР ҺОҠЛАНДЫРА

**М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры Иркутскиҙан ҡайтты.**

Александр Вампилов исемендәге XII Халыҡ-ара заман драматургияһы театры фестивале афишаһында Рәсәй, Франция, Польша, Монголия һәм Израиль спектаклдәре күрһәтелде. Режиссер Айрат Абушахманов ҡуйған "Зөләйха күҙҙәрен аса" спектакле айырым урын билән‌е - Вампилов фестивале ошо тамаша менән ябылды. Ул тамашасылар араһында резонанс тыуҙырҙы, спектаклгә билеттар фестиваль башланырҙан бер нисә ай алда һатылып бөтөүе билдәле булды. "Иркутскиҙа йәшәүселәр легендар спектакль менән осрашыуҙы түҙемһеҙлек менән көтөүҙәре хаҡында әйтте. Илдең тарихы, олатай-өләсәйҙәре шаһит булған 30-сы йылдарҙағы ҡот осҡос ваҡиғалар тураһында спектаклде ҡарау улар өсөн бик мөһим ине, - тип һөйләне актерҙар. - Тамашасылар спектаклде бер тында, ҡайһы берәүҙәр хатта баҫып ҡараны. Спектакль тамамланғас, режиссерға һәм актерҙарға театр фойеһында, грим бүлмәләрендә әллә күпме ихлас рәхмәт һүҙҙәре яңғыраны". Театр тәнҡитселәре Павел Руднев һәм Геннадий Тростянецкий спектаклдә ҡатнашыусыларға үҙҙәренең фекерҙәрен еткерҙе. Иркутск өлкәһе губернаторы коллективты уңышлы сығыш яһауы менән ҡотланы. Башҡорт драма театрын яңы ҡалалар көтә, "Зөләйха күҙҙәрен аса" фестивалдәрҙә ҡатнашыуын дауам итә.

# ЭТНИК МУЗЫКАНТТАР ЙЫЙЫЛА

**Башҡортостанда "Мосафир" этник музыка форумы уҙа. Проекттың ойоштороусыһы - Башҡортостан Республикаһының Драматургия һәм режиссура үҙәге. Проект дәүләт телдәрен һәм республика халыҡтары телдәрен һаҡлау һәм үҫтереү буйынса 3,5 миллион һум күләмендә Башҡортостан Башлығы грантын алды.**

"Мосафир" форумы 10-12 ноябрҙә үтә. Проекттың майҙансығы - "Торатау" конгресс-холы, "Өфө уттары", Music hall 27, Башҡорт дәүләт филармонияһы. Проект сиктәрендә этник музыка өлкәһендә 20 алдынғы белгес ҡатнашлығында музыкаль конференция, продюсерҙар, тур ойоштороусылар өсөн оҫталыҡ дәрестәре күҙалланған. Шулай уҡ төбәк презентациялары өсөн күргәҙмә зоналары ойоштороу ҡарала.

Рәсәйҙә этник музыка өлкәһендә берҙән-бер профессиональ премия - Russian World Music Awards менән бүләкләү тантанаһы һәм бер нисә музыкаль шоу форумдың иң күркәм ваҡиғаһы буласаҡ. Урындағы этно-башҡарыусылар килгән продюсерҙар һәм эксперттар менән аралаша аласаҡ һәм донъя коммерция баҙарына сығыу мөмкинлегенә эйә буласаҡ.

"Беҙ этник музыканы үҫтереү өсөн шарттар булдырырға теләйбеҙ. Рәсәй һәм сит ил эксперттары килеүенә күрә музыка ротацияһына, башҡарыусыларыбыҙҙың турҙарҙа, фестивалдәрҙә ҡатнашыуына килешеүҙәр төҙөп булыр тип көтәбеҙ", - тип һөйләне Башҡортостандың Драматургия һәм режиссура үҙәге директоры Әлиә Яхина. Ҡатнашыусыларҙың географияһы киң була. Байрамға Польшанан, Бөйөк Британиянан, Германиянан, Кореянан, Чехиянан, Нидерландтарҙан һәм башҡа илдәрҙән музыка даирәләре вәкилдәре, шулай уҡ музыка тәнҡитселәре киләсәк.

*БАШҠОРТСА ҺҮҘЛЕК*

# БИҘГӘЛӘК НИМӘ БУЛА?

**Биология фәндәре докторы, БДУ-ның Сибай институты профессоры Сәфәрғәли Йәнтүриндың "Зоология терминдарының русса-башҡортса, башҡортса-русса һүҙлеге"нән Башҡортостанда йыш осраған ҡоштарҙың башҡортса-русса атамалары менән танышығыҙ.**

**серощекая поганка** - аҡбаш сыпҡай
**серый гусь** - ҡыр ҡаҙы
**серый сорокопут** - ваҡ һайыҫҡан
**серая куропатка** - ҡыр тауығы
**серая неясыть** - һоро ябалаҡ
**серый журавль** - ябай торна, һоро торна
**сизая чайка** - күк аҡсарлаҡ
**сизоворонка** - күк ҡарға
**сизый голубь** - күк күгәрсен
**скопа** - кәлмәргән
**скворец обыкновенный** - сыйырсыҡ
**славка садовая** - һаҙ килейеге
**славка-завирушка** - килейек
**славка серая** - һоро килейек
**снегирь** - ҡыҙылтүш
**сова болотная** - һаҙ ябалағы
**сойки** - барабалар
**соловей восточный** - һандуғас
**сорока** - һайыҫҡан
**сплюшка обыкновенная** - һыҙғыраҡ ябалаҡ
**степной орел** - көсөгән, дала бөркөтө
**стерх** - аҡ торна
**стрепет** - биҙгәләк
**стриж** - ҡара ҡарлуғас, керәшә
**степная тиркушка** - сипылдауыҡ
**сыч воробьиный** - һаҡ-суҡ, кескәй ябалаҡ
**тетерев** - ҡор
**травник** - тәтелдәүес
**трясогузка желтая** - һары сәпсек
**трясогузка** - сәпсек
**турпан** - ҡара өйрәк
**турухтан** - ҡорохтан
**тювик (ястреб)** - ваҡ ҡарсыға
**удод** - һөҙһөт
**утка** - өйрәк
**ушастая сова** - өкө ябалағы
**филин** - өкө
**фифи** - божор сәпсәү
**ходулочник**- оҙонаяҡ сәпсәү
**хохлатая синица** - бүрекле тебейек
**хохлатая чернеть** - бүрекле ҡара өйрәк

**(Дауамы. Башы 33-34, 37-38-се һандарҙа).**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ИҪЕРЕК МЕНӘН ТИЛЕ БЕР

Ир хазинаһы - иҫке һүҙ, уның сырағы - иҫке дуҫ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Мөхәббәт һуҡыр, тиҙәр, ә бына изгелек аңлы булырға тейеш.

**(Ральф Эмерсон).**

Кешеләр тәнҡитләүселәргә һәм ижадсыларға бүленә.

**(Николай Рерих).**

Эш донъя насарланып китеүҙә түгел, ә ваҡиғаларҙы яҡшыраҡ яҡтырта башлауҙа.

**(Гилберт Честертон).**

Ҡоштар хатта атлап ҡына йөрөгәндә лә үҙенең ҡанаттарын тоя.

**(Антуан-Марин Люмьер).**

Бер нәмәгә лә өҫтән ҡарама. Һин һәр әйберҙең үҙенсәлеген дә, уның лайыҡлы яҡтарын да шәйләргә тейешһең.

**(Марк Аврелий).**

Һәр көндөң төнө бар, һәр рәхәтлектең кире яғы бар.

**(Америка мәҡәле).**

Бер-береңде аңлау өсөн оҡшашлыҡ кәрәк, бер-береңде яратыу өсөн бер-береңә оҡшамаған булыу кәрәк.

**(Ханна Арендт).**

Беҙҙең быуатта йәшәгән кешеләр күп уҡый, был уларға аҡыллы булырға ҡамасаулай.

**(Оскар Уайльд).**

Һинең дошманың белергә тейеш булмағанды дуҫыңа һөйләмә.

**(Артур Шопенгауэр).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер бай сауҙагәр тылсымлы һәләтлектәре менән тирә-йүнгә билдәле аҡһаҡал эргәһенә килә һәм уға шундай үтенес белдерә:**

**- Зинһар, минең ғаиләм өсөн ниндәйҙер изге доға яҙып бирсе. Мин үҙемдең балаларымды һәм ейәндәремде бик яратам, уларҙың бәхетле булыуын теләйем...**

**Аҡһаҡал бер ҡағыҙ ала ла, ниндәйҙер һүҙҙәр һыҙғылап, сауҙагәргә тоттора. Аҡһаҡалдың доғаһы бик ҡыҫҡа була һәм ул шундай һүҙҙәрҙән тора: "Олатай донъя ҡуйҙы, улы донъя ҡуйҙы, ейәне донъя ҡуйҙы". Сауҙагәр был һүҙҙәрҙе уҡығас, асыуынан ҡыҙарып китә һәм: - Һин миңә нимә яҙып бирҙең? Мин бит һинән ҡарғыш түгел, доға яҙыуыңды һораным, - тип ҡысҡыра.**

**- Һин аңламаның, - ти аҡһаҡал. - Беҙ барыбыҙ ҙа бер ҡасан донъя ҡуябыҙ. Әгәр ҙә мин: "Ейәне донъя ҡуйҙы, улы донъя ҡуйҙы, олатаһы донъя ҡуйҙы", - тип яҙһам, был ҡарғыш булыр ине. Ә мин яҙған һүҙҙәр дөрөҫ булыр. Әгәр ҙә һеҙ был донъянан мин яҙған эҙмә-эҙлектә китһәгеҙ, бик бәхетле буласаҡһығыҙ...".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
27 сентябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3707
Заказ - 1915/09